ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21-27 ғинуар (һыуығай) 2023

№2 (1044)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡортостан - үҙенсәлекле төбәк**



4

**Улдарыбыҙҙың эске иманы...**

**үҙендә генә түгел, милләтте оятҡа ҡалдырырға юл ҡуймай!**



8-9

**Башҡорт халыҡ йыры - булмышым**



11

**Йәшләй һөйгән йәрең...**

**ятҡа ҡалһа**



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!* Яңы 2023 йылда ла *"Киске Өфө"* менән бергә ҡалыуығыҙға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Әйләнә-тирәгеҙҙә гәзитебеҙгә яҙылырға өлгөрмәй йә онотоп ҡалыусылар булһа, әйтә күрегеҙ: улар *"Киске Өфө"*гә (ПР905 индекс) *17 февралгә* тиклем яҙылып, марттан алдыра башлай ала. Дүрт айға яҙылыу хаҡы - *532 һум 40 тин* тора. Бергә булайыҡ!**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Рәсәй Президенты тарафынан 2023 йылды Педагог һәм остаз йылы тип иғлан итеү уҡытыусы һөнәренең абруйын арттырырға булышлыҡ итерме?

***Ләйсән САФИУЛЛИНА, Өфөләге 2-се республика күп профилле "СМАРТ" полилингваль гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Туған телдәр уҡытыусыларының Бөтә Рәсәй оҫталыҡ класы еңеүсеһе:*** Уҡытыусы - ул ижадсы. Һәр көн дәрестәребеҙгә әҙерләнеп, асылда, бала күңеленә нисек дөрөҫ юл табырға тип ижад итәбеҙ, уйланабыҙ. Әсә теленДә дөрөҫ һөйләшергә, уҡырға-яҙырға, уның менән ғорурланырға нисек өйрәтергә? Шуныһы раҫ һәм мөһим: тыуған еребеҙҙе, әсә телебеҙҙе, ватаныбыҙҙы һөйөүгә юл фәҡәт тыуған тел аша, ошо тел өйрәнелгән дәрестәр, уны уҡытҡан уҡытыусы аша һалына. Дәрестәрҙе мөмкин тиклем ҡыҙыҡлыраҡ, йәнлерәк һәм һөҙөмтәлерәк итеү өсөн үҙем һәр ваҡыт өҫтәмә материалдар, сығанаҡтар эҙләйем, һорауҙар ҡуям, яңы алымдар эҙләйем. Балалар дәрестәрендән ялҡмаһын, киреһенсә, тыуған тел һәм әҙәбиәт дәресенә килергә атлығып торһондар, тиһәң, үҙеңә лә күп белергә, дәрес-лектән тыш ҡыҙыҡлы, фәһем булырҙай мәғлүмәттәр тупларға, даими рәүештә уҡырға тура килә, өлкәнерәк һәм тәжрибәлерәк коллегаларыңа мөрәжәғәт итеүҙән дә тартынырға ярамай, тип уйлайым.

Теләгем шул: республикабыҙ мәктәптәрендәге тәжрибәле һәм заманса технологияларға ярашлы теге йәки был предмет буйынса уңышлы эшләп йөрөүсе уҡытыусыларҙың методик алымдарын өйрәнеү өсөн ижади майҙансыҡтар булдырылһын ине. Остаз-тәрбиәселек хәрәкәтен, ғөмүмән, киңерәк йәйелдереү йәш уҡытыусыларға ҙур файҙа буласаҡ. Шул уҡ ваҡытта алдынғы мәктәп һәм балалар баҡсалары эше менән телевидение тапшырыуҙары, махсус репортаждар аша ла танышыу ҡамасауламаҫ ине. Педагог һәм остаз йылы булдырыу тормошобоҙҙағы тап ошо өлкәгә етәкселәр, киң йәмәғәтселек һәм ата-әсәләр иғтибарын йәлеп итеү, хеҙмәттәшлек күрһәтеү, мәктәп проблемаларын оператив хәл итеү маҡсатын ҡуя тип аңлайым, һәм шулай булыр тип ышанғы килә.

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ГОСПИТАЛЬ ЯҢЫРТЫЛАСАҠ



**Ил Президенты Владимир Путин һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров осрашыу барышында кәңәшләшкән һорауҙар араһында Республика һуғыш ветерандары клиник госпиталенең яңы бинаһын төҙөү мәсьәләһе лә күтәрелде. Республика етәксеһе Президенттан дауахана төҙөлөшөн федераль инвестициялар программаһына индереүҙе һораны.**

Проект буйынса, яңы госпиталдең дауалау корпустарында 550 койка урынлаштырырға һәм бер сменала 300 ауырыуҙы ҡабул итерлек поликлиника эшен яйға һалырға ниәтләйҙәр. Биналарҙың дөйөм майҙаны 45 мең квадрат метр тирәһе тәшкил итәсәк. Уны "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһы территорияһында урынлаштырыу һәм баш ҡаланың 450 йыллығына төҙөлөш эштәрен тамамлау күҙаллана. "Бөгөн һуғыш ветерандары госпитале "Ветерандар тураһында" законға ярашлы бик ҙур медицина ярҙамы күрһәтә һәм ул урынлашҡан бина тотош яңырыу талап итә", - ти Республика һуғыш ветерандары клиник госпиталенең баш табибы Хәлил Мостафин.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, әлеге көндә госпиталь урынлашҡан бина 1860 йылда төҙөлгән һәм тәүҙә шәхси йорт, аҙаҡ Өфө епархияһы ҡатын-ҡыҙҙар училищеһы булған. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында бында эвакуацияланған госпиталь һәм Сеченов исемендәге Мәскәү медицина институты урынлашҡан. "Был йылдар эсендә тарихи бина ярайһы уҡ эшлектән сыҡҡан. Уны һаҡсыл рәүештә яңыртып төҙөү өсөн ваҡыт һәм күп сығымдар талап ителә, шуға госпиталде икенсе урынға күсерергә кәрәк", - ти был турала Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин.

## АФАРИН!

# ҺОҠ ТЕЙЕП ҠУЙМАҺЫН!

**Ошо көндәрҙә Башҡортостандан, Татарстандан, Силәбе, Ырымбур, Һамар өлкәләренән 357 уҡыусы Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында үткән Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиадала ҡатнашты. Утыҙ етенсе тапҡыр үткәрелгән сара Башҡортостан Республикаһының Беренсе Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовты бер минут тынлыҡ менән иҫкә алыуҙан башланды.**

(Дауамы 6-се биттә).




12+

✓ *Беренсе сиратта, Сергей Кравцов әйтмешләй, уҡытыусыларҙың эш шарттарын яҡшыртыу, белем биреүгә күберәк ваҡыттары ҡалһын өсөн отчет төҙөүҙәрҙе кәметеү бурыстары тора.*



ЙЫЛ ЗЫҢҒЫРЫ

# ЫСЫН УҠЫТЫУСЫ...

## остаз да ул



**Әлшәй районының Сурай ауылы мәсетендә ойошторолған "Рәхмәт әйтеү" сараһы хаҡында мин былтыр гәзиттә яҙып үткәйнем. Уҡытыусыларға рәхмәт әйтеүгә арналған тантанала мин дә сығыш яһағайным. Аҙаҡтан Сурай дөйөм урта белем биреү мәктәбе директоры Солтангәрәева Зәкиә Ғәлимйән ҡыҙы янымa килеп: "Һеҙ һөнәрегеҙ буйынса физик түгелме?" - тигән һорау бирҙе. Институтта уҡып алған белемем буйынса филолог булараҡ, бындай һорауҙың бирелеүе көтөлмәгәнсә сәйер тойолдо.**

Артабан Зәкиә Ғәлимйән ҡыҙы: "Мин үҙем физика уҡытыусыһы, шуға күрә әйтәм. Фекерләүегеҙ физиктарҙыҡы һымаҡ, ныҡлы дәлилегеҙ булмағанды әйтмәйһегеҙ", - тип һорауын нигеҙләне. Быға тиклем миңә улай тип әйтеүселәр булмағас, мәктәп директорының һүҙҙәре ҡыҙыҡ булып китте. Ғүмеремдең физика фәненә бәйле сәхифәләрен күҙ уңынан үткәргәндә, иң тәүҙә мәктәптә уҡығандағы физика уҡытыусыларым Рәүеф Бикташев, Әхмәҙулла Хәсәнов, Нурмөхәмәт Байрамғолов иҫкә төштө. Сыңғыҙ һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә уҡығанда Рәүеф Ғәлләм улы үҙенсәлекле педагогик алымдары менән беҙҙә физика фәненә ҡарата һөйөү тәрбиәләне. Бынан тыш, ул "Йәш физик" түңәрәге алып барҙы. Беҙ Рәйес Түләк менән дәрестәрҙән һуң тыуған ауылыбыҙ Буранбайға йүгереп ҡайтып, төшкөгә ашайбыҙ ҙа, түңәрәккә кире Сыңғыҙға һыпыртабыҙ. Бер мәл Австралия һунарсыларының бумеранг ҡоралын эшләнек. Ҡорал әҙер булғас, уны һынап ҡарау мәле етте. Әммә уҡытыусыбыҙ был ғәмәлде башҡарыуҙан ҡырҡа баш тартты. Нимә генә тимә, бумеранг рогатҡа ише генә түгел!

Әммә беҙ һуңынан, йылдар үткәс, Рәйес менән бумерангты уҡытыусыбыҙҙың иҫенә төшөрҙөк. 2002 йылда икебеҙҙең берлектәге "Буранбайҙың яҙған хатын уҡып" тигән китабыбыҙ сыҡҡас, Сыңғыҙ мәктәбендәге осрашыуҙа: "Һеҙ беҙҙе ошо мәктәптә уҡытып, ҙур тормошҡа бумеранг итеп осорғайнығыҙ. Ҡасандыр физика түңәрәгендә эшләгән бумерангты һынарға рөхсәт итмәгәйнегеҙ. Шуға күрә беҙ ошо китапты тотоп, бумеранг булып һеҙгә осоп ҡайттыҡ", - тип китабыбыҙҙы бүләк иттек. Ғүмерлеккә иҫтә ҡалырлыҡ ваҡиға булды ул.

Беренсе Этҡол урта мәктәбендә физика уҡытыусыларыбыҙ Нурмөхәмәт Нәбиулла улы беҙгә теоретик яҡтан ныҡлы белем бирһә, Әхмәҙулла Хәйривара улы физика фәнен фәлсәфә кимәлендә өйрәтте, уҡытыусыбыҙ ғына түгел, дуҫыбыҙ ҙа булды. Урта мәктәпте тамамлағандан һуң Рәйес әрме хеҙмәтен үткәс, мин ике йыл колхозда эшләгәс, ауыл хужалығы институтының механика факультетына юлланыуыбыҙ ҙа физика уҡытыусыларыбыҙҙың йоғонтоһонан икәнен яҡшы аңланыҡ. Бала сағыбыҙ "эдисондары" Сәмиғулла Нәүширбанов, Хәйҙәр Ғәйетбаев менән бергәләп, лампалы радиотапшырғыс (хәҙергесә - кеҫә телефоны) яһап, сымһыҙ һөйләшеүебеҙ, аэросана эшләп йөрөүебеҙ, "Йәш техник" журналындағы һәр яңылыҡты үҙебеҙҙең ҡорал итеп файҙаланыуыбыҙ - былар барыһы ла физика уҡытыусыларыбыҙҙан килә.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**2023 йыл Рәсәй Федерацияһында Педагог һәм остаз йылы итеп иғлан ителде. Уҡытыусы һәм остаз төшөнсәләренең айырмаһы бармы икән ул? Беҙҙеңсә, ысын мәғәнәһендәге уҡытыусы - ул остаз да. Мәктәптәге физика уҡытыусыларыбыҙ ана шундай самими заттар булды. Зәкиә Ғәлимйән ҡыҙының һүҙ араһындағы һорауы ана шундай хәтирәләр уятты миндә. Шулай итеп, гәзитебеҙҙәге ошо яңы "Йыл зыңғыры" рубрикаһында үҙ уҡытыусы-остаздарығыҙҙың иң хәтерҙә һәм йөрәктә уйылып ҡалған ғәмәл-тәжрибәһе тураһында һеҙ ҙә яҙып ебәрә алаһығыҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## *Рәсәй Президенты тарафынан 2023 йылды Педагог һәм остаз йылы тип иғлан итеү уҡытыусы һөнәренең абруйын арттырырға булышлыҡ итерме?*

***Айбулат ХАЖИН, Башҡортостан Республикаһы мәғариф һәм фән министры:*** Рәсәй Президенты Владимир Путин ошо хаҡта ҡул ҡуйған документта әйтелеүенсә, указ педагогтар һәм йәш уҡытыусыларҙың хеҙмәттәш-кәңәшсеһе булараҡ тәжрибәле һөнәр оҫталарының мөһим статусын таныу-танытыу маҡсатын алға һөрә. Был хаҡта В.Путин 2021 йылда уҡ: "Уҡытыусы һөнәренең мөһим ижтимағи әһәмиәткә эйә булыуын билдәләп, Рәсәй педагогикаһына нигеҙ һалыусы Константин Дмитриевич Ушинскийҙың тыуыуына 200 йыл тулыу айҡанлы 2023 йыл педагог һәм остаз йылы тип нарыҡланасаҡ", - тип әйткәйне. Рәсәй мәғариф министры Сергей Кравцов та Президент указын хуплап, уҡытыусы һөнәренең яңы сифатлы кимәленә өлгәшеү өсөн бөтәһен дә эшләйәсәкбеҙ, тип ышандырҙы. Ысынлап та, уҡытыусы бө-гөн заман талаптарына яуап бирерлек кимәлгә эйә булһын өсөн ул иң тәүҙә үҙ белемен, һөнәри оҫталығын даими камиллаштыра барырға, алдынғы тәжрибәләрҙе өйрәнергә, коллегалары менән фекер алышып, тәжрибә уртаҡлашып эшләй белергә тейеш, сөнки киләсәк быуынды тәрбиәләү, сифатлы белем биреү тап уҡытыусылар яуаплылығында бит.

Беренсе сиратта, Сергей Кравцов әйтмешләй, уҡытыусыларҙың эш шарттарын яҡшыртыу, белем биреүгә күберәк ваҡыттары ҡалһын өсөн отчет төҙөүҙәрҙе кәметеү бурыстары тора. Унан һуң, Федераль үҙәктән уҡытыусыларға эш хаҡы түләү системаһы ҡайтанан ҡаралыр тип көтәбеҙ. Әлеге көнгә педагогтарҙың эш хаҡында нигеҙ өлөш ни бары 38 процент тәшкил итһә, ҡалған өлөшө өҫтәмә түләүҙәрҙән ғибәрәт, ә беҙ киреһенсә булырға тейеш, тип иҫәпләйбеҙ. Уҡытыусылар йәнә лә шифахана-курорт дауаланыуына, ауыл ерҙәрендә коммуналь түләүҙәргә компенсация күләмен арттырыуға ла мохтаж. Бөгөнгө көндә ул ни бары 600 һум тәшкил итә. Әйткәндәй, киләһе йыл ауыл уҡытыусылары 690 мең һум күләмендә грант аласаҡ.

Ошондай һәм башҡа саралар педагог кадрҙары мәсьәләһен хәл итергә булышыр, тип өмөтләнәбеҙ, юғиһә, бөгөн мәктәптәрҙә уҡытыусылар етешмәүе сер түгел. Айырыуса эре ҡалаларҙа. Йәмғеһе Башҡортостанда 1500 педагог етешмәй. Өфөгә генә лә 200 башланғыс кластар уҡытыусыһы кәрәк. 2022 уҡыу йылында М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетына 240 студент маҡсатлы йүнәлеш менән уҡырға инде. Педагогик эшмәкәрлекте ойоштороу саралары, уҡытыусылар араһында даими рәүештә үткәрелеп килгән ижади-һөнәр конкурстары ла уҡытыусы абруйын күтәреүгә, һис шикһеҙ, булышлыҡ итә. Бына әле үткән йылдың 24-25 ноябрендә Мәскәүҙә туған телдәр, шул иҫәптән рус теле уҡытыусыларының Бөтә Рәсәй оҫталыҡ класы конкурсы уҙғарылды. Бындай конкурстар Рәсәй халыҡтарының мәҙәни һәм мәғариф бәйләнештәрен, дуҫлыҡ ептәрен нығытыуҙа ла, шулай уҡ алдынғы педагогик тәжрибә менән уртаҡлашыуҙа, укытыусыларҙың белемен камиллаштырыуҙа, ә уҡыусыларҙың телмәр мәҙәнилеген үҫтереүҙә новаторлыҡ алымы, оҫталыҡ мәктәбе булып тора. Республикабыҙ уҡытыусылары ошондай юғары кимәлдәге ярышта үҙҙәренең белем һәм тәжрибәһен күрһәтте. Туған тел уҡытыусылары араһында 2-се "СМАРТ" Республика полилингваль гимназияһынан Ләйсән Сафиуллина - 1-се, Мәсетле районы Башҡорт гимназияһы уҡытыусыһы Зилә Миңлебаева 3-сө урындарҙы яулаһа, Өфөләге 308-се Башҡорт балалар баҡсаһынан Рәшиҙә Рәхимова тәрбиәселәр араһында 1-се булды. Уңайлы шарттар һәм хеҙмәттәренә лайыҡлы түләү, һис шикһеҙ, уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәрәсәк, уларға дәртләнеп белемдәрен камиллаштырырға, ижади конкурстарҙа оҫталыҡтарын арттырып, тәжрибәләрен байытырға, йәш быуынды белемле һәм илһөйәр граждандар итеп тәрбиәләргә мөмкинлек бирәсәк, тип уйлайым.

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# УҪАЛ БУЛМАЙЫҠ!

**Бер йыл беҙҙең бишенсе һанлы балалар йортонда уҫаллыҡ күбәйҙе. Малайҙар ҡыҙҙарҙы этә-төртә, һуға, бер-береһе алдында, имеш, батырлыҡтарын күрһәтәләр.**

Мин дуҫлыҡ күпере һалырға булдым. Класс бүлмәһендә малайҙар ғына ҡалғанын көтөп йөрөнөм дә: "Ниңә беҙ гел һуғышып йәшәйбеҙ, әйҙәгеҙ, дуҫлашайыҡ!" - тинем. "Мин һеҙҙән ҡурҡмайым!" - тип тә өҫтәгән булдым. Ниңә шымышып киттеләр икән, тип башымды күтәреп ҡараһам, араларындағы иң уҫал малай - Земфир миңә табан килә ята. Коридорға сығып, ҡотолорға булдым, сөнки уның бокс түңәрәгенә йөрөгәнен белә инем. Тик ул мине ҡыуып етеп, тотоп та алды. Мин йөҙөмдө устарым менән ҡапланым. Тос йоҙроҡтар башыма, арҡама төшә, "Ҡурҡам тип әйт!" тип ҡысҡыра үҙе. Мин илайым, әммә: "Ҡурҡмайым!" - тип яуаплайым. Холҡом шулай, үлһәм дә үҙ һүҙемдән ҡайтыу юҡ. Шул саҡ оҙон мәктәп коридорының теге осонан кемдер берәү килеп сыҡты ла, "Эй!" тип ҡысҡырҙы. Фәрештә булғандыр ул! Илауымдан туҡтап, класс бүлмәһенә инһәм, Земфир юҡ, ҡурҡып ҡасҡан...

Уҫаллығы арҡаһында ғүмере лә ҡыҫҡа булды үҙенең, 25 йәшкә лә етмәне, поезда ғауға сығарып, ошо холҡонoң ҡорбаны булды...

**Айгөл АХУНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов менән хушлашыу сараһында 30 меңдән ашыу кеше ҡатнашты. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. Ул Мортаза Рәхимов менән бәхилләшергә килгән республика халҡына һәм мәтам тантанаһын ойоштороуҙа ҡатнашҡан коллегаларына рәхмәт әйтте һәм бер аҙна эсендә Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимовтың хәтерен мәңгеләштереү буйынса тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушты.

✓Республика етәксеһе Радий Хәбиров етәкселегендәге делегация - Беларусь Республикаһында. Эшлекле программа сиктәрендә бер нисә һөҙөмтәле, шул иҫәптән Беларусь премьер-министры Роман Головченко менән осрашыу, шулай уҡ делегация вәкилдәренең сәнәғәт объекттарына һәм мемориаль комплекстарға барыуы, шулай уҡ 2023 йылдың йәйендә Өфөлә үтергә тейешле Рәсәй һәм Беларусь төбәктәре форумына әҙерлек барышын тикшереү планлаштырыла, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәтенән.

✓"Башҡортостан Республикаһы - Дәүләт Йыйылышы депутатының статусы тураһында" законға тейешле үҙгәрештәр индерелде. Парламентарийҙар социаль селтәрҙәге сәхифәләрендә һайлаусыларға үҙҙәренең эше һәм Дәүләт Йыйылышы эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәт бирергә бурыслы.

✓Башҡортостан районларында һәм ҡалаларында йәшәүселәр 2023 йылда, 1 ғинуарҙан 31 декабргә тиклем, хакимиәттәрҙең, шулай уҡ халыҡҡа хеҙмәт күрһәткән дәүләт һәм муниципаль ойошмаларҙың эш һөҙөмтәләрен баһалай ала. Муниципаль берәмектәрҙең рәсми сайттарын файҙаланып, "Башҡортостан Республикаһы тауышы" порталында халыҡтың фекерен белешеү ойошторола. Унда ошо порталда теркәлгән һәр кем ҡатнаша ала. Бының өсөн интернетҡа сығыу мөмкинлеге булған компьютер йәки телефон ғына кәрәк.

✓Башҡортостанда 17 йәшкә тиклемге балаһы булған ғаиләләр һәм йөклө ҡатын-ҡыҙҙар өсөн берҙәм пособие буйынса чат-бот эшләй башланы. Уны Республика менән идара итеү үҙәге Рәсәй Социаль фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе менән берлектә әҙерләгән. Һанлы ярҙамсы пособиеға ингән ярҙам саралары, уның күләме, ғаризаны тултырыу һәм ҡарау ваҡыты, шулай уҡ граждандарҙың түләүҙәр алырға тейешле категориялары тураһында мәғлүмәттәр бирә.

✓ *Йәмғиәттә "байҙар һәм ярлылар" ҡатламы барлыҡҡа килеүе лә белем биреү усаҡтары өсөн күптән хәүеф тыуҙыра. Бай балалары араһында мәктәпкә ҡиммәтле телефондары менән һауаланыу өсөн генә килгәндәре лә бар.*



## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Рәсәй Президенты тарафынан 2023 йылды Педагог һәм остаз йылы тип иғлан итеү уҡытыусы һөнәренең абруйын арттырырға булышлыҡ итерме?

***Гөлфирә АБДУЛЛИНА, филология фәндәре докторы, Өфө фән һәм технология университеты профессоры, башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты деканы:*** Һуңғы осорҙа йылдарҙы тематик яҡтан исемләү ғәҙәте барлыҡҡа килде. Йәмғиәттәге киҫкен, тиҙ арала хәл ителеүҙе көткән мәсьәләләргә иғтибар йүнәлтеү маҡсатында эшләнә был. Шәхсән мин быны ҡәтғи генә хупламайым да, тәнҡитләмәйем дә. Быйылғы йылдың Педагог һәм остаз йылы тип нарыҡланыуынан ғына йәмғиәттә уҡытыусыларға һәм тәрбиәселәргә ҡарата хөрмәт ныҡлы артып китер, тип ышанып булмай. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, тиҫтә йылдар дауамында педагогтарҙың абруйы төшә килде. Быға сәйәси үҙгәрештәр ҙә, рухи торғонлоҡ та йоғонто яһағандыр.

Бөгөнгө йәмғиәттә илһөйәрлек тойғоһоноң ҡаҡшауы, граждандыҡ позицияһының түбән тәгәрәүе күҙәтелә. Ә бит был төшөнсәләр туранан-тура тәрбиәселәр һәм уҡытыусылар, уларҙың шәхесе, булмышы менән бәйле. Икенсе төрлө әйткәндә, балалар баҡсаһы һәм мәктәп ниндәй быуын тәрбиәләп бирә - ниндәйҙер кимәлдә йәмғиәтебеҙ ҙә шундай буласаҡ. Көнөтөнө аҡса эшләү маҡсаты менән янған ата-әсәләрҙең бала тәрбиәләргә, дөрөҫөн генә әйткәндә, ваҡыты ла ҡалмай: тимәк, киләсәкте педагогтар билдәләй!

Көнбайыш идеологияһы үҙенең маҡсатына иреште: ни тиклем генә инҡар итергә тырышһаҡ та, заман йәштәренең ҡайһылары үҙҙәрен Рәсәй исемле бөйөк илдең




тулы хоҡуҡлы вариҫтары итеп ҡабул итеүҙән алыҫ тора. Тарих дәрестәрен, ошо фәнде уҡытыуға тәғәйенләнгән дәреслектәрҙе ҡайтанан ҡарап сығыу зарурлығы юҡҡа ғына барлыҡҡа килмәне. Мәктәптәрҙә Рәсәй флагын күтәреү традицияһы йәйелдерелә. Үҙебеҙҙең республикабыҙҙа шайморатовсылар кластары асылыу ҙа - заман талабы. Тимәк, бөгөн балаларҙы тейешле юҫыҡҡа бороп ебәрерлек рухлы, белемле, сәйәси яҡтан аңлы уҡытыусыларға һәм тәрбиәселәргә ихтыяж арта.

> **...Йәмғиәттә "байҙар һәм ярлылар" ҡатламы барлыҡҡа килеүе лә белем биреү усаҡтары өсөн күптән хәүеф тыуҙыра. Бай балалары араһында уҡытыусыны һанламай, мәктәпкә зауыҡлы кейемдәре, ҡиммәтле телефондары менән һауаланыу өсөн генә килгәндәре лә бар. Совет заманында уҡытыусы һүҙе бала өсөн ҡанун булһа, хәҙерге заман педагогы - "хеҙмәт күрһәтеүсе", ә бала - "клиент". Баҙар талаптарына ярашлы, клиент һәр осраҡта ла хаҡлы, тиҙәрме шул? Түләүле мәктәптәр, балалар баҡсалары барлыҡҡа килеүе - шуға ишара.**

Ата-әсәләрҙең педагог имиджын төшөрөүгә үҙҙәре үк сәбәпсе булған осраҡтар ҙа күҙәтелә. Уҡытыусының һәм тәрбиәсенең эш хаҡы аҙ - был сер түгел... Үҙенең балаһына айырым иғтибар (ҡайһы бер осраҡта яҡшы баһа) талап итеп, ҡиммәтле бүләктәр килтергән "йомарт" ата-әсәнең балаһы үҙен нисек тотасаҡ? Әлбиттә, башҡасараҡ. Өйҙә балаһының күҙ алдында уҡытыусы йәки тәрбиәсенең эш алымдарын тәнҡитләп, унын шәхесен кәмһетерлек һүҙҙәр һөйләгән ата-әсә педагогтың абруйын күтәреүгә булышлыҡ итәме? Әлбиттә, юҡ. Ғөмүмән, атай-әсәйҙәр тиҫкәре (негатив) мәғлүмәтте балаға ишеттерергә тейеш түгел, кәрәк икән - уҡытыусының йәки тәрбиәсенең үҙе менән шәхсән һөйләшеү отошлораҡ.

Мәктәптә лә, урта һөнәри белем биреү учреждениеһында ла, юғары уҡыу йортонда ла эшләп ҡараған кеше буларaҡ, тематик йылдарға ҙур өмөт бағламауым бәғзеләргә сәйер тойолор, бәлки. Өмөтһөҙ - шайтан, тиҙәр бит. Әммә мин реалист. Бөтә нәмә тип әйтерлек аныҡ уҡытыусының йәки тәрбиәсенең шәхесенән, унын донъяға ҡарашынан, рухынан, асылынан, мөмкинлектәренән тора. Күңелен биреп эшләгән кеше былай ҙа эшләйәсәк, эшләмәгәненән инде тематик йылда ла фәтүә көтөү икеле.

Педагог һәм остаз йылының ыңғай яҡтары ла мотлаҡ буласаҡ, әлбиттә. Быға иманым камил. Алдынғы уҡытыусы һәм тәрбиәселәр өсөн, моғайын, маҡсатлы конкурстар, гранттар ойошторолор. Бөтә ғүмерен йәш быуынды тәрбиәләүгә бағышлаған оло быуын вәкилдәренә лә, эш башлап ҡына тороусы йәш педагогтарға ла иғтибар көсәйер. Уҡытыусының абруйын күтәреүгә йүнәлтелгән саралар теҙмәһе раҫланыр, әңгәмәләр, кисәләр үткәрелер, бүләкләүҙәр булыр, бындай саралар ҙан һуң педагогтарҙың күңеле күтәрелеп, һындары турайып китер - иғтибар кемгә оҡшамаһын! Хөкүмәт тарафынан тематик йылда үткәрелгән сараларҙы матди яҡтан күтәрмәләү хуплауға лайыҡ иң мөһим шарттыр - ни тиһәң дә, күп проекттар, идеяларҙың ғәмәлләшеүе тап аҡсаға барып төртөлә...

Республикабыҙҙың, илебеҙҙең артабан үҫешеүен теләйбеҙ икән, йәмғиәттең киләсәген тәрбиәләүсе педагогтарҙың рухын нығытырға, тап уларҙың балаға мөнәсәбәтенән күп нәмә тороуына инандырырға кәрәк. Улар үҙҙәрен кәрәкле итеп тойһон: балаларға ла, ата-әсәләргә лә, йәмғиәткә лә... Уҡытыусының йәки тәрбиәсенең белемен камиллаштырыу һүҙҙә йәки ҡағыҙҙа ғына булмаһын, квалификацияны күтәреү курстарынан улар ысын мәғәнәһендә файҙа алып сыҡһын. Тәжрибәле педагогтарҙың эш алымын өйрәнергә, үҙенең психологик торошон көйләргә, синыфтағы бер-береһенән милләте, холҡо, белеме, донъяға ҡарашы һ.б. менән айырылған утыҙлап балаға бер төрлө иғтибар бүлергә, белем генә түгел, күңел йылыһын өләшергә, аралашырға ваҡыты ҡалһын. Бихисап ҡағыҙҙар тултырған робот-уҡытыусыға йәки тәрбиәсегә ҡарағанда, киләсәккә өмөт менән ҡараған, баланы шәхес итеп ҡабул иткән педагогтар артһын. Педагог һәм тәрбиәсе ысын мәғәнәһендә Остазға әйләнһен. Был һөйләшүгә ҡарата фекерем шул.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## БЫНАҒАЙЫШ!

# ВАҠЫТТАРЫ БУЛМАҒАНДЫР...




**Былтыр Башҡортостан депутаттары РФ Дәүләт Думаһы ҡарауына көнүҙәк мәсьәләләргә ҡағылышлы бер нисә закон проекты әҙерләп ебәрҙе. Шуныһы хуплауға лайыҡ: был проекттарҙа БР Дәүләт Йыйылышы республика халҡының иғтибар үҙәгендә торған, тураһын әйткәндә, маҙаға тейгән һәм кисекмәҫтән хәл ителеүҙе көткән ҡайһы бер мәсьәләләрҙе ҡарай.**

Мәҫәлән, апрелдә үк әле Ҡоролтай депутаттары Дәүләт Думаһына "Мәғариф тураһында" федераль законға үҙгәрештәр индереү буйынса проект эшләп ебәргәйне. Документ авторҙары унда урта мәктәптәрҙә туған тел уҡытыу мәсьәләһенә үҙгәрештәр индерергә тәҡдим итә. Атап әйткәндә, балаларҙы этно-мәҙәни мәктәптәргә ҡабул итеү ҡағиҙәләрен төҙөүҙе төбәк власть органдарының үҙҙәренә хәл итеү хоҡуғын биреү тураһында һүҙ ҡуҙғата. Бынан тыш, туған телдәрҙән Берҙәм дәүләт имтихандары алыу һәм ул бирәсәк өҫтөнлөктәр хаҡында ла әйтелә проектта. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың тәүге ошондай уҡ йөкмәткеле закон проекты Рәсәй Думаһы тарафынан кире ҡайтарылғайны, ә бына икенсеһе буйынса бер ниндәй мәғлүмәт тә күренмәй әлегә. Ҡаралыуға сират көтәмеләр, әллә депутаттарҙың ваҡыты тармы - әйтеүе ҡыйын.

Шул уҡ ваҡытта кеше ғүмере һәм йәшәйешебеҙгә хәүеф менән янаған мәсьәлә - берәҙәк эттәр буйынса кисекмәҫтән хәл ителергә тейешле закон проектына ла, йомшаҡ итеп әйткәндә, "һалҡын ҡараш"та тороусы Дәүләт Думаһы депутаттары уны хуплау-хупламау ғына түгел, ә ентекләберәк уҡып, дөйөм ҡарауға сығарыуҙан да баш тартҡан, имеш. Мәғлүм булыуынса, Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың закон проектында кеше ғүмеренә хәүеф менән янаусы эйәһеҙ һәм ҡырағайға әйләнгән берәҙәк эттәр һанын көйләү маҡсатында уларҙы атыу тураһында һүҙ бара, сөнки, төбәк депутаттары белдереүенсә, 2020 йылдан алып ҡырағай эттәр 38 ҡоралай һәм ике мышыны йыҡҡан, ҡыр йәнлектәре һәм ҡоштары ла аяуһыҙ ҡырыла, шул арҡала тирә-яҡ мөхиткә ҙур зыян килтерелә. Ауыл халҡының да ҡош-ҡорто, ваҡ һәм эре малы туҡтауһыҙ зыянлана. Ә шундай эттәрҙән таланып үлгән, йәрәхәттәр алған балалар һәм өлкәндәр хаҡында төрлө тарафтарҙан хәбәрҙәр туҡтағаны ла юҡ. Ләкин был мөһим һәм бәхәсле мәсьәлә буйынса төбәк депутаттары проектын ҡарау Дәүләт Думаһының экология, тәбиғи ресурстар һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау комитетына йөкмәтелә. Комитет рәйесе урынбаҫары, был проблемаға бер төрлө генә ҡәтғи ҡарашы менән билдәле Владимир Бурматов: "Дәүләт Думаһы, беҙҙең комитет һәм шәхсән үҙемдең фекер шунан ғибәрәт: бындай башланғыстың киләсәге юҡ",- тип ҡырҡа һуға. Дөрөҫ, әйтеүҙәренсә, закон проекты асылда ошо йылдың мартында ғына ҡараласаҡ икән. Улар исеменән белдереү яһалһа ла, бәлки, Дәүләт Думаһы депутаттары араһында Бурматов әфәнденең ҡарашын уртаҡлашырға теләмәүселәр ҙә барҙыр? Берәҙәк хайуандарҙы реабилитациялау үҙәге етәксеһе Игорь Молоков та ҡырағай эттәрҙе атыуға ҡаршы булыуын белдерә, ләкин закон проектының проблемаға яңыса ҡараш ташлауын да байҡай алған һәм Бурматовтан айырмалы: "Закон проектын уҡып сыҡҡас, шул асыҡлана: бында бит һүҙ бөтөнләй икенсе нәмә хаҡында - тораҡ пункт биләмәһен ташлап ҡырға сығып киткән һәм ҡырағайланған эттәрҙе атыу хаҡында бара", - ти. Ә "үҙ туҡһаны туҡһан" Бурматов "закон тарафынан приюттарҙа эвтаназия тыйылды һәм уны бер кем дә үҙгәртә алмаясаҡ", тигән шул бер үк һүҙен тылҡый бирә. Күрәһең, был әфәнденең Башҡортостан парламентарийҙары документын ентекләберәк уҡып торорға ваҡыты булмағандыр...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәйҙә льгота менән юғары уҡыу йорттарына инеү хоҡуғына эйә булғандарҙың исемлеген киңәйтеүҙәре ихтимал. Хәҙер Рәсәй Федерацияһы Геройҙары, өс Батырлыҡ ордены менән бүләкләнгәндәр, махсус хәрби операцияла үҙ теләге менән ҡатнашҡандарҙың һәм мобилизацияланғандарҙың балалары, шулай уҡ сит илдәрҙә хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашҡан хәрбиҙәрҙең балалары ла айырым квота менән уҡырға инергә мөмкин.

✓Башҡортостан Республикаһы Йәмәғәт палатаһының ултырышы үтте. Ултырышта палата рәйесе Азамат Йәнбирҙиндың, күсеп китеү сәбәпле, рәйес вәкәләттәрен һалыуы һәм Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы составынан сығыуы иғлан ителде. Палата ағзалары күпселек тауыш менән палата рәйесе вазифаһын башҡарыусы итеп Рәмил Рәхимовты һайланы.

✓Үҙ теләге менән махсус хәрби операцияға киткән Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Азат Бадрановҡа махсус хәрби операция зонаһында мобилизацияланған яҡташтарыбыҙға ярҙам күрһәтеү эше йөкмәтелгән. Дүшәмбе Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо турала белдерҙе. Унын һүҙҙәренсә, Башҡортостандан 2,5 мең мобилизацияланған ир-егет иҫәпләнгән бүлексә командиры үҙе уға ошо турала мөрәжәғәт иткән.

✓10 ғинуарҙан Һаҡлыҡ банкы беренсел һәм икенсел торлаҡ һатып алыу өсөн ипотека кредиты буйынса төп ставканы 0,5 процентҡа күтәрҙе. Хәҙер был ставка 10,9 процент тәшкил итә. Шулай уҡ был льготалы ипотека буйынса ставканың 7 проценттан алып 8 процентҡа тиклем күтәрелеүенә бәйле (программа 2024 йылдың 1 июненә тиклем оҙайтылды), ул башҡа ипотека программаларында ла ставкаларҙың артыуына килтерҙе, тип иҫәпләй эксперттар. Бынан тыш, 2023 йылдың февралендә төп ставка буйынса сираттағы ҡарар ҡабул ителергә тейеш.

✓Рәсәй Дәүләт Думаһы электрон тәмәкеләрҙе тыйыу мөмкинлеген ҡарай, тип хәбәр иттеләр парламенттың түбәнге палатаһының телеграм-каналында. Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин ошо мәсьәләне ҡарарға һәм профилле комитеттарға тәҡдимдәр индерергә ҡушты. Спикер билдәләүенсә, был башланғыс уҡыусылар араһында вейп тартыуҙың популяр була барыуы менән аңлатыла. Бынан тыш, Рәсәй Дәүләт Думаһы никотиндың электрон системалары өсөн тәмәкегә акциздарҙы арттырыу тураһында ҡарар ҡабул итте.

*ҠЫҪҠАСА*

# ЯЛҒА ХОҠУҠ...

**Башҡортостанда 55 йәштән өлкәндәр "Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек" программаһы буйынса 2000 һумлыҡ сертификат алыу мөмкинлегенә эйә.** Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының ветерандарға һәм граждандарҙың башҡа категорияларына социаль ярҙам күрһәтеү бүлеге етәксеһе урынбаҫары Адель Борһанова проекттың мөмкинлектәрен киңәйтеү хаҡында һөйләне. Сертификатты йога, бейеү, дауалау физкультураһы һәм тын алыу гимнастикаһы менән шөғөлләнеү, инглиз телен өйрәнеү, интерьер дизайнына уҡыу өсөн ҡулланырға мөмкин. Ир-егеттәр өсөн балыҡсылыҡ нигеҙҙәре йүнәлеше бар. "Сертификат алыу өсөн күп функциялы үҙәккә йәки республиканың халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәге филиалдарына мөрәжәғәт итергә һәм сиратҡа торорға кәрәк", - тине Адель Борһанова.

✓ **Башҡортостанда йәш ауыл уҡытыусыларына гранттар һаны 150-гә тиклем арттырыла. Республика Хөкүмәтенең сираттағы ултырышында Премьер-министр Андрей Назаров ошо турала әйтте.** Дәүләт ярҙамының күләме - 690 мең һум. Шулай итеп, 2023 йылда ауыл уҡытыусыларына ярҙам күрһәтеү өсөн 103,5 миллион һум йүнәлтелә. Башҡортостанда уҡытыусылар өсөн гранттар 2019 йылдың июнендә раҫланған. Гранттарға ауыл ерендәге дөйөм белем биреү ойошмаларында ике йылдан ашыуыраҡ эшләгән 35 йәшкә тиклемге уҡытыусылар дәғүә итергә мөмкин. Уларҙы конкурс барышында республиканың Мәғариф һәм фән министрлығы билдәләй.

✓ **Республикала торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәрҙе түләү өсөн субсидия алыу мөмкинлегенә хаҡында иҫкә төшөрҙөләр.** Аҙ килемлеләр, хеҙмәт ветерандары, ишле ғаиләләр һәм граждандарҙың башҡа категориялары коммуналь хеҙмәттәр өсөн аҙыраҡ түләй ала, тип белдерҙеләр Башҡортостандың Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығында. Башҡортостанда субсидия ошондай түләүе торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәргә сығымдың рөхсәт ителгән максималь күләмдән юғарыраҡ булғандарға бирелә: ишле һәм тулы булмаған ғаиләләргә - 13 процент; яңғыҙ йәшәгән 60 йәше тулған ир-егеттәргә һәм 55 йәште уҙған ҡатын-ҡыҙҙарға - 18 процент; 70 йәшкә еткән яңғыҙ ололарға - 16 процент; башҡа категорияларға - 20 процент.

✓ **2022 йылдың декабрендә Рәсәйҙең оборона министры Сергей Шойгу Рәсәйҙә граждандарҙың хәрби хеҙмәткә саҡырылыу йәшен 18-ҙән 21 йәшкә тиклем этаплап арттырырға, ә сиген 27-нән 30 йәшкәсә күтәрергә йыйынлыуҙары турала белдергәйне.** Рәсәй Президенты Владимир Путин был тәкдимдәрҙе хупланы. Дәүләт Думаһының Оборона буйынса комитеты рәйесе Андрей Картаполов һүҙҙәренсә, хәрби хеҙмәткә саҡырылыу йәшен арттырыу процесы этаплап башҡарыла. Яңы системаға тулыһынса күсеү өсөн бер нисә йыл кәрәк булыуы мөмкин.

*КӨНАУАЗ*

# БАШҠОРТОСТАН - ҮҘЕНСӘЛЕКЛЕ ТӨБӘК



**Ил Президентының Өфөгә сәфәренән һуң күптәр дәүләт башлығының республикабыҙға айырым мөнәсәбәте булыуын билдәләне. Уға бөтә төбәктәр ҙә балалар кеүек яҡын. Әммә Путин бөтә мөһим эштәрҙе һәм кәңәшмәләрҙе ҡалдырып, республиканың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимов менән бәхилләшергә килә, Башҡортостан Башлығы менән осрашыуҙа бер нисә мөһим проект менән ҡыҙыҡһына һәм хуплай, самолетҡа ултырыр алдынан журналисҡа интервью бирә. Башҡортостан үҙенә ҡарата бындай мөнәсәбәткә нимәһе менән лайыҡ? Дәүләт башлығының тыуған төйәгебеҙ тураһында белдереүҙәрен анализлағандан һуң ошондай өс ҙур сәбәп төҫмөрләнде.**

## Башҡортостан - илдең иҡтисади терәге

Ил өсөн заман тарихындағы иң ҡатмарлы осорҙарҙың һәр берендә республика тотороҡлолоҡ тәьмин итеп кенә ҡалмай, үсеште лә күрһәтә алды. Ябайлаштырып әйткәндә, санкциялар арҡаһында иҡтисадыбыҙ емерелмәне, төшөмә һәм хатта ыңғай динамика күрһәтте. В. Путин уның хакимиәте биргән мәғлүмәттең дә күрһәткестәре шундай уҡ икәнен билдәләне һәм шулай тине: "Һеҙҙә бөтә төп йүнәлештәр буйынса күрһәткестәр ыңғай: эске төбәк продукты, сәнәғәт етештереүе, ауыл хужалығы үҫә. Рәсәйҙә эшһеҙлек буйынса иң түбән күрһәткестәрҙең береһе лә һеҙҙә. Төп капиталға инвестициялар дөйөм Рәсәй күрһәткестәренән алдараҡ бара, тимәк, яҡын киләсәктә республика үҙенә яҡшы үҫеш темптарын гарантиялай. Мин һеҙгә, бөтә командағыҙға, Башҡортостан халҡына ошо эш өсөн рәхмәт белдерәм, киләсәктә уңыштар теләйем".

Владимир Путин республика ихтыяждарын ишетә һәм беҙҙең үтенестәрҙе хуплай. 2021 йылдың апрелендә ил Президенты Хөкүмәткә "Башҡортостан сода компанияһы"ның 50 процент +1 акцияһын республикабыҙға тапшырырға ҡушты. Һуңғараҡ Радий Хәбировтың үтенесен хуплап, республика донъя кимәлендәге Евразия фәнни-мәғариф үҙәге статусын ала һәм студент кампустары төҙөлгән төбәктәр иҫәбенә инә, шулай уҡ карбон полигондары тип аталған парник газдарын өйрәнеү буйынса ғилми үҙәктәр асыла. Владимир Путин 2021 йылдың авгусында "Цемикс" заводын асҡанда республиканы йәнә маҡтаны, республика етәксеһе яҡшы шарттар булдырҙы, сит ил инвесторҙары төбәгебеҙгә ышана һәм яңы производстволар аса, тип билдәләне.

2023 йылдың ғинуарында осрашыу йомғаҡтары буйынса Владимир Путин республикала тағы бер нисә мөһим проектты - Ағиҙелдә махсус порт зонаһын булдырыу, Өфөнөң "Көньяҡ ҡапҡаһы"на инфраструктура кредиттарын, һуғыш ветерандары госпитален төҙөүҙе һәм Өфө циркын реконструкциялауҙы хупланы.

## Башҡортостан һәр ваҡыт ил мәнфәғәттәрен яҡланы

Республикабыҙ халҡының һәр ваҡыт илһөйәрлек рухы көслө булды, шуға күрә ҡатмарлы халыҡ-ара аренала улар "төньяҡ амурҙары", Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары, тыл хеҙмәткәрҙәренең традицияларын дауам итеп, Тыуған илде һаҡлауға баҫыуы бер ҙә ғәжәп түгел. Президент быны күрә һәм баһалай. 2007 йылда уҡ ул: "Рәсәйҙең берҙәмлеге бик күп һынауҙарға осраны, башҡорт халҡы һәр ваҡыт намыҫлы һәм ҡыйыу рәүештә илде һаҡлау буйынса хеҙмәт итте", - тип белдергәйне. Ул кәм тигәндә ике тапҡыр халыҡ алдында - тәүҙә 2016 йылда ҙур матбуғат конференцияһында, икенсе тапҡыр 2023 йылдың ғинуарында ошо һүҙҙәрҙе ҡабатланы: "Рәсәй составына үҙ ирке менән инғәндән алып башҡорттар беҙҙең Ватан сиген һаҡлау бурысын үҙ иңенә ала. Республика халҡы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла үҙҙәрен батырҙарса тота". Владимир Путин был тарихты онотмай һәм ҡәҙерләй. Шуға күрә 2020 йылда Радий Хәбировтың үтенесе буйынса үлгәндән һуң Рәсәй Геройы йондоҙо менән генерал-майор Минлеғәле Шайморатовты бүләкләй.

Президент республиканың махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларына һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам итеү мәсьәләләренең нисек хәл ителеүен дә билдәләп үтте. Эшлекле осрашыу барышында ул Радий Хәбировҡа: "Махсус хәрби операцияға ярҙам итеү сиктәрендә башҡарған эшегеҙ, илебеҙ, Донбасс, яңы территорияларҙа йәшәгән халҡыбыҙ мәнфәғәттәрен яҡлаған егеттәрҙең ғаиләләренә ярҙам иткәнегеҙ өсөн рәхмәт. Был бик мөһим, һеҙ үҙегеҙ ҙә әле генә халыҡ ошо ярҙамды нисек тойоуы һәм уларҙы нисек ҡабул итеүе тураһында әйттегеҙ", - тине.

## Милли һәм дини мәсьәлә

Башҡортостан үҙенең өлгөһөндә һәм һаҡсыл мөнәсәбәте менән илдә милләт-ара һәм конфессия-ара мөнәсәбәттәрҙе нигеҙләй. "Башҡортостанда, һыу тамсыһында кеүек, мәҙәниәттәр, диндәр, телдәр төрлөлөгө, халыҡтар дуҫлығы менән тотош Рәсәй сағыла". Республикала ҡанатлы һүҙҙәргә әйләнгән был фразаны Владимир Путин 2001 йылдың июнендә үк әйтте. Дәүләт башлығы билдәләүенсә, беҙҙең республика - Рәсәйҙең үҙенең кесерәйтелгән күсермәһе, һәм уға был оҡшай. 2007 йылда, Рәсәйгә ҡушылыуҙың 450 йыллығы уңайынан үткән сараларҙа сығыш яһап, Владимир Путин Башҡортостанды "Рәсәйҙең терәк төбәктәренең береһе һәм милләт-ара, конфессия-ара татыулыҡ өлгөһө" тип тә атаны.

2021 йылдың декабрендә Мәскәүҙә үткән Ҙур матбуғат конференцияһында Башҡортостан юлдаш телеканалы журналисы Гөлназ Хәйбуллина Президенттың ҡаланың 450 йыллығын байрам итеүгә саҡырҙы. "Өфө - бик яҡшы урын, Волга буйында - иң яҡшыларҙың береһе. Өфө Рәсәйҙә һәр ваҡыт Ислам донъяһы үҙәктәренең береһе булды һәм булып ҡала. Коллегаларыбыҙ менән ҡаланы юбилейға әҙерләү буйынса махсус документ сығарыуыбыҙ осраҡлы түгел", - тип яуапланы ул саҡта Владимир Путин. 2023 йылдың ғинуарында ул үҙенең тезисын киңәйтте: "Өфө һәр ваҡыт Рәсәй исламының, мәғрифәтле, ижади һәм ихтирамлы, шул уҡ ваҡытта илебеҙҙең башҡа традицион конфессиялары менән үҙ-ара килешеп эш итеүгә йүнәлтелгән иң мөһим үҙәктәренең береһе булды. Ошо йәһәттән Башҡортостан Рәсәй тарихында һәм яҙмышында һәр ваҡыт айырым, мөһим роль уйнаны тип әйтергә мөмкин", - тип билдәләне ул Башҡортостандың махсус миссияһын.

**"Башинформ" материалынан.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә республиканың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимовҡа һәйкәл ҡуйырға йыйыналар. Был эш генерал Шайморатов һәйкәленең авторы скульптор Салауат Щербаковҡа йөкмәтелгән. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров ошо хаҡта әйтте. Башҡортостан Башлығы Өфө мэры Ратмир Мәүлиевҡа ошо мәсьәлә буйынса тәкдимдәр әҙерләргә ҡушты.

✓Рәсәйҙә 2023 йыл Педагог һәм остаз йылы тип иғлан ителде. Уның төп маҡсаты - педагогик хеҙмәткәрҙәрҙең айырым статусын таныу. Шуға күрә барлыҡ сараларҙың да уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәреүгә, һөнәрҙе популярлаштырыуға йүнәлтелеүе осраҡлы түгел, тип белдерҙеләр республиканың Мәғариф һәм фән министрлығында. Ошоға бәйле быйыл Өфөлә беренсе уҡытыусыға һәйкәл, шулай уҡ яңыртылған Мәғарифты үҫтереү тарихы музейын асыу күҙаллана.

✓Рәсәй банкы 2024 йылда Өфөгә нигеҙ һалыныуға 450 йыл тулыуға бағышланған иҫтәлекле тәңкә сығара. 2023-2024 йылдарға иҫтәлекле һәм инвестиция тәңкәләрен сығарыу буйынса план Үҙәк банктың сайтында баҫылған. 925-се келәймәле (31,1 грамм саф көмөш) өс һумлыҡ тәңкәнең тиражы - өс мең бермәк. Был тәңкә Рәсәйҙә законлы түләү сараһы булып иҫәпләнә.

✓Башҡорт дәүләт филармонияһы билдәле композитор, РСФСР-ҙың халыҡ артисы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Хөсәйен Фәйзулла улы Әхмәтовтың исемен йөрөтә (1914-1993). Филармония коллективы йыл һайын ғинуар айында күренекле башҡорт музыка сәнғәте эшмәкәренең ижади мираҫына арналған проект менән сығыш яһай. 22 ғинуарҙа Хөсәйен Әхмәтов өс тиҫтәгә яҡын эшләгән филармония сәхнәһендә уның популяр йырҙары, романстары һәм "Һаҡмар һандуғаҫы" сюиталары яңғыраясаҡ.

✓Башгидромет мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостанда алдағы көндәрҙә йылы була. Шәмбе, 21 ғинуарҙа, яуым-төшөм көтөлмәй. Ел йүнәлешен үҙгәртеүсән, талғын. Һауа температураһы төндә -11, -16 градус, урыны менән -19, -24. Көндөҙ -5, -10 градус, таулы райондарҙа 0 градусҡа тиклем.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Республика Башлығы Радий Хәбиров баш ҡала округы хакимиәтендә Өфө ҡалаһына нигеҙ һалыныуҙың 450 йыллығын байрам итеүгә әҙерлек буйынса эш кәңәшмәһе үткәрҙе. Сарала мэр Ратмир Мәүлиев, министрлыҡтар, ведомстволар һәм төбәктең алдынғы предприятиелары вәкилдәре, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай һәм ҡала советы депутаттары, ҡала райондары хакимиәттәре башлыҡтары ҡатнашты.**

# ӨФӨ ЮБИЛЕЙЫНА ӘҘЕРЛӘНӘ



● Мәғлүм булыуынса, Рәсәй Президенты Владимир Путин Өфөнөң 450 йыллығын байрам итеү тураһында ҡарарға ҡул ҡуйып, уға федераль статус бирҙе. Был иһә ошо датаға әҙерлек һәм уны үткәреү өсөн индәргә ҙур яуаплылыҡ һала. Кәңәшмә алдынан төбәк етәксеһе юбилейға төҙөү планлаштырылған проекттар күргәҙмәһе менән танышты. Объекттар араһында "Өфө муйынсағы" йәйәүлеләр өсөн туристик маршруты, реконструкцияланған Ҡурсаҡ театры, Көрәш һарайы, Ишеү слаломы комплексы, Фехтование үҙәге, шулай уҡ дөйөм алғанда 3672 уҡыусыға иҫәпләнгән Ленин, Глумилино-2, Дим райондарында төҙөләсәк мәктәптәр проекты бар. Бынан тыш, Кузнецов затоны биҫтәһендә 2200 урынлыҡ заманса белем биреү үҙәге буласаҡ, һәләтле балалар өсөн 350 урынға иҫәпләнгән математик лицей асыласаҡ. Эре инфраструктура проекттарына килгәндә, "Көньяҡ ҡапҡалар", баш ҡаланың төньяҡ өлөшөндәге "Ағиҙел арьяғы" биҫтәһендә инженер селтәрҙәре үткәреү проекттары тормошҡа ашырыла.

● Йыйылыусылар алдында сығыш яһап, Республика Башлығы Радий Хәбиров төп мәлдәрҙе билдәләне, иң элек ҡала үҫешендә "хроник сир" булып торған мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәклеген белдерҙе. Быға тәү сиратта коммуналь хеҙмәттәр инә (ҡар менән көрәш, һыу, йылылыҡ менән тәьмин итеү, подъездарҙы ремонтлау, ихаталарҙы төҙөкләндереү, йәмәғәт киңлектәрен яңыртыу). Шулай уҡ Радий Фәрит улы стратегик мәсьәләләрҙе хәл итеү зарурлығы һәм күргәҙмәлә танышҡан объекттарҙың мөһимлеге тураһында тағы бер тапҡыр билдәләп үтте. "Баш ҡаланы үҫешкән инфраструктуралы, һығылмалы архитектураларға, заманса социаль объекттарға, ваҡиғаларға бай XXI быуат ҡалаһы иткән проекттар менән әүҙем шөғөлләнергә кәрәк", - тине ул.

Шулай уҡ Өфө ҡала округына ингән ҡала яны ауылдары, коттедж ҡасабалары проблемаларын хәл итеү, уларҙың һыу, электр, транспорт хеҙмәтләндереүе менән тәьмин итеү мәсьәләләренә иғтибар йүнәлтте.

Сығышының һуңында Радий Хәбиров Өфөнөң идара командаһына махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан хәрби хеҙмәткәрҙәргә һәм уларҙың туғандарына, яҡындарына ярҙам күрһәткән өсөн рәхмәт белдерҙе һәм: "Хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаиләләрен иғтибар һәм ихтирам менән солғап алыу - мөһим бурыс. Был мәсьәләлә тупаҫлыҡ һәм формаллек булырға тейеш түгел. Беҙ артабан да егеттәргә кәрәкле нәмәләр ебәреүҙе дауам итәсәкбеҙ. Өфө - пландарыбыҙ үҙәге. Ул - республиканың ҡеүәте, көсө, йөрәге һәм интеллекты. Бында һуңынан территорияларҙы үҫтереүгә йүнәлтелгән күп маҡсаттар формалаша", - тине.

● Юбилейға әҙерлек буйынса ентекле доклад менән Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев сығыш яһаны. Сарала ҡатнашыусылар алда торған ҙур күләмле сараны күҙ уңында тотоп, ҡала үҫешенең төрлө тармаҡтарына ҡағылған мәсьәләләр буйынса фекер алышты.

Ҡала советы депутаты, Өфөнөң почетлы гражданы Айрат Шаммазов ҡаланың үҫеш нигеҙе - йәмғиәтте берләштереүҙә булыуын билдәләп, депутат корпусының юбилей сараларын ойоштороуҙа ярҙам итергә әҙерлеген белдерҙе. Уның коллегаһы, ТКХ өлкәһендә йәмәғәт контроле төбәк үҙәге етәксеһе Анатолий Дубовский идара итеү компаниялары өсөн кадрҙар әҙерләү курстарын булдырыуҙы тәҡдим итте. Депутаттар шулай уҡ Өфөлә энергия ҡулланыуҙың, шул иҫәптән - юлдаш-ауылдар иҫәбенә, артыуына иғтибар йүнәлтте. Тағы бер мәсьәлә - иҫке һәм авария хәлендәге йорттарҙа йәшәүселәрҙе күсереү өсөн федераль транштар йәлеп итеү кәрәклеге лә билдәләп үтелде.

Журналистар менән әңгәмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров кәңәшмәне йомғаҡлап: "Минеңсә, һөйләшеү файҙалы булды. Ҡалаға ике ҙур мәсьәләне сисеү кәрәк. Бер яҡтан - халыҡты борсоған "хроник сир"-гә әйләнгән проблемаларҙы хәл итеү булһа, икенсе яҡтан - баш ҡаланы үҫтереү стратегияһын формалаштырыу. Өфө эш, тулы ҡанлы тормош, балалар тәрбиәләү өсөн барлыҡ шарттары булған заманса һәм аҡыллы ҡалаға әүерелергә тейеш..."

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ХӘТЕРҘӘ ҺАҠЛАНЫР



**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа Мортаза Рәхимовтың исемен мәңгеләштереү буйынса тәҡдимдәр әҙерләне.**

- Башҡортостандың Беренсе Президенты, күренекле етәксе һәм халҡының арҙаҡлы улы Мортаза Рәхимовтың иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса тәҡдимдәр уның вафаты тураһында билдәле булғас та килә башланы. Беҙ барыһын дөйөмләштерҙек, шул уҡ ваҡытта комиссияға башҡа ойошмаларҙан да тәҡдимдәр күп килер, тип ышанабыҙ. Рәсәй Президенты менән Башҡортостан Башлығы республикабыҙҙың тәүге Президентының төбәкте үҫтереүгә генә түгел, ә тотош илебеҙҙе һаҡлауға индергән баһалап бөткөһөҙ өлөшөн иҫәптә тотоп, уның исемен мәңгеләштерергә тәҡдим итте, - тип билдәләй Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе, Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Эльвира Айытҡолова.

Бер нисә көн дауамында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумында һәм Башҡарма комитетында күренекле шәхестең иҫтәлеген һаҡлау буйынса тәҡдимдәр тикшерелде. Иң йыш телгә алынғандарын һайлап, йәмәғәт ойошмаһы исеменән етәкселергә тип ҡарар ителде. Тәү сиратта был Мортаза Ғәбәйҙулла улы етәкселек иткән осорҙа уның шәхси ҡатнашлығында һәм ярҙамында нигеҙ һалынған мәсеткә ҡағыла. Был эш, йәмәғәтселәр фекеренсә, республика халҡы исеменән Беренсе Президентыбыҙға иң яҡшы һәйкәл буласаҡ.

- Мортаза Ғәбәйҙулла улы Рәхимовтың исемен мәңгеләштереү йәһәтенән Салауат Юлаев проспекты менән Коммунистик урам киҫелешендәге "Әр-Рәхим" мәсетен төҙөүҙе тамамлауҙы мөһим һәм өҫтөнлөклө тип иҫәпләйбеҙ. Башҡортостан йәмәғәтселеге, шулай уҡ илебеҙҙең башҡа төбәктәрендә һәм унан ситтә йәшәгән ватандаштарыбыҙ был иман йорто төҙөлөшөндә ҡатнашырға әҙер булыуын белдерҙе. Ошо йәһәттән һуңғы ҡарар ҡабул ителгән осраҡта, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы йәмәғәтселек араһында мәғлүмәти эш алып барырға һәм аҡса йыйыуға ҡушылырға әҙер, - тип, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Юлдаш Йосопов Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа мөрәжәғәттән өҙөмтә килтерҙе.

- Мортаза Ғәбәйҙулла улы халҡыбыҙҙың физик һәм рухи һаулығын һаҡлауға ҙур иғтибар бүлде. Ул шуны белде: рухи ихтыяждар ҡәнәғәтләндерелгән гармониялы мөхиттә генә сәләмәт шәхес үҫтерергә мөмкин. Салауат Юлаев проспектында һалына башлаған мәсет тә - ошо ынтылыштың билдәһе. Был төҙөлөштө уңышлы тамамлаһаҡ, ул Өфөнөң һәм Башҡортостандың лайыҡлы символына әйләнәсәк, Мортаза Ғәбәйҙулла улының тыуған республикаһы, халҡы мәнфәғәтендә башҡарған оло хеҙмәтенә үҙенсәлекле мисәт һуғыласаҡ, - ти Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы ағзаһы, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған табибы Сәлимә Мырҙабаева.

Башҡортостан Башлығы исеменә мөрәжәғәт шулай уҡ "Башҡортостан Республикаһының Милли музейында Башҡортостандың Беренсе Президенты М.Ғ. Рәхимовтың тормошона һәм эшмәкәрлегенә арналған айырым экспозиция булдырыу", "Башҡортостан Республикаһының муниципаль берәмектәре биләмәләрендә урынлашҡан һәм М.Ғ. Рәхимов указдарын тормошҡа ашырыу сиктәрендә сафҡа индерелгән төбәк әһәмиәтендәге объекттарға тейешле мәғлүмәт таблицкалары ҡуйыу" кеүек тәҡдимдәрҙе лә үҙ эсенә ала. Тәүге Президентыбыҙҙың Башҡортостандың нефть сәнәғәтен үҫтереү өлкәһендәге ҡаҙаныштарын билдәләп, уның исемендәге билдә булдырырға тәҡдим ителә.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ангина

❖ 1 стакан мүк еләге (клюква) һутына 3 ҡалаҡ бал ҡушып болғарға, шуның менән көнөнә бер нисә тапҡыр тамаҡты сайҡарға. Сайҡаған һайын аҙағынан ҡатышманың 2-шәр ҡалағын уртта тотобораҡ ороп йотарға.

### Баш ауырыһа

❖ 1 ҡалаҡ кесерткәнде термосҡа һалып өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр бал ҡушып 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ гөлйемеш сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

❖ Баш ауырығанда һаҙанаҡ (багульник болотный) ярҙам итә, уның онтағын ашарға ла, төнәтмә итеп эсергә лә мөмкин. Һаҙанаҡ онтағын көнөнә 1 тапҡыр 0,5 грамм ғына ашарға була. Ә төнәтмәһен 10 грамм һаҙанаҡ сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтеп әҙерләргә. Төнәтмәне һөҙгәндән һуң, көнөнә 1 тапҡыр 1 ҡалаҡтан артыҡ эсмәҫкә. Һаҙанаҡ ағыулы үҫемлек булыуын иҫәпкә алып, дауаланғанда һаҡ ҡулланырға кәрәк.

❖ Баш стрестан ауырыһа, бер нисә көн рәттән йоҡларҙан алда 1 ҡалаҡ шәкәр артынан 1 стакан һыу эсергә.

### Гайморит

❖ Үгәй инә үләне япраҡтары төнәтмәһе файҙалы. 1 ҡалаҡ ваҡланған япраҡтарға 1 стакан эҫе һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне йылы сағында танау аша һурырға кәрәк. Шулай уҡ үгәй инә үләне япраҡтарынан һығылған һутты танауға тамыҙырға. Сөсөкөртһөн өсөн уның тамыры онтағы менән тын алырға.

❖ Шулай уҡ шыршы (ель обыкновенная) төнәтмәһе әҙерләү ҙә кәңәш ителә. 2 ҡалаҡ ылыҫҡа 1 стакан һыу ҡойорға, 5 минут ҡайнатырға һәм 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Уны танауға тамыҙырға йәки һурып сайҙыртырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙӰН ТАП!*



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

## Алмиҙеү

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары тағып йөрөгән ҡайһы бер биҙәүестәрҙең биҙәлешендә мәрйен, аҡыҡ, мәрүәт һирәк, йәки бөтөнләй ҡулланылмай. Бындай үҙенсәлек, мәçәлән, иҙеүҙең бер төрө булған алмиҙеүҙә асыҡ сағылыш таба. Был атама алма һәм иҙеү һүҙҙәренең ҡушылмаһынан барлыҡҡа килгән булырға тейеш, сөнки башҡорт телендәге элизия күренеше нигеҙендә тәүге һүҙҙең һуҙынҡыһы норма булараҡ төшөп ҡала (мәçәлән, күҙле + ут (боронғо төрки телендә 'үлән') = күҙлут 'емешсәһе өйкөмләнеп күҙ-күҙ булып урынлашҡан баллы ҡый үләне). Күрәһең, был биҙәнеү әйберенең форма үҙенсәлектәре атамаһында сағылыш тапҡан. Халыҡ йырында әйтелеүенсә: "Алтын ғына тәңкә, ай, бирәйем, Алмиҙеүкәйеңә баçырһың". С.П. Злобиндың "Салауат Юлаев" романында Кинйә үҙенең туғанына ғаиләнең хәлле икәнлеген күрһәтеп тороусы алтын алмиҙеүҙе бүләк итергә хыяллана. С.Н. Шитова яҙыуынса, башлыса ҡыҙҙар кейеменә хас булып, һуңғараҡ ололар ҙа тағып йөрөр булған алмиҙеү Бөрйән, Баймаҡ һәм күрше райондарҙа таралыу алған. Мәçәлән, алмиҙеүҙең бер матур өлгөһөн Этнологик тикшеренеүҙәр үҙәге тарафынан сығарылған "Мәрйен һәм тәңкәләрҙән торған башҡорт биҙәүестәре" исемле альбом-каталогта күрергә мөмкин (китапта тап алмаиҙеү рәүешендә теркәлгән). Ул 1981 йылдағы экспедиция ваҡытында Әбйәлил районынан алып ҡайтыла. Оҙонлоғо - 36 см; өçкө киңлеге - 17,5 см; аçҡы киңлеге - 22 см. Ҡыҙыл төçтәге кизе-мамыҡ туҡыманан эшләнгән нигеҙе ҡара төçтәге туҡыма менән тышланып ситенән уҡа менән ҡайылған. Тәңкәләр һәм жетон менән биҙәлгән. Муйынға тағыу һәм билдән быуыу өсөн бауы бар.



Шул уҡ Әбйәлил районында бындай биҙәүестәрҙе "иҙеү" тип кенә лә атап йөрөтөү күҙәтелә. Шундайҙарҙың береһе бөгөнгө көндә Әбйәлил районының Михайловка ауылында йәшәүсе Кәримова Ғәлимә Хәфүр ҡыҙында һаҡлана. Был иҙеү уға әсәһе Вазифа Хәмит ҡыҙынан (1910 йылда Ҡаҙмаш ауылында тыуған) иçтәлек булып ҡалған. Оҙонлоғо - 35 см; өçкө киңлеге - 18 см; аçҡы киңлеге - 29 см. Аҡ кизе-мамыҡ туҡымалы нигеҙе уң яҡтан ҡара сатин менән тышланған. Муйынға тағыу һәм билдән быуыу өсөн бауы бар. Биҙәлешендә көмөш тәңкәләр, көмбәҙҙәр, мәрйендәр ҡулланылған. Үрҙә телгә алынған алмиҙеүҙәге кеүек үк тәңкәләр бағаналап ара ҡалдырып тегелгән. Күренеүенсә, мәрйендәр бары тик өçкө яҡ ситен ҡайыу өсөн генә ҡулланылған.



Әйтергә кәрәк, этнографтар тарафынан теркәлгән алмиҙеүҙәр араһында был өлгөләрҙән айырылып тороусылары ла бар. Уларға тәңкәләрҙең һирәк ҡулланылыуы хас. Шулай итеп, был биҙәүестәр формаһы, төҙөлөшө, материалдары, биҙәү тәртибе йәһәтенән киң билдәле булған селтәр, һаҡал, яға кеүектәренән һиҙелерлек айырылып тора. Уларҙың үҙҙәренә хас йолаһы бар.

**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

*АФАРИН!*

# ҺОҠ ТЕЙЕП ҠУЙМАҺЫН!



**(Башы 1-се биттә).**

Дүрт тиçтәгә яҡын тарихы булған олимпиада һынауы заман талаптары, яңы шарттарға ярашлы үҙгәрештәр кисерә килә. Быйыл уның беренсе һынауы - ҡатнашыусыларҙың телмәр маһирлығын, фекер ҡеүәһен баһалауға йүнәлтелгәне онлайн форматта үткәрелгән һәм уҡыусылар бер темаға бағышланған текст буйынса фекер алышҡан. Бында йәмғеһе 700-ҙән ашыу бала ҡатнашҡан, шуларҙың иң-индәре - 357 уҡыусы ярыштың киләһе турына үтеп, баш ҡалаға килгән. Шарттарға ярашлы, дүрт йүнәлештә 9-сы, 10-сы, 11-се синыф уҡыусылары араһында төп еңеүселәр - 12 уҡыусы, бик күптәр призер дәрәжәһенә лайыҡ булды. "Олимпиада 37-се тапҡыр үткәрелә. 1986 йылда мин үҙем дә икенсе тапҡыр ойошторолған ошо олимпиадала республика кимәлендә ҡатнашып, иншам юғары баһаланып, махсус бүләкләнгәйнем. Шул ваҡиғалар бөгөн дә иçемдә. Һеҙҙең дә тормошоғоҙҙа был ярыш ҙур урын биләр, ниндәйҙер һынауҙар һәм һайлауҙар алдында торғанда алға ынтылыш биргән мәл булыр, тип өмөт итәбеҙ", - тине БР Мәғариф һәм фән министрлығы исеменән тәбрикләп, министр урынбаçары Әлфиә Ғәлиева.

Министр урынбаçары шулай уҡ Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиаданың федераль теҙмәгә индерелеүенә дүрт йыл булыуын, вуздарға уҡырға ингәндә өçтәмә балл биреүен дә телгә алды һәм был ҡатнашыусылар һанын бермә-бер арттырыуын белдерҙе. Ә инде телһөйәрҙәр араһында егеттәр һаны күбәйеүе ситтән ҡараған кеше күҙенә лә салынмай ҡалманы: тимәк, олимпиаданың абруйы арта. Киләсәген хәрби хеҙмәт, вертолет йөрөтөүсе булараҡ күҙаллаған М. Гәрәев исемендәге башланғыс осоуға әҙерләүсе Өфө интернат-мәктәбенең 11-се синыф уҡыусыһы Сыңғыҙ Иçәндәүләтов та был ярышта күптән ҡатнаша, ике тапҡыр призлы урынға лайыҡ булған. Уның кеүек бер нисә йыл рәттән республика кимәлендәге ярышҡа килеү һәм юғары баһаларға өлгәшеү маҡсатына ирешкән уҡыусылар байтаҡ ҡына. Мәçәлән, Әбйәлил районынан килгән Алһыу Рәхимова һәм Гөлфиә Хәлилова олимпиадала үҙҙәрен өсөнсө тапҡыр һынай, быйыл береһе еңеүсе, икенсеһе призер булған. "Йыл һайын призлы урын алам, еңеүгә бер нисә генә мәрәй етмәй ҡала. Баш ҡалаға ярышҡа килеү үҙе бер ҡыуаныс, сөнки ошонда танышып, аралашып киткән дуçтарым бар. Быйыл беҙ Байым урта мәктәбенән ике уҡыусы килдек: Яҙгөл Йосопова 10-сы синыфтар араһында ярышты, ул беренсе тапҡыр килә. Олимпиада йылдағыса көсөргәнешле генә үтте", - ти Гөлфиә Хәлилова. Ҡыҙҙарҙы туған телдәрен төплө өйрәнергә ҡыҙыҡһындырыусы, олимпиадаға әҙерләүсе һәм ышаныс белдереп, дәртләндереп тороусы уҡытыусылары Әлфиә Абдрафиҡова Әбйәлил районы Байым ауылы урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса эш электән яҡшы ҡуйылыуы, уҡыусыларҙың һис һынатмауы тураһында әйтеп үтте. Мәктәп былтырғы уҡыу йылында ғына ла дүрт еңеүсе һәм ике призлы урын яулаусы уҡыусыһы менән хаҡлы ғорурлана.

Олимпиадала быйыл Хәйбулла районы Ҡ. Әхмәтшин исемендәге Ҙур Әбеш ауылы мәктәбенең 9-сы синыф уҡыусыһы Илүзә Хунафина, Өфө ҡалаһы М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының 10-сы синыф уҡыусыһы Әҙилә Ишемғужина, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының 11-се синыф уҡыусыһы Илгизә Йәрмөхәмәтова башҡорт мәктәптәрендә туған тел булараҡ өйрәнеүсе тиçтерҙәре араһында еңеүсе тип табылдылар. Ә бына рус мәктәптәрендә уҡып, башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеүселәрҙән Илеш районы Үрмәт мәктәбенән Зөһрә Латипова, Әбйәлил районы Аçҡар ауылы Т. Кусимов исемендәге гимназиянан Алһыу Рәхимова, Баймаҡ ҡалаһының 4-се лицейынан Йәнгүзәл Зәйнуллина иң юғары баһаға лайыҡ булды. Шулай уҡ башҡорт телен дәүләт теле булараҡ башлап һәм дауам итеп өйрәнеүсе балалар араһында ла иң лайыҡлылар бүләкләнде. Улар араһында Сибай ҡалаһы гимназияһы һәм Мәләүез районы Нөгөш ауылы мәктәбенән икешәр уҡыусы еңеүгә өлгәшеүе иғтибарҙы йәлеп итмәй ҡалманы, әлбиттә.

- Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиадала 8-се синыфтан алып ҡатнашам. Тәүге йылда беренсе урын алдым, 9-10 синыфтарҙа призлы урында инем, быйыл бына тағы ла еңеүсе булдым. Шулай йыл һайын ҡатнашып киләм һәм ярыштың йылдан-йыл кимәле юғары күтәрелә тип әйтә алам. 2020 йылданмы икән, һорауламаға Башҡортостан мәҙәниәте буйынса һорауҙар өçтәлеүе лә быға булышлыҡ итте. Шулай ҙа, уҡыһаң - яуап бирерлек, - тип һөйләне олимпиада һәм башҡорт теле тураһында Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының 11-се синыф уҡыусыһы Илгизә Йәрмөхәмәтова һәм уҡытыусыһы Альбина Кайбышеваға рәхмәттәрен еткерҙе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Олимпиадала ҡатнашҡан кемдән генә барып һорама, бөтәһе лә башҡорт телен белеү - үҙ халҡыңдың тарихын, мәҙәниәтен, әҙәбиәтен киләсәк быуындарға еткереү нигеҙендә ятыуына ишараланы. Ә беҙ инде был сараға телһөйәр, илһөйәр балалар тупланыуына күнегеп бөткәнлектәнме, башҡа төрлө яуап булыуын хатта күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. Йәштәргә һоҡланғандан һоҡ ҡына тейеп ҡуймаһын, тормоштарында башҡорт теленә һәр ваҡыт урын булһын!**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ*

# ФӘРЕШТӘ ҠОТҠАРҘЫМЫ?



**Фәрештәләр барлығына, ауыр мәлдә улар һиңә төрлө ҡиәфәткә инеп, ярҙамға килә икәненә ышанам мин. Айырыуса үҙем менән булған ошо хәлдән һуң ышанысым уғата нығынды.**

Өсөнсө класс уҡыусыһы булған йәшемдә, йәйге ялда, Ҡариҙел яры буйлап йөрөйөм. Сәскә һүрәте төшөрөргә яратҡанлыҡтан, дача тирәһендә үçкән һәр сәскәне альбомыма һүрәт итеп күсерәм. Сәскәләрҙән сәскәгә күсеп, һүрәт менән мауығып йөрөнөм дә, башымды күтәреп, тирә-яҡты байҡай ғына башлағайным, күрәм: Ҡариҙелгә һыу инергә төшкән әхирәтем Аçылбикә һыуға бер сума, бер ҡалҡып сыға. "Һин нимә, батып бараһыңмы әллә?" тип, йүгереп барып, ҡулымды һуҙғайным, ул миңә сат йәбеште лә, һыуға тартты ла төшөрҙө. Бына хәҙер мин дә бата башланым, нимәлер аçҡа һөйрәй бит. Шул саҡ кемдер башта мине, һуңынан Аçылбикәне эләктереп, кәмәгә һалды. Ишкәксе ҡарт, шулай итеп, беҙҙе ярға алып сыҡты. Әҙерәк беҙгә ҡарап торҙо ла: "Вот так, котята!" - тине һәм юлын дауам итте. Ҡариҙел йылғаһының яр ситтәрендә граждандар һуғышындағы шартлауҙарҙан һуң күп соҡорҙар ҡалғанын беҙ аҙаҡ ҡына ишетеп белдек, ә ишкәксе ҡарт уны белгәндер һәм шуға ла ул тирәлә кәмәһе менән йөрөп ятҡандыр.

Был хәл төш кеүек кенә хәтерҙә ҡалған. Төштәр, тиһәм, ҡарттың әйткән һүҙҙәре һаман ҡолаҡта сыңлай. Бәлки, ҡотҡарыусы фәрештә "ишкәксе ҡарт" һынына ингәндер?..

**Фәүзиә УСМАНОВА.**

✓ ***VI - III быуаттарҙа Көньяҡ Уралда йәшәгән дах-массагет яугирҙарының Урта Азияның һәм Ирандың боронғо дәүләттәрендә ялланма ғәскәр сафтарында хеҙмәт итеүе мөмкинлеген иҫкә алыу фарыз.***



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы



Дах-массагет ҡомартҡылары материалдары ошо дәүерҙә Көньяҡ Уралда йәшәгән ҡәүемдәрҙең Урта Азия, Урта Көнсығыш (Персия) һәм башҡа төбәктәр халыҡтары менән тығыҙ сауҙа-мәҙәни бәйләнештәре булыуын бик асыҡ күрһәтә. Быға, алдараҡ иҫкә алынған, Хорезмда яһалған балсыҡ һауыт-һабанан башҡа, Боронғо Ирандың ювелир оҫтаханаларында етештерелгән таш һәм быяла муйынсаҡтарҙы, ахеменид мисәттәрен, көмөш һауыт-һабаны дәлил итеп килтерергә була. Йыраҡ илдәрҙән килтерелгән әйберҙәрҙән формаһы яғынан уникаль булған бер амфора Мысыр (Египет) көршәкселәре ҡулы менән яһалған. Амфорала "Ксеркс батша һауыты" тигән яҙыу бар, ул Египетта б.э. тиклем V быуатта хакимлыҡ иткән. Был әйберҙәр Уралға Урта Азияла һәм Ҡаҙағстанда йәшәгән ҡәүемдәр аша килеп еткән.

Тарихи әҙәбиәттә б.э. тиклем VI - III быуаттарҙа Көньяҡ Уралда йәшәгән дах-массагет яугирҙарының Урта Азияның һәм Ирандың боронғо дәүләттәрендә ялланма ғәскәр сафтарында хеҙмәт итеүе мөмкинлеге хаҡындағы фекер булыуын иҫкә алыу фарыз. Бындай фараз өсөн Көньяҡ тауарҙарының Урта Азия һәм Ҡаҙағстан территориялары аша күмәртәләп килтерелеүе генә түгел, ошо бер-береһенән алыҫ булған төбәктәр яугирҙары ҡоралдарының билдәле кимәлдә оҡшашлығы нигеҙ булып тора.

Көньяҡ Уралда б.э. тиклем VI-IV быуаттарҙа өҫтәрәк бәйән ителгән ер өйөлөп яһалған ҡурғандар менән бер үк ваҡытта таш ҡурғандар ҙа күпләп барлыҡҡа килә. СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты 1965-1975 йылдарҙа ойоштороған археологик экспедиция барышында ошо ҡурғандар хаҡында тәүләп бай мәғлүмәт туплана: Урал һыртының көнсығыш һәм көнбайыш итәктәрендә, Учалы, Әбйәлил, Баймаҡ, Хәйбулла, Ейәнсура райондары сиктәрендә бер нисә тиҫтә таш ҡурған хаҡында билдәле булып, уларҙың ҡайһы берҙәре ҡаҙып тикшерелә. Силәбе, Ырымбур өлкәләрендә, шулай уҡ Башҡортостанда ойошторолған археологик эштәр ошо төркөм ҡомартҡылары тураһындағы белемдәребеҙҙе байтаҡҡа киңәйтте, уларға ҡыҫҡаса ошондай ҡылыҡһырлама бирергә була.

Таштан яһалған ҡурғандар ер өйөмләренән байтаҡ ҡына мөһим үҙенсәлектәре менән айырылып тора. Һуңғылары ҙур күләмле булып, Көньяҡ Уралдың һәм сиктәш төбәктәрҙең тигеҙлекле, йәғни далалы яҡтарында төркөм-төркөм булып урынлашһа, таш ҡурғандар иһә урманлы дала зонаһындағы тау һәм ҡалҡыулыҡ түбәләрендә, берәр-икешәр генә булып, таралып ята. Уларҙың күләме ҙур түгел, диаметры уртаса 6-9 метрҙан, бейеклеге 0,30-0,50 метрҙан артмай. Һалынған таштарҙы ҡутарғанда үлгәндәрҙең һөлдә ҡалдыҡтары табылмаһа ла, кеше мәйеттәрен ерләү менән бәйле аныҡ билдәләр булыуы асыҡлана. Бына, мәҫәлән, Дәүләтша (Әбйәлил районы) һәм Иҫәнбәт (Баймаҡ районы) ауылдары янындағы ҡурғандарҙа таш аҫтында балсыҡ һауыт-һаба ярсыҡтары, бронза көҙгө, тимер бысаҡ ҡалдыҡтары, быяла муйынсаҡ табыла, улар яҡынса б.э. тиклем V-IV быуаттарға ҡарай һәм бында һис шикһеҙ кеше мәйеттәре ерләнгән булыуын күрһәтеп тора. Шундай уҡ табылдыҡтар башҡа ҡаҙып асылған ҡурғандар өсөн дә ғәҙәти күренеш икәнлеге билдәле (мәҫәлән, Сибай ҡалаһы янындағы Ҡушалыҡҡыуаҡ ҡурғаны).



*Ун өсөнсө һүрәт. Көньяҡ Уралдың иртә күскенселәре ҡурғандары предметтары: 1, 6 - һауыттар; 2 - көҙгө; 3, 4 - уҡ башаҡтары; 5 - акинак-ҡылыс; 7, 8 - табаҡ-алтарҙар; 9 - ҡылыс; 1, 6 - балсыҡтан; 2 - 4 - бронзанан; 5, 9 - тимерҙән; 7, 8 - таштан.*

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ*

# ШУНДАЙ ФОТОАППАРАТ БУЛҒАН

**Фотокор № 1 (йәки "Фотокор-1", "Фотокор") 1930 - 1941 йылдарҙа сығарылған пластиналы бөкләнмәле (складной) фотоаппарат. 11 йыл эсендә 1 миллиондан ашыу ошондай фотоаппарат эшләп сығарыла.**

"Фотокор" камераһының үҙенсәлеге - объективын горизонталь һәм вертикаль йүнәлештә күсереп йөрөтөү мөмкинлеге. Камераның киҫкенлеген көйләү корпустың артҡы диуарындағы тоноҡ быяла һәм арауыҡ шкалаһы буйынса башҡарыла. Фотоматериал өсөн 9*12 сантиметрлыҡ быяла фотопластинкалар ҡулланылған. Пластинкалар шыуҙырмалы, бер һәм ике яҡлы металл кассеталар эсендә урынлашҡан булған. Шулай уҡ фотоаппарат камераны горизонталь рәүештә ҡуйыуҙы еңеләйтеү өсөн өҫтәмә рәүештә фильмпак-адаптер һәм шыйыҡсалы кимәл менән йыһазландырылған.

Фотоаппараттың габариты йыйылған килеш 106*115*64 мм, ауырлығы 1,15 кг була. Уның корпусы ҡара төҫтәге тирене алмаштырыусы материал менән тышланған, метал әйберҙәре хромланған һәм никелләнгән. Ҡулланыуҙа уңайлы булһын өсөн фотоаппарат корпусының өҫкө өлөшөндә "Фотокор № 1" яҙыулы ҡара күндән эшләнгән тотҡа ҡуйылған. Шулай уҡ ҡаты күнле төргәк менән комплектланған. "Фотокор" фотоаппараты Бөйөк Ватан һуғышы осоро фотохроникаларын төшөрөүҙә киң ҡулланылған.



*Фотолағы фотоаппарат БР Милли музейы филиалы - Дүртөйлө тарихи-тыуған яҡты өйрәнеү музейы фондында һаҡлана, ДИКМ ОФ 2159 иҫәпләү номерына эйә.*

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

60-сы гв. атлы полкы Галки ауылы йүнәлешендә алға барыуын дауам итә. Вяле һәм Галки ауылдары араһындағы ҡалҡыулыҡта урынлашҡан немец пулеметы туҡтауһыҙ атып тора, ә Галки ауылынан дошман батареялары яҡын-тирәне утҡа тота. Ошо ҡәһәрле ҡалҡыулыҡ тотош полктың алға барыуын тотҡарлай. Бында гв. өлкән лейтенанты П.И. Карцевтың 4-се эскадроны атаҡаға бара, әммә командир ошонда һәләк була. Эскадрон менән командалыҡ итеүҙе гв. лейтенанты Александр Симанов үҙ өҫтөнә ала. Ул, ҡалҡыулыҡты урап үтеп, дошманға тылдан һөжүм итергә була. Гвардиясылар дошман позицияларын һирәк кенә ағаслыҡтар араһынан урап үтә. Улар, ҡалҡыулыҡта урынлашҡан дошман рәттәре араһында бер өҙөклөк булыуын иҫәпкә алып, бейек булып үҫкән үлән араһынан шыуыша-шыуыша барып, дошман биләгән окоптарға яҡын уҡ килеп етә. Яугирҙар, уңайлы урындарҙа пулеметтарын урынлаштырып, дошман һис бер көтмәгәндә, көслө ут аса. 4-се эскадрондың пулемет расчеты командиры, гв. өлкән сержанты Еремей Данильянец (Пятигорск ҡалаһынан, милләте буйынса - әрмән), немец окоптарына яҡын уҡ шыуышып барып, ут аса, немец автоматсыларын окопҡа боҫорға мәжбүр итә. Ул дошмандың ике пулемет расчетын һәм ике тиҫтә немец автоматсыларын юҡ итә, әммә ошо алышта үҙе лә һәләк була. Беҙҙең эскадронға Галки ауылына юл асыла, һөжүм дауам итә. А.М. Симановҡа һәм Е.И. Данильянецҡа (уға - үлгәндән һуң) Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

29 сентябрҙә иртән 58-се һәм 60-сы гв. полктары Галки ауылына һөжүм башлай. Уларға "тигр" маркалы танкылар һәм үҙйөрөшлө "фердинанд" орудиелары артына йышҡыланған дошман пехотаһы ҡаршы сыға. Әммә беҙҙең яугирҙар артҡа сигенеү хаҡында башына ла индермәй: дошманды тар-мар итеү, һәләк булған иптәштәренең үсен ҡайтарыу менән яна улар. Кесе лейтенант Гавриил Соловьевтың 3-сө взводы (60-сы полктың 3-сө эскадронынан), барыһынан да алғараҡ китә бирел, тиҙ арала окоптар ҡаҙып, ер ҡуйынына һыйына. Командир, ер һелкетеп, үкерә-үкерә килгән дошман танкыларын үткәреп ебәреп, арттараҡ килгән пехотаны утҡа тоторға бойора. Беҙҙең яугирҙар окоптарына боҫоп ята бирә, танкылар үтеп китеү менән, ҡул пулеметтарынан һәм автоматтарынан һерәйеп атлап килгән дошман пехотинецтарына көслө ут аса, уларҙың байтағы, үлеп йә иһә яраланып, ергә ауа. Пехотанан айырылып киткән дошман танкыларын полктың 45-миллиметрлы орудиелары емертә. Дошман атаҡаһын тағы ла ике тапҡыр ҡабатлап ҡараһа ла, уңышҡа өлгәшә алмай. Беҙҙең бер взвод яугирҙары ошо бер көн эсендә генә немецтарҙың 40-ҡа яҡын һалдатын сафтан сығара.

Шул уҡ полктың 4-се эскадронына дошмандың ике танкыһы һәм бер үҙйөрөшлө орудиеһы ҡаршы килә. Эскадрон флангыһында уларҙы гв. лейтенанты Дмитрий Гречушкин (Ташкент ҡалаһынан) командалыҡ иткән ПТР взводы ҡаршылай. Шул саҡта дошман снаряды шартлап, бер ПТР расчеты сафтан сыға. Офицер, ПТР-ҙы ҡулына ала һалып, яҡын араға уҡ килеп еткән танкыларға һәм дошман орудиеһына ата башлай, һөжүмтәлә улар сафтан сығарыла. Дошмандың танк атаҡаһы кире ҡағыла, иҫән ҡалған һалдаттары сигенеү ягын ҡарай. Алыш яланында алған ҡаты яраларынан офицер Дмитрий Гречушкин да һәләк була. Ошо уҡ эскадрондың ПТР наводчигы, гв. ефрейторы Андрей Титов та ошондай уҡ батырлыҡ күрһәтә. Уны наградаға тәҡдим иткән документта батыр совет яугирының Вяле ауылы өсөн барған алышта дошмандың 3 пулемет нөктәһен юҡ итеүе, ә Галки ауылы янында немецтарҙың ике танкыһы атаҡаһын кире ҡағып, бер үҙйөрөшлө пушкаһын сафтан сығарыуы хаҡында мәғлүмәт теркәлгән. Гв. кесе лейтенанты Гавриил Соловьев, гв. лейтенанты Дмитрий Гречушкин (үлгәндән һуң), гв. ефрейторы Андрей Титов дошман менән алыштарҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн илдең иң юғары наградаһына - Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ *Балаларға хәрби әҙерлек нигеҙҙәре бирелмәне, ул ғына ла түгел, ҡапыл килеп тыуған хәл-торошта үҙеңде нисек тоторға берәү ҙә өйрәтмәне. Уларҙы интернет һәм телефон тәрбиәләне.*

# УЛДАРЫБЫҘҘЫҢ ЭСКЕ ИМАНЫ...

## үҙеңде генә түгел, милләтте оятҡа ҡалдырырға юл ҡуймай!

**Кемдер был тормошта тулҡын өҫтөндә генә йөрөгән кеүек: һәр ваҡыт күҙ уңында, уны барыһы ла белә, ул ихтирам һәм иғтибар үҙәгендә. Шулай уҡ йәнәшәбеҙҙә беҙ нормаль һанаған кешеләр менән сағыштырғанда "хулиганыраҡ" характерлылары ла бар. Уларҙы, кеше ни әйтер, кеше ни уйлар, тигән һорау борсомай, улар уйлай ҙа, шунда уҡ уйлағанын тормошҡа ашырып та ҡуя. Ҡайһы берҙә уның был ҡылыҡтары баш етмәҫтәй кеүек тә күренә. Әммә батыр яуҙа һынала, тигәндәй, иң ауыр ваҡыттарҙа улар һиңә иңен ҡуя. Уларға ышанырға, уларға таянырға мөмкин. Редакциябыҙҙың бөгөнгө ҡунағы Роберт Дауыт улы ӘБҠӘҘИРОВ та шундайҙарҙан. Махсус хәрби операция башланғас, ул тәүгеләрҙән булып үҙ ирке менән хәрби хәрәкәттәр урынына юллана. Уның менән ошо турала әңгәмәләшәбеҙ.**

**Махсус хәрби операция башланыу менән шунда уҡ үҙ теләгегеҙ менән яу яланына киткәнһегеҙ. Был етди аҙымға барырға нимә этәргес булды?**

- Ирмен тигән ирҙең иң мөҡәддәс бурысы - илде һаҡлау. Беҙҙең менән Силәбе өлкәһенән 59 йәшлек мулла булды, иң беренсе 300-сө лә (яраланыусы) ул булды. Унан, ни өсөн махсус операцияға килдең, тип һорағайным, матур һүҙҙәр һөйләп, уратып-суратып торманы, үҙенең Силәбе башҡорттары һөйләшендә: "Илде һаҡтарға кәрәк", - тип кенә яуапланы. Шунан да дөрөҫөрәк итеп әйтеп булмайҙыр. Был ир-егет өсөн бик мөһим аҙым.

**Башҡорттарҙа яугирлыҡ ҡандан килә. Бер таныш этнограф әйтеүенсә, бәжәнәктәр империяға - хандарҙы, башҡорттар - яугирҙарҙы биргән, шуға ла улар иррегуляр армияла булған, ил сиген һаҡлауға йәлеп ителгән. Халҡыбыҙҙың күпселегенең мобилизацияны ла тыныс ҡына ҡаршылауы нимәгә бәйле: ергә ереккәнлек, тыуған тупраҡты һаҡлау кәрәк тигән тойғомо?**

- Илгә хәүеф янағанда ирмен тигән ир үҙенең кесе Ватанын ғына һаҡларға кәрәк тип уйламай. Әлбиттә, тыуған ер төшөнсәһе лә ҙур роль уйнай. Икенсе яҡтан, минең олатайым мәрхүм Бөйөк Ватан һуғышынан өс тапҡыр яраланып ҡайтҡан. Һуғышты Дрезденда тамамлаған, 1-се төркөм инвалиды. Уның бер туған энеһе капитан булған, Ҡыҙыл Йондоҙ, ике тапҡыр Александр Невский ордендары менән наградланған. Ул Украинаның Винница өлкәһендә туғандар ҡәберлегендә ерләнгән. Шуның кеүек, һәр ҡайһыбыҙҙың ғаиләһендә заманында фашизмға ҡаршы һуғышҡан кеше булған. Шуға, әле баш күтәргән фашист ҡалдыҡтарын да һеперереп түгергә кәрәк. Бөгөн дошман - ул бандерасылар ғына түгел, һуғышсылар ялланып, аҡса эшләргә тип хатта Австралиянан килгән. Әлбиттә, Тыуған ил тигәндә, граждан булараҡ, үҙең, эске кисерештәреңде формалашҡан ошо ерҙең улы икәнлегеңде аңлайһың һәм шул булмышың шундай аҙымға этәрә лә инде. Башҡортостан менән күптән туғанлыҡ ептәре бәйләгән (унда 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары күпләп башын һалған) Луганск Халыҡ Республикаһы ла хәҙер Рәсәй составына инде, бөгөн дә шайморатовсылар иҫтәлеген ҡәҙерләп һаҡлай. Һәм беҙ уларҙы фашизмдан яҡларға, фашизмдың Рәсәйгә үтеп инеүенә кәртә ҡуйырға тейешбеҙ.

**Контракт буйынса хеҙмәт итеүсе, мобилизацияланыусы һәм доброволецтың айырмаһы нимәлә?**

- Контрактсы - армиянан һуң артабан да яҙмышын хәрби хеҙмәт менән бәйләргә теләк белдереп, килешеү төҙөгән, йәғни профессиональ хәрби. Улар махсус хәрби операция башланғандан күпкә алдан армия менән килешеү төҙөп, төрлө ғәскәрҙәрҙә эшләп йөрөгән. Күптәр хатта ғинуарҙа ла контракт төҙөүе ихтимал. Улар, тормош тыныс, хәрби хеҙмәткәр булып иҫәпләнермен, аҡса алып ятырмын, төрлө льготалар булыр, тип уйлағандыр, бәлки. Әммә махсус операция башланды ла китте. Ул һис һүҙһеҙ ошо килешеүе нигеҙендә унда барырға бурыслы. Шул уҡ ваҡытта, "мин һуғышырға ялланмағанмын", тип контракттарын өҙөүселәр ҙә булманы түгел, булды.

Мобилизацияланғандарҙы ил үҙе саҡырып, бурыс йөкмәтә. Доброволец - ул үҙ ирке менән саҡырған ергә бара, йәғни аҡса өсөн түгел. Айырма ошонда ғына, ә хоҡуҡи йәһәттән ҡарағанда махсус хәрби операцияға ингәндә һәр кем контракт төҙөй.

Ысынында, махсус хәрби операцияға мобилизация менән генә түгел, ә үҙ ирке менән барыусылар аҙ түгел, улар күп балалы атайҙар, ололар. Был үҙе үк күп нәмә тураһында һөйләй. Улар контрактсы ла, мобилизацияланыусы ла түгел, ә доброволец! Ул унан кире ҡайтмаҫын аңлап та ошо аҙымға барған кеше. Үҙенең ғүмерен түгел, ә "йәшәргә хоҡуғы" булыусыларҙың ғүмерен һаҡларға барған. Эйе, һәр кешенең ғүмерен ҡорбан итергә йәки уны һаҡлап ҡалырға хоҡуғы бар. Әммә хоҡуҡ тип, бер кем дә бармаһа, нимә буласаҡ? Ир кеше - ул илде һаҡлаусы, яугир икәнен онотмайыҡ.

**Яу яланында ниндәй сифаттар кәрәк?**

- Егеттәргә ниндәй кәңәш бирергә була инде: бергә булырға, ир-егет булырға, бер-береһен ҡарарға, бер-береһенә ярҙам итергә. Үҙеңдән башҡаны ла уйларға һәм буш ятмаҫҡа кәрәк. Нимә менән булһа ла шөғөлләнергә: яңы ҡоралды, тирә-яҡты өйрәнергә. Кемдер килеп өйрәтер тип көтөргә түгел. Офицерҙарҙан яңы ҡоралды өйрәтеүен талап итергә, өйрәтмәйҙәр икән, хәрби тәжрибәһе булған кешенән һорашырға. Шул саҡта ваҡыт та тиҙ үтә, үҙеңә ышаныс та арта. Һуғышта ла тыныс тормоштағы кеүек иң мөһиме - хәйләләшмәҫкә, тура ҡарап, тура һөйләп, тураһын эшләргә кәрәк. Хатта кеше тураһында нимә уйлағаныңды ла тураһын әйт. Шунда һәр кем, һәр нәмә үҙ урынына ултыра.

Тағы мин нимәгә иғтибар иттем: ян-яҡтан атыш-шартлау тауыштары булһа ла һиҙгерлек уяна, быға беҙҙең ата-олатайҙарҙың, ғөмүмән, башҡорттарҙың оҫта һунарсы булыуы ла йоғонто яһайҙыр, ҡан хәтере уяналыр - пулялар, миналар һыҙғырыуынан кемдәр атыуын айырырға өйрәнәһең. Ҡаршы яҡтың ялланған һуғышсыларының ҡоралының калибры ҙурыраҡ, шуға һыҙғырған тауыш сығара. Шундай тауыш килгән яҡҡа көслөрәк баҫым яһаһаң, улар шунда уҡ позицияһын ҡалдыра...

**Тыныс тормошта дуҫлыҡ тигән төшөнсә "бергә ҡунаҡ булдым", "бергә һунарға сыҡтым", "бергә балыҡ ҡармаҡланым", хатта "бергә селфи эшләнем" тигән кимәлдә баһалана. Хәрби хәрәкәттәр барған ерҙә дуҫлыҡ төшөнсәһенә ниндәй мәғәнә һалына?**

- Унда бөтөн нәмә дуҫлыҡҡа ҡоролған. Мәҫәлән, бына һинең подразделениеңда һәр кем кемдең нимәгә һәләтле, ниндәйҙер хәл-ваҡиғала өмөт бармы, ышанырға буламы, юҡмы икәнен белә. Унда иң мөһиме - ышаныс. Әгәр эргәңдәге кешегә ышанһаң, тауҙар аҡтарырға мөмкин. Эргәңдә икенсе кешенең иңен тойоу ныҡ ярҙам итә. Яу яланында ауыҙ асып, тирә-яҡҡа ҡаранып йөрөргә ваҡыт юҡ, ҡарашың алға төбәлгән, эргә-тирәлә нимә булғанын, кем барғанын күҙ ҡырыйы менән генә күҙәтеп, тойоп бараһың. Эргәңдәге егеттәр ҡыйын хәлдә ҡалдырмаҫына ышанаһың һәм үҙең дә уларҙы ауыр хәлдә ҡалдырмаҫҡа тырышаһың.

Яу яланындағы дуҫлыҡ көслөрәк, ныҒыраҡ, ышаныслыраҡ. Бер-берең өсөн яуаплыһың. Унда яҡшы кешенең тағы ла яҡшыраҡ яҡтары, насар кешенең тағы ла насарыраҡ сифаттары асыла. Ысын дуҫтар тоғро ҡала, һатлыҡтар ҡасыу яғын ҡарай. Битлектәр сиселә.

**Бөгөн ғаиләлә бала күберәк әсәй ҡарамағында. Ә бит элек тә, ир-егет ил һағында булғанда, улдарын әсәйҙәр тәрбиәләгән - ысын батырҙар итеп тәрбиәләгән. Хәҙерге заманда нисек итеп батырҙар үҫтерергә?**

- Был мәсьәлә буйынса мин 25-30 йыл элек тә әйтә торғайным: вайнахтарҙың, Кавказ халҡының ир-егеттәре, нигеҙҙә, "шабашкаға" йөрөнө, ә ҡатын-ҡыҙҙары яугирҙар тәрбиәләне. Ә беҙҙең ҡатындар ҡулында малайҙар бисә холоҡло булып үҫә. Барыһы ла түгел, әммә күпселектә мәмәйҙәр. Тимәк, ҡатын-ҡыҙ үҙенең тәрбиә алымдарын үҙгәртергә тейеш. Әсәләрҙең: "Минең улым ҡыҙҙар кеүек", тип әйтеүе ысын ир-егет өсөн - ғәрлек.

Беҙҙең заманда егеттәр армияға бармаһа, ҡыҙҙар боролоп та ҡарамай торғайны. Ә Ельцин заманында армиянан ҡасып ҡалыу ғорурлыҡ, "текәлек" билдәһе тип һаналды. Ҡайһы бер башҡорттар ҙа, бигерәк тә йәштәр, шулай уйланы. Хәҙер беҙгә ошо ҡарашты юҡҡа сығарырға, егеттәрҙе икенсе төрлө тәрбиәләргә кәрәк.

**Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, йәмғиәттә Ален Даллес доктринаһы тураһында һүҙҙәр йөрөнө, матбуғатта яҙылды - бик иғтибар бирмәнеләр. Һуңынан Сорос белем биреү системаһы индерелде, Европа менталитеты яйлап инә башланы. БДИ ингәс тә ҡаршылар булды - ул ваҡытта уны хуплап, әллә ни күреп ҡаршы алдылар. Бөгөн күптәр ошондай яңылыҡтар индереүҙең, ысынлап та, дөрөҫ булмауы тураһында һөйләй. Беҙ шул заманда уҡ ошо яңылыҡтарға кәртә ҡуйырға әҙер түгел инекме, әллә Рәсәйҙә махсус рәүештә шундай сәйәсәт алып барылдымы?**

- Әлбиттә, былар барыһы ла маҡсатлы алып барылған эш. Быны беҙ Украина миҫалында ла күрәбеҙ. Көнбайыш идеологияһы украиндарҙың аңын тулыһынса үҙгәртеүгә өлгәшкән. Унда нормаль граждандар бик аҙ. Икенсе яҡтан, Украина Көнбайышҡа Рәсәйгә инеү, уны буйһондороу өсөн плацдарм булып торҙо. Украина халҡының аңын үҙгәрткәндән һуң, беҙгә күсерҙәр ине, шуны күҙ уңында тоттолар ҙа инде.

Рәсәйҙең элек-электән, Александр Өсөнсө әйтеүенсә, берҙән-бер дуҫы - армия һәм флот ҡына. Беҙ бойондороҡһоҙ көслө ил булып ҡына һаҡлай алабыҙ үҙебеҙҙе. Шуға күрә һәр ваҡыт үҙебеҙҙе яҡларға әҙер булырға тейешбеҙ.

**Бер ваҡыт мәктәптәрҙә хәрби әҙерлек дәрестәрен бөтөрҙөк тә, хәҙер был аҙымдың дөрөҫ булмағанын күрәбеҙ - ҡабат НВП дәрестәрен индереү тураһында уйлай башланыҡ...**

- Күптән кәрәк ине, сөнки беҙҙең заманда хәрби-спорт уйындарына ҙур иғтибар бирелде, өлкән синыф егеттәре хәрби йыйындарҙа булып, бөтөнләй үҙгәреп, ныҒынып, үҙҙәрендә ышаныс тойоп ҡайта ине. Ә һуңынан балаларға хәрби әҙерлек нигеҙҙәре бирелмәне, ул ғына ла түгел, ҡапыл килеп тыуған хәл-торошта үҙеңде нисек торға берәү ҙә өйрәтмәне. Уларҙы интернет һәм телефон тәрбиәләне. Былар бит барыһы ла маҡсатҡа ярашлы бөтөрөлдө. Хәҙер совет осорондағы НВП дәреслеген нигеҙ итеп алып, уны заманға ярашлы үҙгәртергә һәм уҡыта башларға кәрәк. Шул уҡ квадрокоптерҙар менән нисек эш итеүҙе мәктәптә үк өйрәтеү зарур. Әле өлкән синыф егеттәрен Әлкәгә алып килеп, хәрби йыйындар үткәрә башлауҙары ла яҡшы. Ошондай лагерҙар бик кәрәк.

Беҙ үҙ сиратыбыҙҙа башҡорт-казак бүлеген тергеҙә башланыҡ һәм мәктәп уҡыусылары менән осрашырға, мәктәптәр менән хеҙмәттәшлек итергә әҙербеҙ. Бында шуны ла әйтеп китергә кәрәк: хәҙер бик күп "һул" казактар барлыҡҡа килде һәм улар үҙҙәрен төп казактар итеп күрһәтергә теләй. Уларҙың республикаға бөтөнләй ҡыҫылышы юҡ, тарихҡа ярашлы, Башҡортостанда Башҡорт-мишәр казак бүлеге вәкилдәре төп казактар булырға тейеш.

**Хәрби хәрәкәттә булып, икенсе тормошто күрҙегеҙ. Бында ҡайтҡас, ниндәйҙер**

**адаптация кәрәк булдымы, ғөмүмән, һуғыш тормошҡа ҡарашығыҙҙы, ҡиммәттәрегеҙҙе үҙгәрттеме?**

- Тәүге уйым - тыныс тормошта нисек рәхәт, тигән уй булды. Шулай ҙа ҡапыл ғына бында һуғыш юҡ икәнен бер килке аңлай алмайһың. Бер машина үтеп барғанда нимәлер "шарт" итеп ҡалғайны, мин шунда уҡ көсөргәнешле халәткә индем, инстинкт кимәлендә һуғышырға әҙерләндем, шунан ғына Башҡортостанда икәнем башыма барып етте. Ә һуғыш синдромы бөтөнләй булманы, юҡһа, ҡайһы берәүҙәр йоҡлай алмай интегәбеҙ, ти. Аллаһы Тәғәләгә ышанған кешеләргә еңелерәктер, моғайын. Яу ҡырында ла беренсе аҙымды яһап, ҡурҡыуынды еңһәң, артабан еңелерәк. Һәр осҡан пуля, снаряд тап һиңә төбәлмәгән бит. Иманың, Аллаһы Тәғәләгә ышанысың булһа, ҡурҡыу бөтә.



Икенсенән, тормош ваҡлыҡтары хәҙер бик күҙгә күренмәй, уларға иҫем китеп бармай. Үҙемде элеккегә ҡарағанда күпкә тынысыраҡмын тип уйлайым. Был бик етди, мөһим аҙым булды минең өсөн.

**Бөгөн йәмғиәт икегә бүленде, төрлө фекерҙәр йөрөй, шул уҡ ваҡытта егеттәрҙе үлемгә ебәрмәйек, алып ҡалайыҡ, тигән саҡырыуҙар ҙа ишетелә. Кеше тыуғанда уҡ Аллаһы Тәғәлә уға насип ғүмер бирә. Маңлайына яҙылһа, эсер һыуы, һуңғы һулышы ҡайҙа - шунда үлә йәки һәләк була. Маңлайына яҙылғас, улар бында ҡалһа ла үлемгә сәбәп табылыр ине...**

- Яу ҡырында һәләк булғандар - батыр, тарихҡа ла улар шулай инәсәк. Ысынлап та, маңлайыңа нимә яҙылған - ҡасып булмай. Ваҡытың етһә, артыҡ бер тамсы һыу ҙа эсә алмайһың, бер тамсы ризыҡ та ҡаба алмайһың, тиҙәр бит. Һәр нәмәнең ваҡыты була. Беҙҙең батальонда шундай бер ваҡиға булды: миномет ротаһы командиры, подполковник, үҙенә дөйөм траншеянан 30-40 метр йырағыраҡ айырым окоп ҡаҙып, бомбежка башланһа, гел шунда ырғый ине. Бер ут ҡойоно башланғас, үҙенең окобына һикерҙе, мина тап уның өҫтөнә килеп тә төштө. Шундай хәлдәр ҙә була...

**Тылда шундай бәхәстәр бара, йәнәһе лә, Башҡортостандан ир-аттарҙы күберәк ебәрәләр, башҡа төбәктәрҙән алмайҙар. Әммә ут-һыу кисеп ҡайтҡан кеше булараҡ, хәлторошто ысынбарлыҡта нығыраҡ беләһегеҙҙер...**

- Мобилизацияланғандар араһында башҡорттар ғына күберәк тип әйтә алмайым, ләкин республиканан күптәр һәм улар иң алғы һыҙыҡта, һәр ерҙә Башҡортостан флагы күренеп тора. Уға тиклем дә ишеткәйнем, Тәтешле районына ялға ҡайтҡан Фәнис Хөсәйенов эргәһенә барып, уны ҡабаттан яу яланына оҙатҡанда ул да "Хәҙер башҡорттарҙан хатта чечендар көнләшә", тигәйне. Фәнис һөйләүенсә (ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙер ул мәрхүм инде), уның подразделениеһында Татарстандан ике вәкил булған, улар Татарстандыҡын түгел, Башҡортостандың флагы төҫөндәге шеврон тағып йөрөгән. Был нимә тураһында һөйләй: һәр кем көслөләргә һыйына, көслөләргә ярамһаҡлана, сөнки яҡшы яугирҙар эргәһендә ҡурҡыныс түгел. Шуға егеттәребеҙ менән ғорурланайыҡ, уларҙың өлгөһөндә тәрбиәләйек йәштәрҙе. Ата-бабаларҙың данына лайыҡ булайыҡ, үҙебеҙ ҙә әҙерәк дан ҡаҙанайыҡ. Ир яманы үлер мал өсөн, ир яҡшыһы үлер дан өсөн, тип юҡҡа әйтмәгән бит халыҡ.

Благовещен ҡалаһынан позывнойын "Бешеный башкир" тип алған Олег Маленковты 2 сентябрҙә ерләнек. Ике тапҡыр Ҡаһарманлыҡ ордены менән наградланған ул. Беҙгә ошо өлгөләрҙе күрһәтергә, күтәрергә, ғорурланырға кәрәк. Әгәр Башҡортостанда йәшәгән халыҡтар башҡорт атамаһы менән ғорурлана, үҙҙәрен башҡорт итеп таный икән, был бик юғары баһа. Ғөмүмән, бөгөн башҡорт булыу - ғорурлыҡ. Халҡыбыҙҙың үҙенсәлеге тағы нимәлә: эске тәртибе, иманы бар уның. Ул үҙендә генә түгел, милләтте оятҡа ҡалдырырға юл ҡуймай. Күп халыҡтарҙы күрҙек - үҙҙәре мосолман, дин уларҙа көслөрәк, беҙҙән күберәк беләләр, әммә имандары юҡ.

Тағы шуны әйтер инем: бөгөн тап башҡорттарҙың күтәрелеш ваҡыты. Яу яланында беҙҙең егеттәр нисек Башҡортостандың, башҡорттарҙың дәрәжәһен күтәрә, беҙгә тылда ла халҡыбыҙҙың баһаһын күтәрергә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәсәйҙә һуғыш үҙ тынын өрмәгән бер генә йорт та юҡтыр, моғайын. Тәүҙә олатайҙар-атайҙар, һуңынан сағыштырмаса тыныс булған осорҙа ағайҙар, ҡустылар... Чечнянан һуғыштан ҡайтҡан бер ҡустым ағалары алдында нимәгәлер ҡыҙып киткәс, апайым әйтә ҡуйған: "Бер түгел, ике ағай булып ҡарап тораһығыҙ, бөгәрләп кенә һалып тынысландырығыҙ ҙа ҡуйығыҙ..." "Юҡ, - тип яуаплаған улдары, - ул йәш буйынса беҙҙән кесе булһа ла, тәжрибәһе менән оло!" Хәрби хеҙмәт үткән ир-егеттәрҙең һуғышҡа һәм һуғышта ҡатнашыусыларға ирҙәрсә ҡарашы, ирҙәрсә мөнәсәбәте ошо бер һөйләмдә лә асыҡ сағыла һәм ул ҡатын-ҡыҙ фекеренән ныҡ айырыла. Ир-егеттәр йыһанды, диңгеҙ төбөн өйрәнеп, һуғыштарҙа ҡатнашып, башҡа бик күп глобаль проблемаларҙы хәл иткәндә, ерҙә тормош туҡтамаһын өсөн беҙгә, ҡатын-ҡыҙға, өмөт менән Ер шарын үҙ иңебеҙҙә күтәреп, ир-егеттәребеҙгә тыныс тыл тәьмин итеп торорға һәм уларға ышанырға, ут эсендә йөрөгәндәрҙе тоғро көтөргә генә ҡала...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# БЕР ҠЫЙЫҠ БАШЫ...

## ике төрлө донъя



**Ошо гәзитебеҙҙә күптән урын алған, тик һирәгерәк сыҡҡан рубриканың шарты буйынса автор тәҡдим иткән кинәйәләргә интерпретацияны гәзит укыусы үҙе яҙырға тейеш. Һеҙ, гәзит уҡыусылар, фекер алышыуҙы дауам итеп, үҙ ҡарашығыҙҙы яҙып ебәрһәгеҙ, бик тә шат булыр инек. Ни тиһәң дә, күмәк фекер, ғөмүмән, битараф булмау үҙе үк теләктәшлек билдәһе, берҙәмлек сығанағы бит. Ә хәҙер "Тураһын әйтеп туғаныңа ярамағанда кинәйәләп әйтеү, берәй фәһемле ваҡиға йә тарих һөйләү, ишаралау күпкә отошло", тигән фекерҙе бергәләп кинәйәләйек.**

Ысынында, туғанға ярап була ул. Бушҡамы ни, "Ике туған талаша, атҡа менһә, яраша", тиҙәр. Туғандың тура әйткәнде ҡабул итеренә, һис юғы, үпкәләгән хәлдә лә, ғәфү итеренә ышанғанға, беҙ туғандарыбыҙҙы йышыраҡ рәнйетәбеҙ ҙә инде. Ә бына таныш булмаған кешегә, йәғни туған булмағанға тураһын бәреп ҡара: һөҙөмтәһе һин көткәнсә булмауы ихтимал. Аңлашылмаусылыҡтар, ҡапма-ҡаршылыҡтар, хатта дошманлашыу шуның арҡаһында килеп сыға түгелме? Һүҙ кешенең берәй етешһеҙлеген күҙенә бәреп әйтеү тураһында барғанын аңлағанһығыҙҙыр. Ә бына кешенең ыңғай яҡтарын күреү ике яҡ өсөн дә файҙалы. Күреү, әммә шаштырып маҡтау түгел. "Кешене юҡҡа сығарам тиһәң, уны бер туҡтауһыҙ маҡта", тип бушҡа әйтмәйҙәр бит.

Тимәк, үҙ-ара мөнәсәбәттә тура һүҙлелек һәр саҡ ыңғай һөҙөмтә бирмәй, ул проблеманы хәл итеүгә ҡарағанда, киреһенсә, көрсөккә алып килеүе ихтимал. Ә бына тәү ҡарамаҡҡа бер ниндәй логикаға ҡоролмаған кинәйәләр, мәҫәлән, кешене уйланырға мәжбүр итә. Улар һинең ҡулыңа әҙер рецепт тоттормай, теге йәки был хәл-ваҡиғаның сиселешен үҙең уйлап табырға һәм ҡарар ҡабул итергә тейеш булып сығаһың. Шул саҡ оҙаҡ ваҡыт таба алмай йөрөгән яуап "ҡылт" итеп өҫкә ҡалҡып сыға, хатта ҡай саҡ үҙең дә аптырап ҡуяһың. Психологияла был күренеш инсайт, йәғи һиҙгерлек, берәй нәмәнең асылына ҡапыл төшөнөү, тип атала.

Мәҫәлән, бер кеше оҙаҡ ваҡыт бер аяғында баҫып тора, ти. Һыңар аяҡта оҙаҡ торһаң, ул аяҡ арый, быуындар һыҙлай башлай. Кеше бына-бына хәле бөтөп ҡоларға тейеш. Әлбиттә, ул башҡаларҙан ярҙам һорай. Ярҙам итергә ашығыусылар оҙаҡ көттөрмәй. Берәү һыҙлаған аяҡҡа массаж яһай башлай, икенсеһе ҡолаҡ артына энә ҡаҙарға тәҡдим итә. Йәнәһе, шулай иткәндә, аяҡ тарамыштары яҙыласаҡ. Өсөнсө кеше уның ҡолап барыуын шәйләп, таяныс ҡулын һуҙа.

Был хәлде ситтән күҙәтеүселәр һыңар аяғында торған кешене йәлләй, таяныс ҡулын һуҙған кеше менән һоҡлана. Шул саҡ аҡыл эйәһе лә табыла. "Бер аяғында баҫып торған ике аяғы ла булмаған кешегә ҡарағанда күпкә бәхетле", - ти ул, бөтәһе лә ишеткәндәй итеп. Былар эргәһенән үтеп барыусы: "Һин үҙеңде һығылмалы пружина кеүек күҙ алдына килтер. Бар ихтыяр көсөңдө туплап, уйыңды ошо йүнәлешкә тупла, һыҙланыуың шундуҡ бөтөр", - тип кәңәш бирә. Үҙ ғүмерендә күпте күргән берәү: "Иртәгә һыҙлау үҙенән-үҙе бөтәсәк", - ти, иҫе китмәй генә. Ниһайәт, һыңар аяғында торған бахыр эргәһенә тағы берәү килә. "Ниңә һыңар аяғында ғына тораһың? - тип һорай ул. - Икенсе аяғыңды турайт, һинең бит икенсе аяғың бар... "

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡыйыҡ башындағы баҡсала ике ғаилә йоҡлай. Яратмаған килене менән ғәзиз улының бер-береһенә һыйынып ҡына йоҡлауҙарын күргән әсәй кеше былдай хәлгә тыныс ҡына ҡарай алмай. Ахырҙа, улы менән киленен йоҡоларынан уятып, ҡысҡырып ебәрә: "Бынауындай эҫелә һеҙ нисек бер-берегеҙгә һыйынып ятаһығыҙ? Был һеҙҙең һаулығығыҙға зыян килтерә!"**

**Баҡсаның икенсе осонда ҡыҙы менән ятаҡан кейәүе йоҡлай. Улар, киреһенсә, бер-береһенән айырым ята. Әсәй кеше уларҙы иркәләп кенә уята ла: "Кәҙерлеләрем, бынауындай һалҡын төндә һеҙ ниңә улай айырым ятаһығыҙ? - ти ул. - Бер-берегеҙгә һыйынып ятығыҙ".**

**Әсәй кешенең был һүҙҙәрен ишеткән килене, доға уҡығандай, ҡулдарын өҫкә күтәреп: "Эй, Хоҙайым, һинең ҡөҙрәтең шул тиклем киң: ҡыйыҡ башында бер баҡса, ә унда ике төрлө климат", - ти әсенеп.**

**Кинәйә беҙҙән - киңәйтеү һеҙҙән, тип тәҡдим итәбеҙ гәзит уҡыусыларыбыҙға. Һеҙ нисек фекерләрһегеҙ ошо турала?**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

Осраҡлы тап булған ошо ҡыҙҙы эйәртеп ҡайтып инде һылыуы. Ҡыйғас ҡара ҡашлы, көлөп торған ҡара күҙле, түңәрәк кенә йөҙлө һылыуҙы күргәс тә, Мирҙың күңеле: "Бына бит ул! Мин көткән ҡыҙ!" - тип елкенде. Күҙ төшмәҫлек ҡыҙ түгел ине уның Диләфрүзе. Исеме лә, үҙе лә, күңеле лә сафтан-саф гүзәллек сағылышы ине шул! Бер ҡараштан аңлашып, бер ҡараштан һөйөү хисе ҡабынып яратышты улар булаcаҡ хәләле менән. Шулай ҙа оҙон ике йыл буйы анда-бында бер осрашып, йә ҡар-буранлы, йә ямғыр-елле, йә йәйғорло-йондоҙло, йә иҫ китмәле ҡояшлы көндәр-кистәрҙә урам буйлап етәкләшеп йөрөнөләр... Иҫенә төштөмө шәмәхә күҙле ҡыҙ, сағыштырып ҡаранымы уларҙы Мир үҙ-ара? Булғыланы... Иң тәүге осрашыуҙарында Диләфрүзҙең ипле генә сылтыратып көлөүе, оялсан ҡараштарын ҡуйы керпектәренә йәшереп йылмайыуы, ҡулдарын усына алғанда саҡ-саҡ ҡына һиҙелерлек ҡалтыранып, ҡулын алырға маташҡан мәлдәрҙә уның ошо тыйнаҡлығы үтә әрһеҙ, күҙенә, туп-тура ҡарап: "Мин һинеке булырға теләйем!" - тигән немец ҡыҙын иҫенә төшөрҙө. Иҫенә төшөрҙө һәм был ике ҡатын-ҡыҙҙың бер-береһенән күк менән ер шикелле айырылыуын тойҙо. Иоланта менән Диләфрүз... Исемдәрендә үк һалҡынлыҡ һәм наҙ... Әрһеҙлек һәм тыйнаҡлыҡ, тәкәбберлек һәм ғорурлыҡ, мин-минлек һәм әҙәплелек... Үҙеңде, үҙ хистәреңде беренсе урынға ҡуйыу һәм яратҡаның хаҡына үҙеңде онотоу... Тик үҙ бәхетеңде генә уйлау һәм һөйгәнеңде бәхетле итергә тырышыу... Бына ниндәй упҡын ятҡан улар араһында! Шуны ваҡытында аңлаһа ла, алыҫ һәм аңлайышһыҙ икенсе йыныс ҡыҙынан баш тартыуы, Тыуған ерен, әсәһен, ағаһын, ауылын, атаһы хәтерен һайлауы - ниндәй дөрөҫ булған!..

Бәхетле йәшәне улар Диләфрүзе менән. Береһе ауыҙ асып өлгөрмәй, икенсеһе уның ни әйтерен аңлап тора. Бер түгел, дүрт ҡыҙ үҫтереп, уларҙан күрмәгән изгелекте ҡыҙҙарынан, кейәүҙәренән күреп, тыныс, һил ҡартлыҡ кисерҙе Зиннәтуллиндар. Әллә ниңә иртәрәк ҡуҙғалды шул Диләфрүзе - 72-һен тултырҙы ла шым ғына китте лә барҙы. Йөрәген яндырып, һуңғы һулышына әҙерләнгән ҡатыны янында ултырғанда Мир: "Күңелемдә йылдар буйы йөрөткән серҙе сисергәме әллә? Тегендә ҡыҙым барлығын һөйләргәме?"- тип уҡталды ла... ҡыйманы. Берҙән-берем тип һанаған йәмәғәтенең күңелен ҡайтарыуҙан, кисермәүҙән, ана туҡтайым, бына туҡтайым тип типкән нескә йөрәгенә уңалмаҫ яра һалыуҙан ҡурҡты. 50 йыл белмәгәнде, инде һанаулы ҡалған минуттарын бәхетһеҙ итеүҙән тыйылды... Дөрөҫ тә эшләгәндер: яратып, яратылып йәшәп, яратҡан кешеһенең ҡулын тотоп ашты хәләленең йәне асманға... Ә бит бер саҡ, Германияға туристик юллама менән барып, Иоланта-Миләүшә менән осрашып, ҡыҙы барлығын белеп ҡайтҡан 1984 йылда ул саҡ-саҡ ҡына асылмай ҡалды Диләфрүзенә.

...Иртәнгә табан ҡабырғаһына төртөп уятты уны ҡатыны:

- Һаташаһың шикелле. Баянан бирле әллә нимә һөйләйһең, әллә немессә, әллә инглисса. Миләүшә, тигән һымаҡ булдың. Аныһы кем тағын? - Ҡатынының артыҡ ҡыҙыҡһынмай ғына әйткән һүҙе йөрәген өтөп алды Мирҙың. Күҙен тырнап асҡан кеше булып, кирелеп-һуҙылып, ваҡытты һуҙырға тырышып, мыҙылып ятты. Ни тиергә? Әллә әйтергәме? Үпкәләһә, кит немкаңа, тиһә? Юҡ, юҡ... Ғаиләне емереү бер ни түгел, ғорур уның Диләфрүзе, кисермәҫ!




- Әллә, төш күргәнмендер... Малай тип көтһәк тә, бәлки, тағы ҡыҙ булып ҡуйыр. Ҡыҙ булһа, Миләүшә тип ҡушайыҡмы, тип уйлағайным. Шуны әйткәнмендер, - тип ялғанлап ҡотолдо.

- Миләүшә, Миләүшә... Матур исем, яҡын-тирәлә лә юҡ. Нимә аңлата икән һуң? Мәғәнәһе алама булып ҡуймаһа, - тине һуңғы айҙарын йөрөгән Диләфрүзе.

- Сәскә исеме бит. Руссаһы "фиалка" шикелле.

Шулай итеп уларҙың төпсөк ҡыҙҙары Миләүшә исеме алды, күҙҙәре лә атаһыныҡына тартып, зәп-зәңгәр ине...

## Атай рухына баш эйеү

Атаһының ҡәберен барып табыу бәхетенә лә ирешә Мир Зиннәтуллин. Армия хеҙмәтенән ҡайтҡас, бер осор эшһеҙ йөрөп алыу форсаты сыҡты. Үҙенә ҡалһа, ҡайтыу менән колхозға эшкә сығыу ине ниәте. Әммә военкоматта уны теркәүгә алыуҙан баш тарттылар. "Һин армияла урта мәктәпте тамамлау тураһында документ алғанһың, сержант мәктәбен бөткәнһең! Беҙгә һинең кеүек кадрҙар етешмәй! Етмәһә, хәрби разведка! Военкоматҡа эшкә алабыҙ!"- тинеләр. Мир ризалашманы. "Әсәйем яңғыҙ, шул арҡала ғына армияла ҡалыуҙан да баш тарттым..." "Бында үҙ яныңа күсереп алырһың. Торлаҡ бирербеҙ", тинеләр. Уға ла ризалашмағас, милицияға эшкә ҡоҙалай башланылар. "Икеһенең береһен һайла! Колхозда эшләрлек өс класс бөткәндәр һинһеҙ башҡа ла күп! Уйларға бер аҙна ваҡыт", - тип ҡайтарып ебәрҙеләр. Уйлап та торманы Мир, бармаҡҡа ҡарар иткәйне инде. Уның көсө ташып тора, сиҙәм аҡтарырға ҡушһалар ҙа риза булыр ине.

Оҙон өс йыл буйы үҙе өйҙә булмағанда ҡыйшайған ҡойма-фәләнде, кәртә-ҡураны ипләштерҙе, йүнәтерен йүнәтте, яңыртырын яңыртты. Иптәштәре менән күрше ауыл аша үтеүсе поездарҙы ҡаршылап, вагон бушатырға ла йөрөп, аҡса табырға тырышты. Өҫтөнә кейер кейеме юҡ ине. Германияла йылы булғас, китель менән генә ҡайтып төшкәйне, бында ни ҡыш үҙ хөкөмөнә ингән: ҡар яуа, буранлап китте. Хеҙмәткә киткәнсе кейгән кейемдәре бәләкәй, өс йыл эсендә буйға ун сантиметрлап үҫеп, егерме килоға артып, мыҡты кәүҙәле булып ҡайтҡан, ир ҡорона ултырған кешегә үҫмер малайҙың күлдәк-ыштаны ҡайҙан яраһын! Тәүге йылдары өҫтөнән һалдат кейемен һалманы. Хәйер, ул йылдарҙа бар һалдаттар ҙа әсәр-бишәр йыл шулай йөрөнө, ни хәл итәһең, кейемгә ҡытлыҡ, колхоз аҡса түләмәй. Онон, ярмаһын биреп торалар ҙа әҙләп, уны өҫтөнә ҡаплап йөрөп булмай. Шулай аҡса йүнләп йөрөгән, военкомат учетҡа ҡуймай аптыраған осорҙа ул буш ваҡытында, бигерәк тә кискеһен атаһының хаттарын алып, уҡып, уйланып ултырыр булып китте.

Әгәр тере булһа, ниндәйерәк булыр ине икән атаһы? Ул һуғышҡа киткәндә өс йәше лә тулмай ҡалған Мир атаһын иҫләмәй ҙә инде. "Бик матур, мөһабәт буйлы, ҡырлас танаулы, ҡыйғас ҡара ҡашлы ине дә булды", - тип хәтерләй әсәһе. Бер генә фотоһүрәте бар атаһының. Әсәһе ултырғыста ултыра, атаһы уның яурынына ҡулын һалып, баҫып тора. Икеһе лә йәш, сибәр яңы ҡауышҡан парҙың йөҙҙәренә сыҡҡан бәхеттәре ташып-түгелеп торғандай. Ләкин ул бәхет бик ҡыҫҡа булған шул: ете йыл ғына... Һуғышҡа китер алдынан өҙҙөрөп гармунында уйнаған-уйнаған да атаһы, гармундың бер яғына Рим, икенсе яғына Мир тип улдарының исемен уйып яҙған. "Мин ҡайтыуға икеһе лә шартлатып гармунда уйнарға өйрәнһен!" - тигән ҡатынына береһе алтынсы, икенсеһе өсөнсө йәше менән барған улдарына ҡарап. "Иҫәр! Улар шулай ҙурайғансы ҡайтмайһыңмы ни! Алып кит гармуныңды! Уйнап кит, уйнап ҡайтып төш!" - тигән талап ҡуйған ҡатыны. Атаһы ризалашҡан: егеттәр тейәлгән арбаның иң артына ултырып, күҙҙән юғалғансы уйнаған. Уға ҡушылып йырлаған фронтҡа китеүселәр ҙә, бар оҙатҡан халыҡ та илап ҡалған. Быларҙы һөйләгәндә әсәһе лә илай... "Мин ҡайтмаһам да, гармуным ҡайтыр. Ике улымдың исеменән таныһығыҙ!"- тигән атаһы. "Гармунның кәрәкмәй! Үҙең ҡайт!" - тип яуапланым, улай тимәһәм, әллә гармуны булһа ла әйләнеп ҡайтыр ине ҡомартҡы булып..." - ти ине әсәһе.

Мир атаһының хаттарын уҡып, ҡапыл тертләне. Ул бит атаһының ҡайҙа хеҙмәт иткәнен, ҡайҙа ерләнгәнен белә ала ла баһа! Хәрби разведчик! Иолантаның әллә ҡасан сереп бөткән әсир ағаһын табышҡанды, үҙ атаһының һуңғы төйәген ни өсөн эҙләп тапмаҫҡа? "Полевая почта, в/ч №... " Ул ғәскәрҙең номерын хәтерендә ҡалдырҙы ла, килеһе военкоматҡа барғанда атаһының яҙмышын белешә. Уға әҙ-мәҙ документтарын күрһәтеп, архивҡа барырға ҡуштылар. Күпме йөрөһә-йөрөнө, атаһының ерләнгән урынын табыуға өлгәште Мир. Ҡырым, Керчь... Әммә атаһы ҡәберенә зыярат ҡылыу оҙаҡ йылдарға һуҙылды..

60 йәшен тултырып, хаҡлы ялға сыҡҡас ҡына, йәй көнө ағаһы Рим менән икәүләп юлланды улар алыҫ сәфәргә. Поезд менән Керчь ҡалаһына килеп төштөләр һәм, алдан килешеп ҡуйғанса, тура музейға юлландылар. Герой-ҡала Керчтең тарихи мәҙәни ҡурсаулығына ҡараған "Аджимушкай таш сығарыу (каменоломня) сәнәғәте музейы" тип аталған панорама-мемориаль комплекс һушты алырлыҡ ҙур ине. Экскурсовод һөйләгәндәрҙе тыңлап сәстәр үрә торорлоҡ. Керчь ҡалаһынан биш саҡрым ғына алыҫлыҡта урынлашҡан был ҡасабала совет һалдаттары фашистарға ҡаршы батырҙарса һуғышҡан. 1942 йылда үҙҙәренән әллә нисә тапҡыр көслө фашист армияһы һөжүменә ҡаршы тора алмай, Керчь ярымутрауынан сигенергә мәжбүр булалар. Полковник Павел Ягунов етәкселегендәге һалдаттар төркөмө, сигенгән ғәскәрҙәр һәм ябай халыҡ килеп ҡушылыу һөҙөмтәһендә, 13 мең кешегә барып етә. Бындай ҙур ғәскәр менән даими бомба яуып, снарядтар шартлап торған боғаҙ аша сығыу мөмкинлеге ҡалмағас, бөтәһе бергә катакомбаларға йәшеренергә мәжбүр була. Әммә унда оҙаҡ ҡалыу мөмкин түгел: ашарға ризыҡ, эсәр һыу юҡ. Һалдаттар үҙҙәре тау-таш аҡтарып, тәрәнлеге 15 метрға еткән ҡоҙоҡ ҡаҙып та ҡарай, үлгән сысҡандар, ярғанаттар һәм ҡомаҡтар менән туҡлана, таштарға ҡумыҡҡан мүктәрҙе ашарға мәжбүр була. Атакаға ташланып, катакомбанан сығып та ҡарай совет һалдаттары. Әммә уларҙың сығыуын көтөп кенә торған, яҡшы ҡоралланған фашистар утҡа тотоп, миналар яуҙырып, уларҙы шунда уҡ ҡырып һала. Полковник Ягунов та һәләк була. Быны күргән фашистар катакомбаны миналап сығалар, самолеттар бомба ташлай, өҫтәүенә ағыулы газ ебәрәләр. Ярты йыл утҡа тотҡандан һуң, советтарҙың ҡаршылығын һындырып, фашистар таш сығарыу шахтаһына инә ала. 13 мең кешенән ни бары 48 кеше генә тере ҡалған була...

Катакомбаның оҙонлоғо ун саҡрым тирәһенә һуҙылһа ла, экскурсия бары 500 метрлап ҡына ҡараңғы, дымлы туннель буйлап ер аҫтынан бара. Йән өшөткөс шомло, ҡурҡыныс, хәҙер фашистар бомба яуҙырыр, автоматтан ата башлар төҫлө...

Артабан ағалы-ҡустылы икәү Багерово исемле ҡасабаның туғандар ҡәберлегенә барҙы. Унда меңдәрсә исем араһынан аталарының исем-фамилияһын табыуы үҙе бер ыҙа булды. Әммә таптылар! Бар ине атайҙарының исеме мәрмәр ташта, бар ине! Зиннатуллин Гильман Ибрагимович! Бына ул атай! Бына ғына ята ул, ҡул һуҙымында! Рим менән Мир Зиннәтуллиндар мәрмәр ташты һыйпап иланы. 65 йылдан һуң тапты улар үҙҙәренән ике тапҡырға йәш көйө, мәңгелеккә утыҙҙа ғына ҡалған ғәзиз атайҙарын!

Мәрмәр стелалар ҡуйылған ергә тыуған ауылы Ҡотлоюлдан килтерелгән бер ус ҡара тупраҡты һалып, әсәләренән сәләм әйттеләр, уларҙың теге донъяла булһа ла осрашыуҙарына ышаныуҙарын белдерҙеләр. Һәр икеһе үҙ уйына батып, оҙаҡ уйланып ултырҙылар.

Артабан улар Багеровоның музейына һуғылды. Бикле булып сыҡты уныһы. Бер аҙ музей тупһаһында тапана биреп торҙолар. Ниңәлер уларға ошо музейҙа атайҙары Ғилман тураһында берәй документ һаҡланалыр кеүек тойолдо. Шул саҡ урамдан үтеп барыусы ир:

- Музей хужаһы бер нисә өй аша ғына йәшәй, өйөнә барһағыҙ, ул килеп аса торған, - тип адресты өйрәтеп ебәрҙе.

Зиннәтуллиндарға һәр экспонат тураһында ентекләп һөйләне музей етәксеһе. Күп кеше башын һалған икән был ҡасаба янында. Танкыға ҡаршы ҡаҙылған траншея совет һалдаттары, ябай ауыл халҡы, балалар һәм ҡарт-ҡоро мәйеттәре менән тулы булған. Был вәхшилекте төшөрөп өлгөргән совет фотографы үҙе иҫтән яҙып ҡолаған, тинеләр. Музей тулыһынса тиерлек Бөйөк Ватан һуғышына арналған ине. Күпме генә эҙләмәһендәр, һорашмаһындар атайҙарына ҡағылышлы бер әйбер ҙә табылманы. Хушлашып, урамға сыҡҡас ҡына, экскурсовод ҡапыл ниҙер иҫенә төшөрҙө.

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 45-се һанында).**

✓ *Быуындан-быуынға күсә килергә тейеш халыҡ йырҙары, шуны дауам итергә тырышам һәм балаларҙың күңелдәренә һалам. Өмөтлө йәштәр бар, шөкөр.*



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

**Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ йырсыһы, С. Юлаев ордены кавалеры, йөрәктәргә үтеп инерлек моңло тауышлы йырсы һәм бик күптәргә абруйлы остаз Тәнзилә Хәмит ҡыҙы ҮҘӘНБАЕВА быйыл үҙенең күркәм юбилейын - 70 йәшен билдәләне. Ошо айҡанлы йырсының Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында үтәсәк ижад кисәһе алдынан үҙе менән әңгәмәләштек.**

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЙЫРЫ - БУЛМЫШЫМ

➔ **Тәнзилә Үҙәнбаева һәм башҡорт халыҡ йырҙарын айырылғыһыҙ бер төшөнсә итеп ҡабул итеп өйрәнгәнбеҙ...**

- Халыҡ йырҙары - минең бар булмышым. Өфөгә уҡырға килеп, йырсы булырға ҡарар ителгәс тә, репертуарымда башҡорт халыҡ йыры беренсе урында торҙо, сөнки уҡытыусыларыбыҙ бигерәк тә минең кеүек ауылдан килгән балаларҙан халыҡ йырҙарын йырлауҙы талап итә торғайны. Халыҡ йырын башҡарғанда йәш кешенең ысын тәбиғәте, тауыштың бөтә мөмкинлектәре асыла һәм шуға ҡарап уның артабан һәләттәрен үҫтерергә була. "Башҡа әҫәрҙәрҙе лә башҡарғанда тауыштың шулай яңғырарға тейеш", - тип өйрәтә торғайны уҡытыусым Аэлита Хәйрулла ҡыҙы Чембарисова. Мин сәхнәгә лә тәүге тапҡыр "Сәлимәкәй" башҡорт халыҡ йыры менән сыҡтым. Аҙаҡ "Таштуғай", "Ашҡаҙар", "Абдрахман", "Баяс", "Был донъяның ҡәҙерен беләйек", "Әүмеш", "Дала", "Кәрәлек" һәм башҡа байтаҡ ҡына йырҙарҙы өйрәнеп, репертуарымды байыттым. Өфө дәүләт сәнғәт институтында уҡыған осорҙа башҡорт халыҡ йырҙарына, фольклорға мөкиббән киткән кеше, ҡурайсы Юлай Ғәйнетдинов өйрәткән йырҙар әле лә радионың алтын фондында һаҡлана.

Халыҡ йырын тота килеп башҡарып булмай, уны аҡылың менән аңлап, йөрәгең аша үткәреп йырлағанда ғына тамашасы күңеленә барып етергә мөмкин. Башҡорттоң бик күп моңдары араһында "Сәлимәкәй" һәм "Әүмеш" йырҙары айырыуса оҡшай миңә. Тәүгелән хәҙер уҡыусыларыма ла өйрәтәм, ә Әбйәлил яҡтарында сыҡҡан икенсеһе - күңелемә яҡын йыр. "Әүмеш" йырын ҡайҙа барһам да йырларға тырышам, уның юлдарына һалынған тәрән мәғәнә, көйө йөрәккә ятырлыҡ. Радиоға ла яҙҙырғайныҡ беҙ уны: мин йырланым, Ғәли Алтынбаев баянда уйнаны. Үҙемә күрә матур килеп сыҡты, хатта шул замандарҙа радиола "Йыл йыры" булып та танылды. Ҡасан йырлаһаң да актуаль булып ҡалған йырҙарҙың береһе ул.

➔ **Хеҙмәт юлығыҙҙа ҡайһы йылдар ижади яҡтан иң емешлеһе?**

- Заманында режиссер Фәтих Ихсанов Башҡорт дәүләт филармонияһында "Йәдкәр" фольклор-эстрада төркөмөн барлыҡҡа килтерҙе һәм шунда минә лә эшләргә насип булды. Беҙҙең бәхетле йылдар булғандыр инде ул. Институт тамамлаған ғына йылымда Ғәли Хәмзин, Мәүлитбай Ғәйнетдинов менән бергә яңы төркөмдә эш башланыҡ. Был яңы программа шул тиклем ғүмерле булды, 30 йылға яҡын сәхнәләрҙән төшмәне. Сығыштарыбыҙ тарихҡа, фольклорға таянып әҙерләнә ине һәм айырым бер спектакль кеүек барҙы. Шул йылдарҙа режиссер, тарихи дөрөҫлөккә тап килһен, тип, бөтә белгестәрҙе саҡыра, кәңәшләшә торғайны. Беҙгә күренекле ғалим Әхмәт Сөләймәнов, Фәнүзә Нәҙершина, Розалия Солтангәрәева, Салауат Итбаевтар бик күп ярҙам итте. Программаны художество советына тапшырған ваҡытта ҙур комиссия ағзалары алдында сығыш яһай инек. Бөтәбеҙ ҙә сәхнәлә ижад иттек, бер нисә йыр башҡара һалып ҡайтып китмәй инек, ә бер-беребеҙҙе тыңлап, өйрәнеп-өйрәтеп торҙоҡ. Коллективҡа сәнғәт институтын, училищеһын тамамлаған йәш йырсылар, бейеүселәр, ҡурайсылар эшкә килде һәм осталыҡтарын арттырыу, ижад итеү өсөн яңы мөмкинлектәр ала торғайны. Мәсәлән, Ишморат Илбәков, Азат Айытҡолов, Рәмил Ғәйзуллин кеүек оло талант эйәләре "Йәдкәр"ҙә ҡанат нығыттылар, һуңыраҡ беҙгә Венера Рәхмәтуллина, Рушан Биктимеров, Римма Ибраһимовалар килде. Фәтих ағай Ихсанов кеүек үҙ милләтен, халҡын, телен яратҡан, оло йөрәкле шәхестәр быуатҡа бер тыуалыр ул. Ул сиҙәмде күтәреп сыҡҡан төҫлө эш атҡарҙы: айырым кешеләр хәтерендә һаҡланған йыр, риүәйәт, тарихтарҙы бөтә халыҡҡа еткерҙе. Коллективты тотор, етәкләр һәм гастролдәргә йөрөтөр өсөн характер көсө лә кәрәк - барыһын да булдыра алды ул. Шул йылдарҙы, ижади лабораториябыҙҙы бөгөн дә бик һағынам.



➔ **2023 йыл Рәсәйҙә Педагог һәм остаз йылы тип нарыҡланды, тимәк, быйыл һеҙҙең дә йылығыҙ. Һеҙгә ниндәй уҡыусылар килә?**

- Эйе, Өфө сәнғәт училищеһында, хатта үҙем белем алған кабинетта балаларға белем бирермен тип күҙ алдына ла килтермәй торғайным. Әхмәт Гәрәй улы Искәндәров директор сағында гел эшкә саҡырҙы: "Беҙҙә йәштәр "Тәфтиләү" менән "Төйәләҫ"те айырмайҙар, һин килһәң, өйрәтер инең", - ти торғайны. Беҙҙе гел ҡурсалап йөрөткән Флүрә Ноғоманова апай ҙа был саҡырыуға ҡушылғас, ризалаштым һәм Өфө сәнғәт училищеһында эшләүемә хәҙер 16 йыл тулып киткән. Белем усағы быптыр декабрь айында үҙенең 100 йыллығын билдәләне, шул айҡанлы йыл дауамында төрлө конкурстар, фәнни-ғәмәли конференциялар, йомғаҡ концерттар ойошторолдо, һәр кемебеҙ бик әүҙем ҡатнаштыҡ. Әйткәндәй, мин уҡырға килгәндә сәнғәт училищеһы үҙенең 50 йыллығын билдәләгәйне, тағы биш тиҫтә йыл күҙ асып йомған арала үтеп тә киткән бына.

Хәҙерге уҡыусылар, әлбиттә, бер аҙ башҡараҡ. Улар уҡырға имтихан тапшырып инә, ҡабул итеү комиссияһы алдында нимә йырларға тип аптырап тормайҙар - еңел-еңел генә әҫәрҙәрҙең береһен алдан өйрәнеп киләләр. Ә элек ундай нәмә юҡ ине бит, нимә беләһең, шуны тотҡоҡ та йырланыҡ. Хәҙер тағы бер мөһим шарт өҫтәлде уларға - музыкаль белеме булырға тейеш. Беҙҙең йыр булегенә уҡырға инергә теләүселәр йыл да бик күп була, уларҙы өс өлөштән торған конкурс аша үткәреп, иң-индәрен генә "иләп" алабыҙ. Мин уҡытып сығарған бөтә балалар ҙа халыҡ йырҙарын башҡаралар, был улар өйрәнергә тейеш мотлаҡ дисциплина, уҡыу программаһында бар. Быуындан-быуынға күсә килергә тейеш халыҡ йырҙары, шуны дауам итергә тырышам һәм балаларҙың күңелдәренә һалам. Өмөтлө йәштәр бар, шөкөр. Уҡыусыларым араһында халыҡ йырҙарын бик оҫта башҡарғандарҙың күбеһе артабан операға китте. Мәсәлән, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солистары Наҙгөл Ибраһимова һәм Эльвина Әхмәтханова, бик талантлы Азалия Фазылова, Эльвира Исхакова, Эльвина Ҡунафина, Азамат Ғөбәйҙуллин кеүек уҡыусыларым ошо көндәрҙә Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында үтәсәк кисәмдә сығыштары менән йәмләйәсәк. Бөтә йырҙарымды ошо үҙем тәрбиәләгән балаларым йырлап бирер, үҙем бер-икәүһен генә башҡарырмын, тим, сөнки беҙгә шундай шәп алмаш үҫеп етеүен күрһәткем килә.

➔ **Һеҙҙе яратып тыңлаған тамашасыларығыҙға әйтер теләктәрегеҙ ниндәй булыр?**

- Иң изге теләктәрем шул: донъялар имен булһын, йыр-моң менән ҡыуанып ҡына йәшәргә яҙһын. Тамашасылар йырсыны ғына тыңларға килмәй, улар үҙҙәре лә эстән йырлап ултыра. Ә инде йырсының уйҙары йөҙөндә, күҙҙәрендә сағыла һәм йырҙың мәғәнәһенә төшөнгәнме-юҡмы икәне лә залдағыларға асыҡ күренә. Шуға тәбиғәттән бирелгән тауышы, моңо менән халыҡ йырын аңлы рәүештә башҡарған йырсыларҙы халыҡ күтәреп ала, баһаһын бирә - кеше күңеленә бөлзәм булып яғыла ул. Бына шундай моң бүләк итергә әҙерләнәбеҙ ҡәҙерле тамашасыларыбыҙға 25 ғинуарҙа.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәсәй һәм бик күп сит илдәрҙә башҡорт халҡы, теле, йыр-моңон данлаған шәхестәребеҙҙең береһе Тәнзилә Үҙәнбаеваны күркәм ғүмер байрамы менән тәбрикләүҙәргә беҙ ҙә ҡушылабыҙ. Үҙе сәхнәләрҙән төшһә лә, халҡы күңелендә моңло тауышы һәр саҡ йәшәр йырсыға лайыҡлы алмаш тәрбиәләү эшендә уңыштар теләп ҡалабыҙ.**

Сәрүә ҒАРИПОВА
әңгәмәләште.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# СИБАЙҘАР - БЕРЕНСЕ КАНАЛДА!

**Сибайҙа йәшәүсе ғаилә Беренсе каналдағы "Ил менән бергә йырлайбыҙ аш бүлмәһендә" тип аталған Яңы йыл программаһында ҡатнашты.**



Сығышы менән Сибай ҡалаһынан булған, әлеге көндә Татарстан дәүләт камерный хор солисы булып эшләп йөрөүсе Алмас Хөсәйенов һөйләүенсә, программаны төшөрөүҙә уның менән бергә әсәһе Айһылыу, ике апаһы Айгөл менән Алһыу һәм кәләше Сәлимә ҡатнашҡандар. Программа ретро стилендә булғас, яҡташтарыбыҙ Бабаджаняндың "Һинең эҙҙәрең" романсын башҡарған. Алмастың әсәһе Айһылыу Салауат ҡыҙы әйтеүенсә, Беренсе канал эфирында башҡорт телмәре лә яңғыраған. Бынан тыш, шоу-програмала ҡатнашыусыларға традицион яңы йыл ризыҡтарын күрһәткәндәр. Башҡорт ғаиләһе бишбармаҡ, ҡаҙы һәм тултырма әҙерләгән, ҡайнар аш янына ҡорот биргән. Улар тағы ла башҡорт балы, талҡан, сәк-сәк менән бауырһаҡ та тәҡдим иткәндәр. Тапшырыу төшөрөлгән майҙансыҡта эшләүселәр Баймаҡ районынан фермер Фәнис Кәримов биреп ебәргән ҡымыҙҙы тәмләп ҡараған. "Республикабыҙҙы һәм Сибай ҡалаһын күрһәтә алыуыбыҙ беҙҙең өсөн ҙур ғорурлыҡ булды, әлбиттә. Беҙ бөтәбеҙ ҙә ошо ҡала менән тығыҙ бәйлебеҙ: ҡасандыр ошонда студенттар булып, белем алдыҡ; ҡайһыларыбыҙ әле лә ошо ҡалала йәшәй. Программаны төшөргән саҡта беҙ продюсерҙар, режиссерҙар, педагогтар, костюм оҫталары, гримм һалыусылар - ҡыҫҡаһы, бөтөн командаһың йылы мөнәсәбәтен тойҙоҡ. Улар ҙа беҙҙә фәҡәт йылы тойғолар ғына ҡалдырҙы", - тип һөйләй Айһылыу Салауат ҡыҙы.

Яҡташтарыбыҙ бынан алдараҡ та, октябрь айында, "Бөтөн ил менән йырлайбыҙ аш бүлмәһендә" проектында ҡатнашҡайнылар инде. Үкенескә, ул саҡ жюри һайлап алыу турында уларҙы артабан үткәрмәгәйне. "Кастингка мине Беренсе канал продюсеры саҡырып алғайны, уны үткәндән һуң 48 команда араһынан һайлап алыу турына тағы ла Мәскәүгә саҡырҙылар. Беҙ башҡорт халыҡ йыры "Сибай"ҙы һәм "Минең өсөн түгел" тигән әҫәрҙе башҡарғайныҡ. Беҙҙең сығышҡа дәғүәселәр булмаһа ла, жюри билдәһеҙ сәбәп менән беҙҙе артабан үткәрмәне. Продюсер менән редакторҙар ҙа бындай ҡарарҙан аптырап ҡалды, сөнки беҙҙең ғаиләне улар проект лидерҙары тип иҫәпләй ине", - тип һөйләне Алмас Хөсәйенов үҙе. Әйткәндәй, яңы йыл сығарылышын төшөргәндә, тапшырыуҙарҙы алып барыусы Валдис Пельш яҡташтарыбыҙҙы чемпиондар тип атай һәм тамашасыларҙың жюри ҡарары менән ризаһыҙлығын белдерә. Тап бына шуның өсөн дә сибайҙарҙы байрам программаһына саҡырырға булалар ҙа инде.

Әйткәндәй, был ғаиләнең бер нисә быуын музыкаға һәләтле кешеләрҙән тороуы билдәле. Айһылыу Салауат ҡыҙы һөйләүенсә, мәсәлән, уның атаһы оҫта ҡурайсы булған, әсәһе матур йырлаған. Ғаиләлә Алмас ҡына яҙмышын сәхнә менән бәйләргә ҡарар иткән.

✓ *Эксперттар ҡышҡы уйындарға күберәк иғтибар йүнәлтергә кәңәш итә. Ҡышҡы саф һауала саңғыла йөрөү, хатта парк буйлап йәйәү атлау ҙа ғәйәт ҙур энергия бирә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МАЙЛЫРАҠ АША

■ Быйылғы ҡыш үҙенең ҡаты һыуыҡтары менән дә айырылып тора. Өшөмәҫ өсөн юғары калориялы итеп туҡланырға кәрәк ти белгестәр. Иң тәүҙә сәй, ҡәһүә кеүек эсемлектәрҙе көн дауамында әҙерәк эсергә кәрәк. Улар организмдан шыйыҡлыҡты ҡыуа, һәҙәмтәлә һыу-тоҙ балансы менән йылылыҡ әйләнеше боҙола. Кеше һыуыҡты тоймаған да һымаҡ, шуға өшөгәнен аңламай ҙа ҡала. Эҫе сәй эсеп тирләгәндән һуң да һалҡын тейҙереү ҡурҡынысы арта. Шулай уҡ алкоголь ҡәтғи тыйыла. Сәй урынына борос, башҡа тәмләткестәр һалып эшләнгән эсемлектәр ҡулланырға була. Иртәнге ашҡа аҡ май һалынған бутка, авокадо, сыр һалып эшләнгән бутерброд яҡшы. Шулай ҙа артыҡ майлы ашарға кәрәкмәй. Ауыр ризыҡ ашҡаҙанға ҫҙтәмә ауырлыҡ тыуҙыра, шуға ла әҙ-әҙләп, йыш ашарға тырышығыҙ.

■ Байрамдарҙан һуң диета тотоу ашҡаҙан менән бәйле сирҙәргә килтереүе ихтимал. Бигерәк тә асығыу, һуттар менән генә туҡланыу ярамай. Иң дөрөҫө - аҡһымға, йәшелсәләргә бай рацион. 1 кг тән ауырлығына 1 г аҡһым тура килергә тейеш, мәҫәлән, 60 кг ауырлығындағы ҡатын-ҡыҙ 60 г аҡһым ашарға тейеш. 100 г ит, балыҡ, ҡош ите, эремсектә яҡынса 20 г аҡһым була. Гарнирға йәшелсәләр бешерегеҙ. Емеш-еләктә төшкә тиклем ашау яҡшыраҡ. Ғөмүмән, йәшелсәләрҙең крахмалһыҙына, еләк-емештәрҙең бешереп ашап була торғандарына - алма, грушаға өҫтөнлөк бирегеҙ.

■ Көнөнә бер алма ашау кеүрәк яман шешен булдырмай, ти белгестәр. Һынауҙар ҡомаҡтарҙа үткәрелгән. Башта уларҙы күкрәк яман шеше хәүефен арттырыусы канцероген менән эшкәрткәндәр. Һуңынан ике төркөмгә бүлеп, тәүге төркөмгә алманан яһалған экстракт ашатҡандар. Бындай диеталағы ҡомаҡтар 24 аҙна булған. Һәҙәмтәлә алма ашаған ҡомаҡтарҙа күкрәк яман шеше хәүефе тиҫтәләрсә процентҡа түбәнәйгән. Был алмала булған антиоксиданттар менән бәйле, улар күҙәнәктәрҙе зарарлаусы ирекле радикалдарҙы юҡҡа сығара.

■ Ҡарҙан ҡар бабай әүәләүҙең дә файҙалы яғын табырға - мәҫәлән, калорияларҙы яндырырға һәм арҡа, ҡул мускулдарын нығытырға була. Ҡарҙан шарҙар тәгәрәтер өсөн ҡалын итеп кейенгән кеше 300-гә яҡын калория яндыра, ҡар бабай ни тиклем ҙурыраҡ була, шул тиклем көс тә күберәк түгелә. Эксперттар ҡышҡы уйындарға күберәк иғтибар йүнәлтергә кәңәш итә. Ҡышҡы саф һауала саңғыла йөрөү, хатта парк буйлап йәйәү атлау ҙа ғәйәт ҙур энергия бирә. Бары тик ғүмер өсөн хәүефле урындарҙа йөрөмәскә һәм балаларҙы күҙ уңынан ыскындырмаҫҡа ғына кәрәк.

■ Йәшелсә һәм емеш-еләктең төҫө лә мөһим. Тап уларға ҡарап йәшелсә-емештең ниндәй биологик әүҙем матдәгә бай икәнен асыҡлап була. Шуға ла организмды витаминдар менән тулыландырыу өсөн рацион да төрлө төҫлө булырға тейеш. Ҡыҙыл алма, еләк, сейә, ҡыҙыл бороста каротиноидтар бар, улар көслө антиоксидант. С витамины ла күп, шешенеүҙе булдырмай торған матдәләр ҙә бар. Артрит кеүек сирҙән 3 ай буйы еләк ашау нығ файҙалы. Ҡыҙыл һары төҫтәгеләре ҡан баҫымын нормаға килтерә, күк һәм шәмәхә төҫөндәге ҡара көртмәлә, баклажан хәтерҙе нығыта, банан, ананас кеүек һарылары күреү һәләтен яҡшырта.

БӘХӘС ҠОРАМ

**Ике йыл тирәһе элек гәзитебеҙҙең "Мосолман әҙәбе" рубрикаһында "Ярат, әммә табынма!" тип аталған кескәй генә мәҡәлә баҫылып сыҡҡайны. "Йыш ҡына йәштәр бөтә һөйөүен Аллаһҡа түгел, ә яратҡан кешеһенә йүнәлтә. Бындай кешеләр Раббыбыҙҙың исемен түгел, һөйгәненең исемен ҡабатлай. Улар Аллаһ Тәғәлә өсөн түгел, бары тик һөйөклөләре өсөн ҡорбандарға бара. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, йәштәр берберенән илаһилаштыра. Һөйгәндәр бер-береһенә "Мин һине генә яратам", "Һинең өсөн йәшәйем", "Был донъяла минең өсөн һин генә бар" тигән һүҙҙәр бүләк итә һәм Аллаһтан йыраҡлаша..."**

# ЙӘШЛӘЙ ҺӨЙГӘН ЙӘРЕҢ...

## ятҡа ҡалһа

Гәзитебеҙҙә әленән-әле бына ошоноң һымаҡ аҡыллы фекерҙәре менән бүлешкән авторҙарҙың яҙмаларын оло кинәнес менән уҡыйым. Яуапһыҙ мөхәббәт арҡаһында йәштәрҙең үҙ-үҙенә ҡул һалыуы йә һөйгәнен үлтереүе хаҡында һүҙ барғайны ул мәҡәләлә. Күберәк "Ромео һәм Джульетта", "Отелло" һымаҡ әҫәрҙәрҙе уҡып йә сәхнәнән ҡарап үҫкән йәштәргә йүнәлтелгән бындай һүҙҙәр. Егет менән ҡыҙ араһында булған мөхәббәтте бар нәмәнән юғары ҡуйған һинд фильмдарын (беҙҙә лә ундайҙар етерлек) ҡарап, шуға мөкиббән китеп ышанған үҫмерҙәребеҙ араһында ла осрай торған бындай хәлдәр хаҡында ишетмәгән кеше юҡтыр.

Мин хәрби табип булып хеҙмәт иткән осорҙа беҙҙең полкта бер ҡаҙаҡ егете аҫылынып үлгәйне. Имәндәй таҙа, ер һелкетеп баҫып йөрөгән был һалдаттың фажиғәһе бар часты тетрәтте. Кеше үлгәнлеген раҫлау өсөн саҡырылған доктор булараҡ, әлеге һалдатты ентекләп тикшергән мәлдә уның янында "Үҙ иркем менән үләм" тигән яҙыу табылды. Ҡурҡышынан ағарынған командирға уны урыҫ теленә тәржемә итеп бирҙем. Бер аҙ ваҡыттан командир минә (ҡаҙаҡ телен аңлаған берҙән-бер офицерға) әллә күпме хат алып килеп тотторҙо һәм уларҙы тәржемәләргә бойорҙо. Был эш бигүк еңел булмаһа ла, тырыштым, һалдатҡа килгән хаттарҙың мәғәнәһен яҡынса аңланым һәм командирға асыҡлап бирҙем. Егетте әрмегә оҙатып ҡалған ҡыҙ икенсе берәү менән танышыуы хаҡында яҙғайны. Был суицид әлеге лә баяғы "бабайлыҡ" касафаты түгелме икән, тип шикләнгән часть командиры хат йөкмәткеһен ишеткәс, ирken тын алып ҡуйҙы. Хәйер, үҙе уҡ "дед" булып йөрөгән, йәғни бер-ике айҙан "дембел"гә ҡайтып китергә тейешле һалдатты кем ҡыйырһытһын инде...

Ана шул "яуапһыҙ мөхәббәт" арҡаһында үҙ-үҙенә ҡул һалыусыларҙы йәлләп, милләттәштәрем менән ошо юҫыҡта фекерләшеп алмаҡсымын. Беҙҙең йәштәребеҙ араһында ла, үкенескә, шундай хәлдәр булғылап тора бит. Бала сағымда ишеткән бер шаян таҡмаҡ хәтеремдә:

Башҡортса - "кайҙа бараһың",
Урыҫса - "куда пойдешь".
Һөйгән йәрең ятты һөйһә,
Пожалуй, с ума сойдешь...

Минең дә үҫмер сағымда әҙәм балаһын "аҡылдан шаштыра" торған мөхәббәт тигән нәмәгә ышанған осором булманы түгел (һәр йәш кешенең шундай мәле булалыр). Әммә байтаҡ ҡына йәшкә еткән, инде "донъя күргән" кеше булараҡ, бөгөн ошоноң һымаҡ осраҡтарға реаль күҙлектән сығып ҡарауҙы хуп күрәм. Шуға күрә лә, һөйгән йәрең ятты һөйһә, тик шатланырға ғына кәрәктер, тигән инаныуҙамын. Ошо фекеремә дәлил итеп, әллә күпме миҫалдар ҙа килтерергә була.

Элек, бала саҡта, беҙҙең яҡтарҙа һылыу ғына бер апай, үҙен яратып йөрөгән егетте ташлап, уның ике туған ҡустыһына тормошҡа сығып китте. Был ҡыҙға ышанып йөрөп тә, унан ҡолаҡ ҡаҡҡан ағайҙы бик тә йәлләгәнем хәтерҙә. Үҙе лә, әлбиттә, нығ ҡына ҡайғырғандыр тип уйлайым. Әммә бер нисә йылдан әлеге һылыу ҡатын эскелеккә һабышты. Был хәлде күреп йөрөгән әлеге ағай: "Әлдә ул минә ҡатынлыҡҡа бармаған икән..." - тип һөйөнгән, тип һөйләнеләр.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ДӘРТЛЕЛӘР ДӘРТЛӘНДЕРӘ

**Мәләүез районы Смаҡ (Тамъян) ауылы халҡы өсөн былтырғы йыл ваҡиғаларға бай булды. Данлы башҡорт ырыуы Тамъян һәм күренекле шәхесебеҙ Смаҡ Ҡасаев исемдәрен йөрөткән ауылыбыҙ районДың иң билдәле төбәге. Ауыл матур тәбиғәте, данлы тарихы, күренекле шәхестәре менән генә түгел, ә уңған, талантлы һәм әүҙем халҡы менән танылған.**



Райондағы ҙур тантаналарҙың күбеһе ошо ауылда үтте. Август айында бик ҙур әҙерлек менән ойошторолған "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы йыйылған халыҡты ла, саҡырылған мәртәбәле ҡунаҡтарҙы ла хайран итте. Ауыл халҡын дөйөм эшкә әүҙемләштереү, уларҙы халыҡ мәнфәғәттәрен хәстәрләүгә әйҙәү маҡсаты менән районда тик ошо ауылда ғына "Ауылдың почетлы граждандары", "Ауылым патриоты", "Ауылым ғорурлығы", ә татыу йәшәгән, үҙ йорт-ҡураларын ғына түгел, урамдарын да өмәләр яһап төҙөкләндергән урам халҡы өсөн "Ауылдың өлгөлө урамы" тигән маҡтаулы номинациялар булдырылды. Байрам йыл аҙағында Мәләүез районының "Сатурн" телерадиокомпанияһы ойошторған "Йылдың иң-иң ауыл байрамдары" исемле район конкурсында 1 урынға лайыҡ булды.

Ауыл мәҙәниәт йорто һәр саҡ гөрләп тора. Унда эшләп килгән "Нәгеш ынйылары" өлгөлө балалар һәм "Мәләүез ынйылары" башҡорт халыҡ фольклор төркөмдәре (етәксеһе БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Г.И. Хисаметдинова) район-ҡала кимәлендә генә түгел, республика кимәлендә уҙған фольклор фестивалдәрендә күп еңеүҙәр яуланы. Мәҙәниәт йортонда онотолған халыҡ кәсептәрен - балаҫ һуғыу, кейеҙ баҫыу, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының боронғо биҙәнеү әйберҙәрен тергеҙеү, ошо һөнәрҙәрҙе йәш быуынға өйрәтеү өсөн түңәрәктәр эшләй. "Сулпылар" балалар бейеү коллективы (етәксеһе Н.С.Сукбаева) былтырғы Рәсәй халыҡтары мәҙәниәте йылына арналған фестивалдә еңеү яуланы. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың "Хазина" вокал, "Йәнгүзәл" бейеү төркөмдәре лә бик уңышлы эшләп килә. 2022 йылдың октябрь айында район кимәлендәге Башҡорт мәҙәниәте байрамының, ноябрь айында район башҡорттары ҡоролтайы тарафынан ойошторолған I Тамъян ырыуы вәкилдәре йыйынының да Смаҡ мәҙәниәт йортонда уҙыуы юҡҡа түгелдер.

Йәш быуынды тәрбиәләүҙә ауылдың "Әминә" ағинәйҙәр ойошмаһы бик ҙур эш башҡара. Ауылдың "Сәғирә" мәсетендә балаларҙы һәм оло ларҙы уҡытыу, дини байрамдар үткәреү, милли йолаларҙы тергеҙеү, төрлө хәйриә акцияларын ойоштороу, байрамдар үткәреү - улар һәр эште башлап йөрөүселәр. Үҙҙәре лә ауыл халҡы алдында йыш сығыш яһай, йырлап-бейеүгә бик маһирҙар. Мәләүез ҡалаһында уҙған "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр республика конкурсында ҡатнашыусылар алдында "Сабый бишеген ҡотлау" тигән боронғо йоланы күрһәттеләр. Район-ҡала ағинәйҙәре ойошмаһының семинары ла Смаҡ ауылы мәҙәниәт йортонда уҙҙы.

2023 йылда "Айыҡ ауыл" республика конкурсында ҡатнашырға ҡарар итеү ҙә ауылыбыҙҙың уңған, талантлы, әүҙем халҡын, ауылдың данлы тарихын, күренекле шәхестәрен, башҡарған эштәребеҙҙең һөҙөмтәләрен, дөйөм әйткәндә, Смаҡ ауылы халҡының бер ниндәй ауырлыҡтарға ҡарамай, алға ынтылып, дәртләнеп йәшәүен күрһәтеү ине. Конкурстың район күләмендә уҙған I турында еңеү яулау ҙа, һис шикһеҙ, үрҙә һанап үтелгән эштәребеҙҙең һөҙөмтәһе.

**Гөлсәм ХИСАМЕТДИНОВА,**
**Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

✓ ***Банкоматтан аҡса алырға барғанда үҙегеҙ менән балағыҙҙы ла эйәртәһегеҙ икән, унда, аҡса шулай еңел генә табыла икән, тигән аң формалашасаҡ. Аҡса алыр өсөн банкоматҡа барыу ҙа етә, тип уйлаясаҡ ул.***





Икенсе бер танышым йәш сағында ауылындағы иң матур ҡыҙҙы "иҫе китеп" һөйөп, хатта көләш итеп тә алған булған. Тик һуңыраҡ гәйәт янъялсы булып сыҡҡан шул ҡатын менән тормошон бәйләүенә ғүмер буйы үкенеп йәшәүе хаҡында һөйләгәйне.

Күрше ауылда бер апайҙың башҡаларҙы бар тип тә белмәй, бынамын тигән егеттәрҙе кире ҡағып, үҙенең "әҙәләп яратҡан" егетен әрменән көтөп алғаны, шуға тормошҡа сығып, һуңынан һөйгәненән ныҡ рәнйетелеп йәшәгәне хаҡында беләм.

Ҡайһы бер оло кешеләр араһында "беренсе мөхәббәтен" онотмай, юғары хистәрен ғүмер буйы йөрәк түрендә һаҡлағандар ҙа юҡ түгел. Шундай осраҡтарҙы ла беләм: кемдәрелер пенсия йәшенә еткәс, икеһе лә тол ҡалғас, ҡабаттан осрашып, бергә йәшәй башлай. Бер яҡтан уйлаһаң, хәҙер инде арала ҡамасаулаусы һис кем юҡ, беренсе мөхәббәткә дан йырлап, гөрләтеп йәшә лә йәшә, шулай бит? Тик, ғәҙәттә, оҙаҡ йылдарҙан һуң ҡауышҡан бындайҙар бер-береһе өсөн бөтөнләйгә ят булып сыҡҡанын тиҙ аңлай. Һәр ҡайһыһының үҙ балалары, инде үҙ донъяһы булған был парҙар, нәтижәлә, ҡабаттан айырылышырға мәжбүр була...

Бына шундай һәр төрлө тормош хәлдәрен күреп йөрөүенә ҡарамаҫтан, үкенескә, йәштәр "мөхәббәт бер генә, килмәй ул гел генә..." тигән инаныуҙа. Шул арҡала үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙар булып тора. Бынан тыш, мөхәббәт арҡаһында үпкәләшеп, иң яҡын дуҫтарын юғалтҡандар ҙа булғылай. Тормошта дуҫтарың булыу, уларҙы яратыу, хөрмәт итеү ҙә ҙур ғына урын алып тора бит. Бындай бәхәсле осраҡтарҙа ысын дуҫлыҡты хатта мөхәббәтендән дә артығыраҡ күреү кәрәклеге хаҡында урыҫтарҙың элегерәк йырланған бер йыры иҫемдә. Миңә был йыр ифрат та оҡшай ине: "...Ну, а случится, что друг влюблен, а я на его пути, - уйду с дороги. Таков закон: третий должен уйти..." Минең фекерем менән килешмәүселәрҙең күп булыуына шикләнмәйем (айырыуса, йәштәр араһында), әммә әлеге мөхәббәт тип аталған төшөнсәгә бына ошондай ҡараш, минеңсә, һис кенә лә насар түгел.

Иң башта килтерелгән мәҡәләлә Иблестең Аллаһтан алыҫайтыу өсөн ошондай һуҡыр мөхәббәт хистәрен үҫүсә ҡылып, шуның менән кеше күҙҙәрен, аңын томалап ҡуйыуы хаҡында ла бәйән ителә. "Кеше һөйгәненең ысын йөҙөн күрмәй, үҙен дә, Аллаһ Тәғәләгә алып барған юлды ла юғалта..." Мин бына ошо һүҙҙәр менән килешәм: әҙәм балалары, ысынлап та, бер-береһен Аллаһ ризалығы өсөн яратырға тейеш.

Кемдер берәү, бәлки, мөхәббәткә бәйле "суицид" тигән нәмә беҙҙең боронғо диндар ата-бабаларыбыҙҙа ла булған бит, тиер. Хатта, әйтәйек, һыуға батып үлгән "ете ҡыҙҙы" ла миҫал итеп килтереүҙәре ихтимал. Эйе, бөгҙе бер легендаларыбыҙға ярашлы, шундай осраҡтар ҙа булмаған тип әйтә алмайбыҙ. Халҡыбыҙҙың "Ете ҡыҙ" тип аталған йырын ишетмәгән кеше лә юҡтыр. Тик уның легендаһын белмәгәндәр барҙыр тип уйлайым. Белеүемсә, был йырҙың тарихында бер нисә варианты бар. Тәүгеһенә ярашлы, бер егет апалы-һеңлеле ете матур ҡыҙҙы яратып йөрөй. Ҡыҙҙар ҙа, әлбиттә, уға ғашиҡ булған. Ниндәйҙер сәбәп менән, күпмелер ваҡытҡа ҡырға китер булғас, егет уларға: "Ҡайһығыҙ мине иң беренсе ҡаршы сығып ала, шуға өйләнермен", - тип әйткән, имеш. Ҡыҙҙарҙың һәммәһе лә уға тормошҡа сығырға вәғәҙә итеп ҡалған. Әммә был егет киткәс, ҡыҙҙарҙың атаһы уларҙы башҡа кешеләргә кейәүгә бирергә булған. Бының менән ризалашмаған ҡыҙҙар, һүҙ беркетеп, бер юлы тәрән һыуға һикереп, батып үлгән, имеш... Йырҙың бер куплетында ошондай юлдар бар: "Ай, ете ҡыҙ, ете ҡыҙ, ҡайтып килһәм, бере юҡ. Намыҫ һаҡлап күлгә батҡан, гәйеп итер ере юҡ..."

Риүәйәттең икенсе бер вариантында боронғо барымта-ҡарымталар осоро, ҡаҙаҡтар тарафынан урланған ете ҡыҙ тураһында һөйләнелә. Ҡаҙаҡ тотҡононан ҡасып, тыуған иленә ҡайтып етеп барған мәлендә арттарынан ҡыуып килеүселәрҙең ҡулына ҡабат эләкмәҫ өсөн был ҡыҙҙарҙың күлгә батып үлеүе фаразлана.

Легенданың тағы бер өлгөһө бөтөнләйгә тиерлек башҡа эстәлекле. Ете ҡыҙ бер туған түгел, ә тиҫтерҙәр булған тип әйтелә унда. Был әхирәттәр күлгә килеп, аулаҡлап һыу инергә төшкән. Шул арала һыу буйына килгән бер нисә егет йәш һылыуҡайҙарҙың йөҙөп йөрөгәнен күреп, уларҙы күҙәтә башлаған. Ул ғына ла түгел, был әҙәпһеҙҙәр ҡыҙҙарҙың һыуҙан сыҡҡанын көтөп ултырғандар, имеш. Әммә бала саҡтарынан ата-әсәләре тарафынан имани рухта тәрбиәләнеп үҫкән мөслимә ҡыҙҙар яр ситендәге егеттәргә үҙҙәренең тәнен күрһәтеп сығыуға ҡарағанда үлемде артығыраҡ күреп, һыуға сумған... Минеңсә, бына ошо варианты ысынбарлыҡҡа ныҡыраҡ тап килгәндәй. Бында егетен юғалтҡан ете ҡыҙ түгел, ә сит ир-атҡа тәнен күрһәтеүҙе оло хурлыҡ тип һанаған, "намыҫ һаҡлап күлгә батҡан" ояһлсан башҡорт ҡыҙҙары хаҡында һүҙ бара тип аңлау хәйерлерәктер. Һәр хәлдә, әлеге әйтмешләй, "мөхәббәтенә иҫереп" һыуға ташланғандар хаҡында түгелдер, тип ышанам.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# АҠСА ҺӘМ ҒАИЛӘ

### Өлгө күрһәт

Йыш ҡына, балаларыма нисек итеп аҡса тотонорға, аҡса эшләй белергә өйрәтергә, тигән һорау бирәләр. Бында шәхси өлгөң ҙур роль уйнай. Бер ниндәй кәңәш тә атай менән әсәйҙең өлгөһөн алыштыра алмай. Беҙ үҙ өлгөбөҙ менән баланы яҡшыраҡ тәрбиәләйбеҙ. Шуға ла миллионерҙарҙың балаһы ла йышыраҡ миллионер була.

Иғтибар итегеҙ әле, ғаиләлә аҡса тураһында нисегерәк һөйләйһегеҙ? Ҡасан һеҙ өҫтәл артына ултырып, аҡса купюраһын тотоп, ундағы һүрәттәрҙе ҡаранығыҙ? Ундағы архитектура ҡоролмалары символикаһын аңлатҡанығыҙ бармы? Әллә: "Ҡулыңды йыу, аҡса иң бысраҡ нәмә", - тинегеҙме? Үҙ хатағыҙҙы аңланығыҙмы? Баланың ярлылыҡ психологияһына өйҙә үҙебеҙ нигеҙ һалабыҙ.

Күпселек ата-әсәләр үҙенең өлгө булыу яуаплылығын тоймай. Ҡунаҡ булмаһаң ҡунаҡтар килгәс кенә ҡулланаһығыҙмы? Бала ҡунаҡтарҙың үҙенән мөһимлеген тойоп үҫә. Ҡиммәтле берәй әйбер ярһа, балағыҙҙы әрләйһегеҙме? Ә шул әйберҙе, әйтәйек, шул ҡунаҡ ярһа? Ҡулығыҙҙы ҡырҡмаығыҙмы, тип һораясаҡһығыҙ. Әгәр ҙә шулай була ҡалһа, ярай, борсолмағыҙ, әйбер ватылып та китә инде, тип әйтер инегеҙ, моғайын.

Тағы ла бер миҫал. Банкоматтан аҡса алырға барғанда үҙегеҙ менән балағыҙҙы ла эйәртәһегеҙ икән, унда, аҡса шулай еңел генә табыла икән, тигән аң формалашасаҡ. Аҡса алыр өсөн банкоматҡа барыу ҙа етә, тип уйлаясаҡ ул. Элек балалар аҡсаның эшләп табылыуын күреп үҫә ине, хәҙер улар аҡсаны банкомат бирә йәки картаға үҙе килеп ята, тип уйлай. Бының өсөн кнопкаға баҫырға ғына кәрәк, тигән фекерҙә ул.

Балаға ай, аҙна һайын күпмелер аҡса биреүҙе лә күптәр инҡар итә. Кәрәк нәмәһен һораһа, алып бирәм, нимәгә уға үҙенә аҡса биреү, тиҙәр. Бындай аҡсаның 4 ыңғай яғы бар.

**Беренсенән,** бала аҡса тотонорға өйрәнә.

**Икенсенән,** ғаилә бюджетын планлаштырыуҙа ҡатнаша. Уға барыһын да аңлатып әйтергә кәрәк.

**Өсөнсөнән,** бала яуаплылыҡ алырға өйрәнә. Әйтәйек, был сумманы тәмлекәс алырға тотонорғамы, әллә һаҡлап, һалып ҡуйырғамы? Йәки ниндәйҙер ҙурыраҡ әйбер һатып алыу өсөн йыйырғамы?

**Дүртенсенән,** балаға ҙур булмаған сумма биреп, уға аҡсаға бәйле бәләкәй генә хаталар яһарға мөмкинлек бирәһегеҙ. Кеше үҙенең хаталарында тәжрибә туплай икәнен беләбеҙ бит. Киләсәктә ҙур аҡсалар менән ул бындай хаталарҙы ҡабатламаҫҡа мөмкин.

**Балаға кеҫәһенә һалып йөрөтөрлөк аҡсаны нисә йәштә бирә башларға?**

**5-6 йәштә** бөтөнләй бирмәгеҙ. Әле иртә, балала аҡсаға ҡарата ҡыҙыҡһыныу юҡ. Был йәштә бала аҡсаға енел ҡарай, юғалта, кәрәкмәгән нәмәгә тотона. Экономия тигәндә аңлау юҡ.

**7 йәштә** балала аҡсаға ҡарата ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килә. Әммә был йәштә ул әле экономиялай белмәй. Ул быны аңламай ҙа.

**Бодо ШИФЕР.**

## Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

# ЕЛӘК-ЕМЕШ ХАҠЫНДА

**Еләк-емеш күп төрлө файҙалы сифатҡа эйә икәнлеген барыһы ла белә. Ләкин уларға бәйле кире яҡтарҙы ла күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай.**



***Ҡурай еләге*** йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары менән яфаланған кешеләр өсөн бик файҙалы, сөнки унда А витамины күп. Шулай уҡ ҡурай еләгендәге Е һәм РР витаминдары йоҡоһоҙлоҡтан ҡотҡара һәм тирене һығылмалыраҡ итергә ярҙамлаша. Һыуыҡ тейҙергәндә һәм температура булғанда яңы йыйылған ҡурай еләгенә ҡарағанда ҡайнатмаһы яҡшыраҡ. Ләкин быуынға тоҙ ултырыу һәм бөйөр менән яфаланғандарға ҡурай еләген күп ашамаҫҡа тәҡдим ителә.

***Крыжовник*** күпләп С һәм А, шулай уҡ В витаминдар төркөмөн үҙендә туплаусы емеш. Ул ҡан баҫымын көйләү өсөн бик яҡшы профилактик сара. Ләкин ашҡаҙан язваһы һәм бөйән ауырыуҙары ҡиҫкенләшкәндә крыжовник ашауҙан тыйылып торорға кәрәк.

***Ҡарағат*** аҙ ҡанлылыҡты һәм атеросклерозды иҫкәртеү өсөн һәйбәт. Бер ҡалаҡ ҡара ҡарағатта бер лимонда тупланған тиклем С витамины бар. С витаминының көндәлек нормаһын тултырыу өсөн кешегә 150 грамм аҡ, ҡыҙыл йәки 50 грамм ҡара ҡарағат ашау мөһим. Ҡарағат тәнәтмәһе менән йүтәлде дауалайҙар. Ләкин ашҡаҙанда артыҡ кислоталыҡ, гастрит, тромбофлебит (вена ҡан тамырҙарының шешеүе һәм тромб барлыҡҡа килеүе) менән ауырығандарға ҡарағат менән әллә ни мауыҡмаҫҡа кәрәк. Ҡайһы берәүҙәр иҫбатлауынса, балаларға - ҡара, өлкәндәргә - ҡыҙыл, ә ололарға аҡ ҡарағат ашау файҙалы.

***Виноград һәм ҡара көртмәле*** күҙҙәр өсөн файҙалы. Уларҙың составында күҙҙәрҙе һуҡырайыуҙан һаҡлаусы профилактик сара булыусы ресвератрол матдәһе бар. Ләкин ҡара көртмәлене ашҡаҙан аҫты биҙе менән ауырығандарға ҡулланмаҫҡа кәңәш ителә.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

Белгестәр помидорҙы ҡара икмәк, һөт, кефир, балыҡ, банан, шпинат, фасоль, көнбағыш майы һәм картуф менән бер рәттән, кеше организмы өсөн иң файҙалы һәм кәрәкле матдәләр тупланған ун аҙыҡ-түлек исемлегенә индерә. "Кәйеф булмағанда помидор аша", тигән кәңәш ҡыҙыҡ тойолһа ла, ул хәҡиҡәткә тап килә, сөнки помидор үҙендә бәхет гормоны - серотонин туплаған йәшелсә. Нервыларҙы тынысландырыу өсөн айырыуса алһыу помидорҙар файҙалы.



## 23 ЯНВАРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.10 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.50 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25 Х/ф "Гусарская баллада". [12+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Большая премьера. "Нулевой пациент". Основано на реальных событиях". [16+]
22.40 "Большая игра". [16+]
0.00 Т/с "Краткий курс счастливой жизни". [18+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Каменская-3".
3.50 Т/с "Личное дело". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Д/ф "Забих Искужин: парень с берегов Сакмары". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Легенды спорта. [12+]**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 "Алтын тирмә". [6+]**
**0.45 Спектакль "Бесприданница". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. Мурадымовское ущелье. [12+]**

## 24 ЯНВАРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Нулевой пациент". [16+]
22.40 "Большая игра". [16+]
0.00 Т/с "Краткий курс счастливой жизни". [18+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.05 Т/с "Каменская-3".
3.50 Т/с "Личное дело". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Специальный репортаж. [12+]**
**11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**17.00 Автограф. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 "Елкән". [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**23.30, 3.00 История одного села. [12+]**
**1.00 Спектакль "Счастье с неба". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

## 25 ЯНВАРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Нулевой пациент". [16+]
22.40 "Большая игра". [16+]
0.00 Т/с "Краткий курс счастливой жизни". [18+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Каменская-3".
3.50 Т/с "Личное дело". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**10.30 "Курай даны". [12+]**
**10.45 Әлләсе... [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.45 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.45 Интервью. Доступная среда. [12+]**
**15.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 История признания. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань). КХЛ.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Юлдаш plus". Национальный молодежный фестиваль. [6+]**
**2.00 Спектакль "Гильмияза". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 26 ЯНВАРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20, 22.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 "Большая игра". [16+]
0.00 Т/с "Краткий курс счастливой жизни". [18+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Каменская-3".
3.50 Т/с "Личное дело". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45, 3.45 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 "Сулпылар". [0+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Формула меда. [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**1.15 Спектакль "Вишневая гора". [12+]**
**3.15 "Дети Ленинграда". [12+]**
**4.30, 5.30 Вечерний телецентр. [12+]**

## 27 ЯНВАРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". 10-й юбилейный сезон. [0+]
23.25 Д/ф "Двое. Рассказ жены Шостаковича". [12+]
1.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.30 Х/ф "Движение вверх". [6+]
23.55 Х/ф "Салют-7". [12+]
1.45 XXI Торжественная церемония вручения Национальной кинематографической премии "Золотой Орёл". Прямая трансляция.
4.10 Т/с "Личное дело". [12+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 6.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Слово Земли. 2.0. [12+]**
**12.45 "Автограф". [12+]**
**13.15, 17.45 "Курай даны". [12+]**
**13.30, 14.45, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Д/ф "Никогда больше". [12+]**
**15.00 "Городок АЮЯ". [6+]**
**15.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Патриот РФ. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [0+]**
**17.00, 22.00, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Северсталь" (Череповец). КХЛ. [12+]**
**23.00, 4.15 "Ете егет". [12+]**
**23.45 "Дети Ленинграда". [12+]**
**1.15 Спектакль "Наследство". [12+]**
**2.45 Автограф. [12+]**
**3.30 "Честно говоря". [12+]**
**5.00 Үткән гүмер. [12+]**

## 28 ЯНВАРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота". [0+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Герой моего детства". К 60-летию Сергея Супонева. [12+]
11.10 Премьера. "Поехали!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф Премьера. "Больше, чем поэт". Фильм 1-й. К 85-летию Владимира Высоцкого. [16+]
13.25 Х/ф "Интервенция". [12+]
15.25 Д/ф "Владимир Высоцкий и Марина Влади. Последний поцелуй". [16+]
16.15 Д/ф "Письмо Уоррену Битти". [16+]
17.05 Д/ф "Живой Высоцкий". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Своя колея". [16+]
19.55 Д/ф Премьера. "Владимир Высоцкий. Больше, чем поэт". Фильм 2-й. [16+]
21.00 "Время".
21.35 Х/ф "Высоцкий. Спасибо, что живой". [16+]
0.00 Д/ф Премьера. "Гамлет" без Гамлета". [16+]
1.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Т/с "Взгляд из вечности". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Кстати, о бабочках". [12+]
0.35 Х/ф "Перекрёсток". [12+]
3.55 Х/ф "Обет молчания". [16+]
5.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 "Это моя профессия". [12+]**
**9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 "КультУра". [6+]**
**11.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Йырҙарҙа йыллар". Лучшие исполнители башкирских народных песен. [12+]**
**19.00 Специальный репортаж. [6+]**
**19.15, 4.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байык" представляет... [12+]**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30, 1.15 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башкорт йыры-2022". [12+]**
**1.45 Спектакль "Белый пароход". [12+]**
**3.45 История одного села. [12+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Үткән гүмер. [12+]**

## 29 ЯНВАРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Х/ф "Интервенция". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.00, 23.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
16.50 Д/ф Премьера. "Отважные". Специальный репортаж. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
22.35 Т/с Премьера. "Контейнер". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.10, 3.15 Х/ф "За чужие грехи". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.05 Т/с "Взгляд из вечности". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Злая шутка". [12+]
4.59 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [0+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Курай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "АйТеко!" [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 "Дорога к храму". [0+]**
**16.00 Полезные новости. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск). КХЛ.**
**19.00, 2.00 "Честно говоря". [12+]**
**19.45 Формула меда. [12+]**
**20.00, 3.45 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**20.30 Патриот РФ. [12+]**
**20.45 Дознание. [16+]**
**21.00 Д/ф "Ледниковый период". [12+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30, 3.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Спектакль "Мона". [12+]**
**2.45 Историческая среда. [12+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БР АРХИТЕКТОРҘАР СОЮЗЫНА - 85 ЙЫЛ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**1-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Азатлыҡ. Нуғай. Ҡабырға. Трио. Ҡорған. Мулдашев. Яуым. Сер. Ауырса. Адрес. Йомаҡ. Аласыҡ. Абдуллин. Кетәк. Наза. Әмәл. Икар. Блог. Ел. Әй.

**Вертикаль буйынса:** Моратшин. Тултырма. Скаут. Ҡоршау. Әминев. Йод. Атнабаев. До. Тәрбиә. Рәйес. Лайм. Ҡаймаҡ. Яра. Антология. Ыласын. Ғүмер. Нуҡта. Ҡура.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**24 ғинуар "Амеля"** (Н. Крашенинников, А. Балғазина инсц.). 12+
**25 ғинуар "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**26 ғинуар "Әсмә"** (Р. Фәхретдинов, Ш. Шәкүрова инсц.), драма. 12+
**27 ғинуар "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтов, А. Ишбулдина инсц.). 12+
**28 ғинуар "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**24 ғинуар "Я научилась просто, мудро жить..."** А. Ахматова иҫтәлегенә кисә. 6+
**25 ғинуар** Тәнзилә Үҙәнбаеваның юбилей кисәһе. 6+
**26 ғинуар "Вечер камерной музыки"**. 6+
**27 ғинуар "Петербургский эксклюзив"** БР Халыҡ инструменттары милли оркестры концерты. 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*
**22, 28, 29 ғинуар Премьера! "Щелкунчик"** (Ю. Ким). 12.00, 14.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**25 ғинуар "Тоғролоҡ"** (М. Ҡунафин, З. Бураҡаева инсц.), драма. 16+
**28 ғинуар "Море. Остров. Клад"** (Д. Салимзянов), пираттар тарихы. 13.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**25 ғинуар "МИР ОТКРЫТиЯ"** филармония солистары. 18.00 6+
**29 ғинуар "Сын земли"** бейеү театры. 12.00 0+
**"Тормош - ҡуласа"** (Т. Миңнуллин), драма. 18.00 12+

## А. Мөбәрәков ис. Сибай дәүләт башҡорт драма театры

*Учалы ҡалаһында гастролдәрҙә:*
**23 ғинуар "Өлкән улым"** (А. Вампилов), комедия. 12+
**24 ғинуар "День рождения кота Леопольда"** (А. Хайт, Б. Савельев), русса әкиәт. 10.00 0+
**"Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драма. 14.00, 19.00 16+
**25 ғинуар "Аленький цветочек"** (С. Аксаков), русса әкиәт. 12.00 0+
**"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 12+
Учалы районы ауылдарында **"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедияһы менән гастролдәр: **26 ғинуар -** Өргөн, **27 ғинуар** - Ахун, **28 ғинуар -** Комсомольск, **29 ғинуар -** Ураҙ, **30 ғинуар -** Ҡунаҡбай, **31 ғинуар -** Миндәк, **1 февраль -** Уральск, **2 февраль -** Илсе, **3 февраль -** Ҡобағош. 19.00 12+

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (1) дүшәмбе | 7:53 | 9:23 | 13:30 | 16:07 | 17:32 | 19:02 |
| 24 (2) шишәмбе | 7:51 | 9:21 | 13:30 | 16:09 | 17:34 | 19:04 |
| 25 (3) шаршамбы | 7:50 | 9:20 | 13:30 | 16:11 | 17:36 | 19:06 |
| 26 (4) кесе йома | 7:48 | 9:18 | 13:30 | 16:12 | 17:38 | 19:08 |
| 27 (5) йома | 7:47 | 9:17 | 13:30 | 16:14 | 17:40 | 19:10 |
| 28 (6) шәмбе | 7:45 | 9:15 | 13:30 | 16:16 | 17:42 | 19:12 |
| 29 (7) йәкшәмбе | 7:44 | 9:14 | 13:30 | 16:18 | 17:44 | 19:14 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИҒТИБАР!*

# БӘЙГЕ БАШЛАНДЫ!

**Өфөлә педагогтар өсөн бер юлы ике конкурс башланды - 19 ғинуарҙан 14 февралгә тиклем "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы - 2023" һәм "Башҡортостандың баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2023" бәйгеләре старт алды.**

Һайлау турҙары тәүҙә ҡала райондарында үтәсәк, финалистар дөйөм ҡала этабында көс һынашасаҡ. "Йыл уҡытыусыһы" конкурсында өс номинация ҡаралған: "Рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы", "Татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы", "Педагогик дебют" (35 йәшкә тиклемге йәш уҡытыусылар өсөн). Йәш башҡорт теле уҡытыусылары өсөн "Педагогик өмөт" номинацияһы булдырылған. Тажзәхмәт вирусын профилактикалау маҡсатында барлыҡ этаптар ҙа дистанцион форматта уҙғарыла. Ҡатнашыусылар асыҡ дәрестәр һәм оҫталыҡ дәрестәре, синыфтан тыш саралар үткәрә, низағлы хәл-тороштан сығыу юлдарын эҙләй, ойоштороусыларҙың һорауҙарына яуап бирә. Еңеүселәр аҡсалата приздарға лайыҡ буласаҡ. Конкурстар уҡытыусыларҙың алдынғы тәжрибәһен таратыу, һөнәрҙең абруйын күтәреү, мөғәллимдәрҙең белем биреүгә индергән өлөшөн йәмғиәттә танытыу өсөн ойошторола.

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**

*ШИҒРИӘТ*

# ЙЫЛДЫ СӘЛӘМЛӘП...



## Еңел аяҡлы булһын!

Баҫ һин ҡотло аҡ яҫтыҡҡа
Тәклә аяғың менән,
Көндән-көнгә, айҙан-айға
Тулы табағың менән!

Бойҙай сәсһән, башағын йый,
Шалҡан сәсһән - тамырын.
Сей булмаһын, күперелеп
Уңһын бәхет ҡамырың!

Һоҡ теймәһен һоҡланғандан,
Күҙекмәслек йыл бул һин!
Ғазабың да ләззәт булып
Ҡалыр тәҫлә тойолһон!

Ауыр аяҡ менән килмә,
Еңел аяҡ менән кил,
Юллыҡлы бул, ил йортона
Изге ниәт менән ин!

Бысраҡ теләклеләр һине
Йөрөмәһен ҡотортоп:
Кәкре ҡайынға терәтеп,
Төп башына ултыртып.

Өр-яңы йыл! Һәр сабыйың
Өлөшө менән тыуһын,
Йүгереп үткән һәр миҙгелең
Еңел аяҡлы булһын!

**Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА**

## Ишек ҡаға...

Дөп-дөп итеп ишек ҡаға
Тағы Яңы йыл,
Ул - яңы ла, беҙ иҫке шул,
Булмай яңырып.
Һәр ҡыш бер йыл өҫтәй тора
Сәстәрҙе саллап,
Туҡтатып та ҡуйып булмай
Һаҡсылар яллап.
Әйҙә, килгәс уҙ түремә,
Һөйөнөс йөкмәп,
Күңелдә шатлыҡ мул булһын,
Табында - икмәк.
Буш тоғона ҡайғыларҙы
Алып кит төйәп,
Упҡынға күм, беҙҙә улар
Тапмаһын төйәк.
Дөп-дөп итеп ишек ҡаға
Ана, Яңы йыл.
Юҡ, "иҫкерге" килмәй һис тә -
Килә яңырғы!

**Гүзәл СИТДИҠОВА**

## Низәр алып килгәндер?

Яңы йыл етте, яңы йыл,
Беҙ көткәндә белгәндер.
Яңы йыл ул - сер тоҡсайы,
Низәр алып килгәндер?

Яңы йыл - яңы юл башы,
Хәйерле була күрһен.
Күңелдәргә күккә сөйәр
Ҡанатлы ҡеүәт бирһен.

Ҡурҡмайыҡ ҡышҡы бурандан,
Буран өйгә инмәһен.
Утлы-уҡлы өйөрмәләр
Ил өҫтөнә килмәһен.

Яңы йылдың матурлығы -
Буран менән ҡар бит ул.
Аҡ бурандар арьяғында
Тылсымлы яҙ бар бит ул.

**Гөлфиә ИҘЕЛБАЕВА**

## Ҡуян йылына

Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян,
Яңы йылдың хужаһы.
Кәрәк ине һинең менән
Йылды ҡыйыу уҙаһы.

Ҡуян йылы килһә лә,
Батырлыҡҡа мул булһын.
Өркәклекте тамырынан
Ҡоротоусы йыл булһын.

Ҡатҡан бәгерҙәребеҙ
Китһен бер аҙ йомшарып.
Ҡурҡмай, тыныс йәшәһен
Һәр ил, бөтөн Ер шары.

Тормош һынауҙарына
Төшмәйексе ҡойолоп.
Бар теләктәргә өҫтәп,
Мин теләйем ҡыйыулыҡ.

**Ринат СӨЛӘЙМӘНОВ**

*КИТАП СЫҠТЫ*

# БАШҠОРТ ЫРЫУҘАРЫ




**XIX быуатта йәшәгән билдәле башҡорт мәғрифәтсеһе, ғалим һәм яҙыусы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев һәр аҫаба башҡорт өсөн үҙенең сығышын - ҡайһы ырыуҙан булыуын иҫтә тотоуҙы, йондоҙҙарҙы исемләп аңлата алыуҙы, хандар тарихына ҡараған риүәйәттәрҙе һәм өләндәрҙе белеүҙе мотлаҡ, тип иҫәпләгән.**

Ысынлап та, һәр кемебеҙҙең шәхси шәжәрәһе һәр беребеҙҙе быуаттар төпкөлөндә көн иткән ырыуҙаштарыбыҙҙың меңйәшәр тормош ағасы менән тоташтырып, башҡорт халҡының ғәжәп бай тарихи мираҫынан бар булған рухи йыһаныбыҙ асылын аңлау мөмкинлеген бирә. Ырыуҙарыбыҙ тарихын өйрәнеү өлкәһендә беҙҙе киләсәктә аҫыл асыштар көтә тип ышанайыҡ. Ошоларҙы иҫәпкә алып, милләттәштәребеҙҙең барсаһына ла башҡорт ырыуҙары тарихын сағылдырған мәғлүмәттәр менән танышыу бик тә мөһимдер.

Башҡорт ырыуҙары тарихы ғалимдарыбыҙ тарафынан ентекләп өйрәнелеп, байтаҡ ҡына ғилми баҫмаларҙа донъя күрҙе. Башлыса, бындай мәғлүмәттәр рус телендә нәшер ителә ине. Мин дә уҙған быуаттың 90-сы йылдарында тергеҙелгән башҡорт милли хәрәкәтенә ҡушылып китеп, ырыуҙар тарихы менән ныҡлап ҡыҙыҡһынып киткән инсандарҙың береһе. Байтаҡ йылдар үткәс, "Киске Өфө" гәзитендә журналист булып эшләргә насип булды, 2019 йылда башҡорт ырыуҙары тарихын халҡыбыҙға башҡорт телендә еткереү зарурлығы хаҡындағы уйҙарым менән гәзиттең баш мөхәррире Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева менән бүлештем. Ул был фекерҙе ихлас ҡабул итте. Һөҙөмтәлә ошо матбуғат баҫмаһында 3 йыл дауамында башҡорт ырыуҙары тарихы тулыһынса баҫылып сыҡты: 41 башҡорт ырыуы хаҡында хәҙерге фәнгә билдәле булған тарихи материалдар башҡорт телендә донъя күрҙе.

Ошо баҫмала, башлыса, күренекле этнолог, башҡорт академигы Раиль Ғүмәр улы Кузеевтың "Происхождение башкирского народа. Этнический состав, история расселения" тигән монографик хеҙмәтенән һәм Рәсәй фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты грифы аҫтында баҫылып сыҡҡан "История башкирских родов" тип аталған күп томлы китаптарҙан (яуаплы мөхәррире С.И. Хәмиҙуллин) алынған мәғлүмәттәр ҡулланылды. Беҙ ошо баҫмаларҙы әҙерләгән ғалимдарға, шулай уҡ әлеге китапты баҫырға матди ярҙам күрһәткән "Урал" хәйриә фондына оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠШЫЛА ЯМАН ЮҠ,

## мәҡәлдә ялған юҡ

Ябағаны яуға менмә, ялы бар, тип; яман менән ҡоҙа булма, малы бар, тип.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бар нәмәлә лә ағыу бар: самаһы уны йә ағыуға, йә дарыуға әйләндерә.

**(Парацельс).**

Асыулы сағыңда бер ниндәй ҙә ҡарар ҡылма.

**(Сенека).**

Йәмғиәт нисек фекерләй, уның менән шулай идара итәләр. Йәмғиәт ахмаҡ һүҙ һөйләй икән, министрҙар ҙа ахмаҡтарса эш итә.

**(Вольтер).**

Донъяны яратыуға алты көн дә еткән, ә уны юк итеүгә... алты мең йыл кәрәк булыр.

**(Томас Браун).**

Хәҡиҡәт хәҡиҡәткә ҡаршы килә алмай.

**(Джордано Бруно).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: Тормошта осраған һынауҙарға ҡарата мөнәсәбәт тураһында булыр был риүәйәт. Улы атаһынан һорай икән ти:**

**- Атай, мин бик арыным, көнитмешем шундай ауыр, көн һайын ниндәй ҙә булһа ҡаршылыҡ тыуып ҡына тора. Үҙемде ағымға ҡаршы йөҙөп барған һымаҡ тоям. Башҡаса минең көсөм дә, хәлем дә ҡалманы. Нимә эшләргә миңә?**

**Яуап биреү урынына атаһы өс бер төрлө кәстрүлгә һыу һалған да утҡа ултыртҡан. Береһенә кишер, икенсеһенә йомортҡа, өсөнсөһөнә ҡәһүә һалған. Бер аҙҙан кишерҙе, йомортҡаны һауыттан сығарған да, өс кәстрүлдәге һыуҙы бер сынаяҡ кофеға ҡойған.**

**- Нимә үҙгәрҙе? - тип һораған улынан.**

**- Йомортҡа менән кишер бешеп сыҡты, ә ҡәһүә һыуҙа ирене, - тип яуап биргән улыһы.**

**- Юҡ, улым, тәү ҡарамаҡҡа шулай күренә генә ул. Бына ҡара: ҡаты кишер йомшарҙы, ә шыйыҡ йомортҡа ҡатты. Уларҙың тышҡы йөҙө шул көйөнсә ҡалды, ҡайнар һыу тик структураларын ғына үҙгәртте.**

**Кешеләр ҙә шулай: көслө булып күренгәндәр ысынында йыш ҡына көсһөҙ улар. Йомшаҡ һәм наҙлыларҙың, киреһенсә, эске көсө-ҡеүәте ныҒыраҡ була...**

**- Ә ҡәһүә? - тип һораған улы.**

**- О! Бына быныһы иң ҡыҙығы! Кофе яңы мөхиттә бөтөнләй үҙгәрҙе - ҡайнар һыуҙа ул хуш еҫле эсемлеккә әйләнде. Шундай кешеләр ҙә бар арабыҙҙа...**

**Эйе, һәр хәл-торошто, ваҡиғаларҙың ыңғай яғын табып, уларҙан һабаҡ, фәһем һәм ғибрәт алып, тормошонда яҡшы яҡҡа үҙгәртергә тырышырға ғына кәрәк".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 23002

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башкортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** **253-25-44**
**Хәбәрселәр** **252-39-99**
**Матбуғат таратыу** **252-39-99**

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
20 ғинуар 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3267
Заказ - 77